ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискэ Өфө

21-27 октябрь (карасай) 2017

№42 (772)

15 йыл

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Башҡорт булыу өсөн күп кәрәкме,**



йәки Кем ул ысын башҡорт? **3**

**Ырыуҙарыбыҙ...**



ул халҡыбыҙҙың яугирлығы билдәһе **7-9**

**Мөнәжәт, нәсихәт, сүрә...**



**11,15**

**Йомағужа - һыу һаҡлай,**

унын һыуы ни һаҡлай?



**13**

**ТВ-программа 14**

***Александр Македонский кемдер икенсе берәүҙе ғәйеплән һөйләгәндә бер ҡолағын ҡаплар булған. Унан ни өсөн шулай эшләүен һорағас, ул: "Икенсе ҡолағымды ғәйепләнеусене тыңлар өсөн һаҡлайым", - тип яуап биргән.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары БР Ғаилә кодексына балаға мәғәнәһеҙ исемдәр ҡушыуҙы тыйыу тураһында төҙәтеүҙәр индерҙе. Был турала ни уйлайһығыҙ?

***Айҙар ИШКИЛДИН, тарих һәм йәмғиәтте өйрәнеү фәне уҡытыусыһы:*** Башҡортостан парламентарийҙарынан алдараҡ балаларға мәғәнәһеҙ исемдәр ҡушыуҙы тыйыу тураһында закон РФ Дәүләт Думаһы тарафынан ҡабул ителгәйне инде. Ошо закон нигеҙендә Ғаилә кодексына үҙгәрештәр индереләсәк. Хәҙер ЗАГС хеҙмәткәрҙәре балаға исем ҡушҡанда ата-әсәләрҙең сикһеҙ фантазияһын "йүгәнләйәсәк", сөнки уларҙың бәғзеләре сабыйҙарына яңынан-яңы исемдәр уйлап, ҡолаҡҡа ятмаған теләһә ниндәй атамалар килтереп сығара башланы. Эш хатта шуға барып етте: Мәскәүҙә йәшәүсе бер ғаилә яңы тыуған ир балаға БОЧ рВФ 260602 ( йәғни: Воронин - Фроловтар нәҫеленең биологик кеше объекты, 2002 йылдың 26 июнендә тыуған, тигәнде аңлата, йәнәһе) тигән "исем" ҡушырға теләк белдерә. ЗАГС хеҙмәткәрҙәре, тәбиғи, ундай исемде теркәүҙән баш тарта. Бәхеткә, сәйер был ир менән ҡатын суд аша ла теләктәренә өлгәшә алмай. Меҫкен балаға ата-әсәһе арҡаһында бер нисә йыл буйы тыуыу тураһында таныҡлыҡһыҙ йәшәргә тура килгән, тиҙәр. Балаларға мәғәнәһеҙ исем ҡушыуҙы тыйыу тураһындағы законға ил Президенты Владимир Путин тарафынан ошо йылдың майында уҡ ҡул ҡуйылғайны. Унда балаға исем ҡушҡанда һандар, хәреф һәм һандар теҙмәһе, символдар һәм хәреф булмаған билдәләр, алама һүҙҙәр, шулай уҡ ранг, вазифа, титулдар аңлатҡан һүҙҙәрҙе ҡулланыу ҡәтғи тыйыла, тип әйтелә. Был юҡтан алынған талап түгел, асыҡланыуынса, әлеге ваҡытта Рәсәйҙә Океана, Дельфин, Христамирадос, Виагра, Апрель, Принцесса Даниэлла, Царица, Миллионер, Приватизация, Жужа исемле балалар йәшәп ята икән...

Башҡортостан ерлегендә бындай осраҡтар теркәлмәһә лә, иҫкәртеү тәртибендә беҙгә лә ундай законды ҡабул итергә кәрәк, тигәйне ул саҡ БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе К.Толкачев. Күптән түгел , ысынлап та, беҙҙең депутаттар тарафынан да сабыйға мәғәнәһеҙ исем ҡушыуҙы тыйыу тураһында закон ҡабул ителде. Ҡайһы бер ата-әсәләр яңы тыуған сабыйҙарына мәғәнәһеҙ исемдәр ҡушып, шуны онотоп ебәрә: бала бит уларҙың шәхси милке түгел, ә илдең тулы хоҡуҡлы буласаҡ гражданы. Шуға ла киләсәктә бала йәмһеҙ, ҡолаҡҡа ятмаған исем йөрөтөүҙән ғазап сикмәһен өсөн, уның яҙмышын боҙмай торған матур исемдәр һайларға кәрәк; ата-әсәләр балалары яҙмышы өсөн яуаплы икәнлектәрен онотмаһын ине, тип билдәләне К. Толкачев.

**(Дауамы 2-се биттә).**

АФАРИН!

# МОСТАЙ ИСЕМЕ МЕНӘН...

## илһөйәрҙәр тәрбиәләнә

**Өфөбөҙҙәге 158-се башҡорт гимназияһы Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Мостай Кәрим исемен ғорур йөрөтә. Яҙыусының тыуыуына 100 йыл тулыуға арналған саралар ҙа тап ошо гимназия диуарҙарында "Мостай уҡыуҙары" ҡала әҙәби-ижади конкурсына йомғаҡ яһауҙан башланып китте. Унда бөйөк һүҙ оҫтаһының ижадын яратҡан баш ҡала мәғариф учреждениелары уҡыусылары, уҡытыусылары, яҙыусылар, журналистар, театр артистары, төрлө кимәлдәге етәкселәр ҡатнашты.**

Гимназияла 2008 йылдан алып үткәрелгән "Мостай уҡыуҙары" конкурсы белем усағының матур бер йолаһына әүерелгән. Быйыл ойоштороусылар "Беҙҙең Мостай" интернет-викторинаһы, яҙыусы әҫәрҙәре буйынса эшләнгән буктрейлер, йәйәүлеләргә Өфө буйлап экскурсия маршруты проекты, "Пушкин, Туҡай һәм Кәрим" рәсемдәр конкурсы буйынса өс йөҙҙән ашыу эш ҡабул иткән. Йылдағыса, призлы урындар яулаған уҡыусылар грамоталар һәм китаптар менән бүләкләнде, ә иң яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәшкән ун һигеҙ уҡыусы һәм педагог ошо сара ваҡытында тәбрикләнде. Конкурс уҡыусыларҙың белемен һынап ҡарау өсөн генә түгел, ә уларҙың видео төшөрөү оҫталығын, экскурсия маршруттары төҙөгәндә баш ҡаланың мәҙәни үҙәктәрен белеү-белмәү кимәлен, рәсем төшөрөү һәләтен дә һынаны.

**(Дауамы 3-сө биттә).**



*Гимназия уҡыусылары Мостай Кәримдең улы Илгиз Кәримов менән.*

12+

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төнөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө енел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# КЕШЕЛЕКЛЕ БУЛАЙЫҠ!

***Камила БАЯЗИТОВА, пенсионер, Әлшәй районы:*** Донъялар үҙгәреү менән бәйле, хәҙерге заман кешеһе күп тә түгел, ун йыл самаһы элек йәшәгән әҙәм кеүек фекер йөрөтмәй. Йәмғиәттә тормошҡа ҡарата фекерҙәр шул тиклем тиҙ үҙгәреүенә иҫең китеп ҡуя ҡайһы саҡ. Бөгөнгө заман кешеһе бөтөнләй икенсе ҡиммәттәр менән йәшәй, "Башҡаларҙы уйлағансы, иң тәүҙә үҙеңде ҡайғырт", тигән уй унын аңына ныҡлап һеңгән.

Мин ғүмер буйы Өфө ҡалаһында йәшәнем, хаҡлы ялға сыҡҡас, ауылға ҡайтып, донъя көтә башланым. Элек ҡалала, күп ҡатлы йортта йәшәгән кешеләр ҙә бер-береһенә иғтибарлы, ихтирамлы мөнәсәбәттә була торғайны. Әле лә, баш ҡалаға килһәм, элекке таныштарым, күршеләрем менән күрешеп, хәл-әхүәлдәрҙе һөйләшеп алабыҙ. "Һин ауылға күскәс, берәү ҙә йорт тирәһенә сәскәләр ултыртмай, тәрбиәләмәй", - тиҙәр. Ысынлап та, хәҙер ҡалала түгел, ауыл ерендә лә кешеләр үҙ биләмәһе булмаған урында сәскә ултыртып тәрбиәләү түгел, хатта юлда ҡамасаулап ятҡан ташты ла ситкә алып ташламай. Ҡыҙғаныска күрә, башҡорт ауылдарында ла заман ҡасафаттары тамыр йәйә.

Уйлай китһәң, башҡорт кешеһенә хас булмаған күп һыҙаттарҙы үҙләштерәбеҙ хәҙер. Элек сит милләт кешеләре лә башҡорттоң ихлас, ҡунаҡсыл, ярҙамсыл булыуын билдәләп яҙған. Беҙ йәш саҡта иһә, Совет власы осоронда, һәр кем берберәһенә туған, яҡын дуҫ тип ҡарай, кемгәлер ярҙам итеү, ниндәйҙер хәл-ваҡиғаға битараф ҡалмау ғәҙәти күренеш ине. Заман үҙгәрә, тип, милләттәштәрем башҡорт халҡының иң күркәм сифаттарының береһе - кешелекле булыуын юғалтмаһын ине. Ябай ғына күренеш кеүек тойолһа ла, күршеһенә иғтибарлы булмаған кеше ауыр хәлдә ҡалған башҡаларға ла ярҙам ҡулы һуҙмаясаҡ. Шуға ла, сирләп, урамда ҡапыл хәле насарланып китеүселәргә илтифат итеп, хәлен һорашыу, ярҙам итеү бик һирәк күренешкә әйләнде бит. Кешелекле әҙәм үҙе йәшәгән ергә, бөтә тереклеккә ҡарата ла һаҡсыл ҡараштa була. Үҙ мәнфәғәтен генә ҡайғыртыу һәҙәмтәһендә әҙәм кешелекле булыуҙан яҙа, башҡаларҙың аһзарына ла ҡолаҡ һалмай, халыҡ менән күмәкләп башҡарыла торған эштәргә лә ҡыҫылышы юҡ тип тоя башлай үҙе. Бөгөн был йыш осраған күренеш, беҙҙең арала берҙәмлек булмауы ла ошоға бәйле, минеңсә. Элекке кеүек, башҡалар хәлен белеп, ҡыуаныс-ҡайғыларын уртаҡлашып, берҙәм йәшәргә, тирә-йүндәгеләргә иғтибарлы булырға кәрәк, тип әндәшәм милләттәштәргә.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары БР Ғаилә кодексына балаға мәғәнәһеҙ исемдәр ҡушыуҙы тыйыу тураһында төҙәтеүҙәр индерҙе. Был турала ни уйлайһығыҙ?

**(Башы 1-се биттә).**

***Ләйлә СӘЛӘЙМӘНОВА, Баймаҡ районы һәм ҡалаһының ЗАГС бүлеге начальнигы:*** Сабыйға исем биреү бик мөһим, яуаплы бурыс ул, тип әйтер инем, сөнки кеше был исемен - оҡшаймы уға, юҡмы - ғүмер буйы йөрөтәсәк. Исеме ниндәй - есеме шундай, тигәнсә килеп сығыуы ла бик ихтимал бит әле ул. Исем, ысынлап та, кеше яҙмышына йоғонто яһай, тип раҫлай ҡайһы бер белгестәр. Бында дөрөҫлөк барҙыр, моғайын. Үкенескә күрә, ҙурайғас, ата-әсәһе ҡушҡан исемен яратмай, алыштырып йөрөүселәр ҙә осрай. Бына шулай килеп сыҡмаһын өсөн ата-әсә тәүҙән үк ныҡлап уйлап, кәңәшләшкәндән һуң ғына ниндәйҙер ҡарарға килергә тейеш. Иң мөһиме: исем яғымлы, матур яңғырашлы ғына түгел, мәғәнәле лә булһын. Юғиһә, халыҡ араһында ниндәйҙер берәй популярлашып киткән исемде тота ла ҡушалар, ә уның мәғәнәһен, йә булмаһа, бала ҙурайып, олоғайғас, был исемдең нисек яңғыраясағын уйлап та бирмәйҙәр. Был бала алдында ғына түгел, үҙеңдең гражданлыҡ бурысың алдында ла яуапһыҙлыҡ ул, минеңсә. Шуға күрә, Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттарының бындай ҡарарға килеүен хуплайым, мәсьәлә дөрөҫ ҡуйыла. Юҡ-юҡта килеп осрай бит, юғиһә, сәйер исемле кешеләр. Ә былай беҙҙең район ерлегендә ундайҙар юҡ: башҡорттар ҙа, рустар ҙа өйрәнелгән, күнелгә ятыш исемдәр һайлай балаларына. Мәҫәлән, һуңғы ваҡытта Динислам, Мәликә, Айгүзәл, Тамерлан, Самира, Савелий тигән исемле балаларға тыйыу тураһында таныҡлыҡтар тултырҙыҡ. Был исемдәрҙе ғорур йөрөтһөн улар, бәхетле булһындар.

***Фәүзиә ЙӘНТИЛИНА, педагогика ветераны:*** Балаларыбыҙға мосолман исемдәре биреү - Раббыбыҙ аманаты. Аллаһы Тәғәлә фани донъяға әҙәмде иман әһеле итеп юҡтан бар ҡылды һәм ата-әсәгә аманат бирҙе. Шул аманаттың иң беренсеһе - балаға мосолман исеме ҡушыу. Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт ғәләйһис сәләм хәҙис итеп әйтеп ҡалдырған: ҡыямәт көнөндә үҙ исемең һәм атаәсәң исемдәре менән саҡырыласаҡһығыҙ. Шуға күрә, балаларығыҙға гүзәл исемдәр ҡушығыҙ, тип. Ошо аҡыл сабыйға исем ҡушыуҙың ни тиклем мөһим, әһәмиәтле ғәмәл булып тороуын раҫлай. Ул ниндәй заманалар килгән хәлдә лә, беҙҙең өсөн мотлаҡ һәм кәрәкле булыуҙан туҡтамай. Ә бит боронғо диндар атабабаларыбыҙ быны яҡшы аңлаған һәм балаларына һәр исемдең мәғәнәһен төшөнөп ҡуша торған булған. Шәжәрәләребеҙҙе генә алып ҡараһағыҙ ҙа был бик асыҡ күренеп тора. Хәҙерге көндәрҙә, әлбиттә, бик улай уҡ боронғоса түгел, ә замансараҡ яңғырашлы, мәғәнәле исемдәр ҙә етерлек: Заһир, мәҫәлән, бөйөк, матур, уныш килтереүсе тигәндә аңлата. Ҡадир - бик көслә, ҡеүәтле, ҡаҡшамаҫ, еңелмәҫ мәғәнәһен бирә. Йәмил, Самат, Сабир, Кәбир, Кәрим һәм башҡа шундайыраҡ исемдәр һайларға була. Ҡыҙ балалар өсөн дә матур мәғәнәгә эйә гүзәл исемдәр бик күп: Әминә, Әнисә, Асия, Васимә, Ғәйшә, Ғәзилә, Ҡәҙриә, Кәримә, Зөһрә һәм башҡалар. Исемдәр китабынан йә интернеттан ҡарап та матур мосолман исемдәрен табырға була, бергәләп эҙләгеҙ генә. Юғиһә , ниндәйҙер бер ят исем ишетелеп ҡала, оҙаҡ уйлап тормаҫтан, сабыйға уны ҡушып та ҡуялар. Әҙ булдымы ни ундай "мода" ҡорбандары! Хәтерләйһегеҙме, Аидалар күбәйеп китте бер заман. Бәхтиһән, уның мәғәнәһе боронғо грек мифологияһынан ер аҫты убыры, мәйеттәр батшалығы тигәнде аңлата икән, тәүбә! Эрнст, Тельман, Фердинанд кеүек немец исемдәре лә, Менделеев таблицаһынан Уран, Радийҙар ҙа, Рубин ише минералдар атамаһы ла ҡалманы бит. Ә берәй немец менән урыҫта башҡорт исемле кешене осратҡанығыҙ бармы? Ә беҙ нинә сит исемдәргә йәбешеп ятабыҙ? Үкенескә, күптәр аңламай: исем баланың яҙмышына йоғонто яһай, хәҙер ғалимдар ҙа шундай фекергә килде. Тимәк, балағыҙ киләсәктә бәхетле, өләшлә, даланлы, һауһаҡ, оҙон ғүмерле, ҡәҙерле йән эйәһе булһын, тиһәгеҙ, динебеҙгә, иманыбыҙға хыянат ҡылмағыҙ, матур, мәғәнәле мосолман исемдәре һайлағыҙ.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!



**Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһының иң ҡыҙыу мәле. Ул баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын, тотороҡлолоғон билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, хатта аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мәл, тип баһалана.**

● **Һәр ваҡыттағыса, уҡыусыны ылыҡтырыр вәғәҙәләребеҙ етерлек.** Берҙән, күп һорауҙарығыҙға яуап бирер, ниндәйҙер ауырлыҡтарға юлыҡҡанда уларҙы еңер сара, борсолоуҙар мәлендә - йән тыныслығы, күңел төшөнкөлөгө булғанда - рухландырыр, сәмләндерер һүҙ әйтер матур йөкмәткеле баҫма алаҫаҡһығыҙ ҡулдарығыҙға. Быны өсөн беҙҙең һәҙгә почта бүлексәһенә инеп, йә почтальонға мөрәжәғәт итеп, 50665 индексы "Киске Өфө"гә - **554 һум 82 тингә**, 50673 индексыһына (ойошмалар) - **584 һум 82 тингә** яҙылырға ғына ҡала. Ә Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары, I һәм II группа инвалидтары беҙҙең гәзиткә **499 һум 08 тингә** генә яҙыла ала.

● **Уҡыусыларыбыҙ гәзитебеҙҙе, үҙе бүләк ул, тип ҡабул итһә лә, даими рәүештә дөртләндереү, бүләкләү саралары ла тәҡдим итеп тороуыбыҙҙы беләһегеҙ.**

Октябрҙә 2018 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән уҡыусыларыбыҙҙы шулай уҡ бүләк-китаптар көтә. Ул китаптар араһында Мәүлит Ямалетдиновтың **"Ҡөрьән-Кәрим сүрәләренә шиғри аңлатма"**, Т. Кусимованың **"Башҡорт исемдәре"**, **"Башҡорт халыҡ эпосы "Урал-батыр"**, Варис Ғүмәровтың **"Тыуған яҡтың шифалы үҫемлектәре"**, Мөхәмәтсәлим Өмөтбаевтың **"Әҫәрҙәр. Хеҙмәттәр"**, Илгизәр Диҡҡәттең **"Башҡорт көсө"**, Рәшит Назаровтың **"Ер һәм йыһан"**, Риф Әхмәҙиевтың **"Хәтер мәле"**, Хисмәт Юлдашевтың **"Һуҡмаҡ"**, Тамара Ғәниеваның **"Ғүмер кисеүҙәре"**, Әнисә Таһированың **"Киске шәфәҡ йыры"** һәм башҡа китаптар бар. **Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!**

Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**, e-mail: **kiskeufa@mail.ru**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Республикала башҡорт теленән яңы дәреслектәр һәм тейешле методик комплектар әҙерләнәсәк. Был турала Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Республика көнөнә арналған тантаналы йыйылыштағы сығышында белдерҙе. Ул шулай уҡ бынан алдараҡ Башҡортостандың дәүләт телдәрен һәм республика халыҡтары телдәрен үҫтереү буйынса саралар тураһында Указға ҡул ҡуйыуын, телде уҡытыу өлкәһендәге проекттар өсөн гранттар булдырылыуын, башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү фонды ойоштороласағын билдәләне.

✓Башҡортостан Башлығы стипендияһына лайыҡ булған 100 талантлы уҡыусының исемдәре билдәле булды. Улар ағымдағы йыл дауамында ай һайын 700 һум күләмендә аҡсалата бүләк аласаҡ. Һәләтле балалар яҡшы уҡығандары, спортта, художество һәм музыкаль ижадында уңышҡа өлгәшкәндәре өсөн билдәләнде.

✓Өфөнөң Конгресс-холында Беренсе Рәсәй-Ҡытай нейрохирургтары конгресы үтте. Унда Мәскәүҙән, Санкт-Петербургтан, Новосибирскиҙан, Екатеринбургтан, Ҡаҙандан, Өфөнән, Ҡурғандан, Ставрополдән, Краснодарҙан, Түбәнге Новгородтан, Һамарҙан һәм башҡа ҡалаларҙан Рәсәйҙең алдынғы ғалимдары ҡатнашты. Ҡытай Халыҡ Республикаһы, Норвегия һәм Канада профессорҙары форумдың абруйлы ҡунаҡтары булды.

✓Республикабыҙҙың абруйлы баҫмаларының береһе - "Башҡортостан" гәзите 100 йыллыҡ юбилейын билдәләй. 3 ноябрҙә Конгресс-холда байрам сараһы уҙа. Кисәлә баҫма тарихының сағыу биттәренә, гәзит ойошторолғандан алып һәм беҙҙең көндәргә тиклем уға етәкселек иткән баш мөхәррирҙәргә, һәләтле ҡәләм оҫталарына ҙур иғтибар бүлеү ҡаралған. Шиғырҙар һәм йырҙар, кисәнең арҙаҡлы ҡунаҡтары, журналистика ветерандары, яҙыусылар, хеҙмәттәштәрҙән ҡотлау һүҙҙәре яңғыраясаҡ.

✓Өфөләге Һуҡырҙар өсөн махсус китапхананың китап фонды Брайль системаһы - рельефлы-нөктәле тактиль шрифт буйынса яҙылған Ҡөрьән менән тулыланды. Ошо бүләкте, шулай уҡ башҡа Ислам әҫәбиәтен учреждениеға Башҡортостан Республикаһы мосолмандары Диниә назараты мөфтөйөнөң беренсе урынбаҫары Айнур Арыҫланов тапшырҙы.

*ӘЙҘӘ, ФЕКЕР АЛЫШАЙЫҠ!*

# БАШҠОРТ БУЛЫУ ӨСӨН КҮП КӘРӘКМЕ,

## йәки Кем ул ысын башҡорт?



**Ысынлап та, кем һуң ул ысын башҡорт? Ошо үҙемде ҡыҙыҡһындырған да, борсоған да һорауҙы гәзит уҡыусыларға ла биреү ниәтендә ҡулыма ҡәләм алдым, хөрмәтле милләттәштәрем. Хәҙерге заман кешеләре араһында "Бына, исмаһам, ысын башҡорт!" тигән оло баһаға лайыҡлылар бармы? Ысын башҡорттоң төп сифаттарын билдәләүсе критерийҙар ниндәй һәм хәҙерге заманда ысын башҡортто кемдәр тәрбиәләй, үҫтерә?**

Яҙғандарым өгөтләү йәиһә зарланыу, үпкәләү формаһын алып, мәкәләмдең бәсен төшөрмәү маҡсатында һорауҙарыма яуаптарҙы үҙем күреп-белгән, ҡасандыр аралашкан кешеләрем араһынан, үҙем кисергәндәрҙән эҙләргә ҡарар иттем. Был һорауҙар, әлбиттә, башымда 9-10 йыл йөрөй, ләкин гәзит уҡыусылар хөкөмөнә әле генә тәҡдим итергә ниәтләндем. Тик мин телгә алырға йыйынған кешеләрҙең ҡайһылары был донъяла юҡ инде, иҫәндәре лә әллә ҡасан үҙ вазифаларын алыштырған.

Ҡалабыҙҙың 7-се һанлы мәктәбендә эшләгәндә ата-әсәләр комитеты рәйесе Нурзия Ҡорманова менән элеваторҙың ул ваҡыттағы директоры Әкрәм Әгзәм улы Ниғмәтуллинға ярҙам һорарға киттек. Класымдағы уҡыусыларымдың күптәренең ашхана өсөн түләргә ауырлыҡ-ыуын аңлата башлағас, Әкрәм Әгзәм улы, бер һүҙ ҙә әйтмәй, баш бухгалтерын саҡыртып алды. "Һеҙгә ярҙамды аҡсалата бирә алмайбыҙ, ондо һатып, аҡсаға әйләндереп, балаларҙы ашатығыҙ", - тине ул. Элеваторҙан алып ҡайтҡан тоҡтарҙы ҡуртымға алынған бер бүлмәле фатирыма бушатып, уларҙы аҙна буйы һатып йөрөлдө. Шул аҡсаға уҡыусыларымды өс ай буйы ашханала бушлай ашатканым иҫкә төшкән һайын Әкрәм Әгзәм улына рәхмәттәр уҡыйым. Ауыр тупрағы еңел булһын мәрхүмдең, йәне йәннәттә, үҙе ожмахтың түрендә булһын. Күрәһең, Әкрәм Әгзәм улы кеүек ысын башҡорт көнө төшөп килеүсе милләттәштәренең хәленә битараф була алмай, хәленән килгән тиклем ярҙам итеүҙе үҙенең бурысы һанай. Ысын башҡорт булған кешегә мохтажлыҡ кисереүсе милләттәштәренең көнкүрешен тәфсирләп һөйләп тороуҙың да, баш әйеп һорауҙың да кәрәге юҡ. Ул үҙ милләтен тын алышынан аңлай, ярҙам ҡулын һуҙа һәм шунан үҙе лә, мохтаждар ҙа ҡәнәғәтлек кисерә.

Заманында Сибай ҡала хакимиәте башлығы булған Зиннур Ғөбәйҙулла улы Йәрмөхәмәтовтың фатирһыҙ милләттәштәрен торлаҡлы итергә самалауын һиҙемләү ауыр түгел ине - яңы һалынған туғыҙ ҡатлы йорттан күптәребеҙ тик ошо халҡы өсөн көйөнөп йәшәгән бөйөк шәхесебеҙ арҡаһында фатирлы булды. БДУ-ның Сибай институты директоры булып эшләгән осорҙағы эштәрен дә баһалап бөтөү мөмкин түгел! Зиннур Ғөбәйҙулла улының туған телгә ихтирамы, аҡыл һығылмалылығы, студенттарын ижади үҫтереү өсөн һалған көсө - үҙ милләтенә талапсан булып, уның үҫешенә ҡулынан килгән тиклем шарттар тыуҙырған ысын башҡорт һыҙаттары ул.

Күп йылдар буйы табип булып эшләүсе, Башҡортостандың атҡаҙанған табибы Тәлғәт Әхтәм улы Солтановтың күренекле олатаһы иҫтәлегенә Булатовтар премияһын булдырып, Баймаҡ районындағы Әбделкәрим мәктәбе уҡыусыларын уҡыуҙа дәртләндереүен милләт үҫешенә өлөш индереүсе ысын башҡорт сифаты тип һанамай сарам юҡ. Ҡайҙа ғына эшләһә лә, милләте өсөн янып-көйөп йәшәгән Тәлғәт Әхтәм улына күпселек Урал арьяғы халҡы рәхмәтле, тиһәк тә арттырыу булмаҫ.

Форсаттан файҙаланып, ысын башҡорттоң милли һыҙаттарын билдәләргә ниәтләнгәндә, бөгөнгө көндә Хәйбулла районы мәғариф бүлеге етәксеһе Сиражетдинов Юлай Дидар улының башҡорт телен күтәреүҙәге ролен әйтмәй булдыра алмайым. Директор ҙа, урынбаҫарҙары ла урыҫ милләтенән булған Целинный мәктәбендә эшләгәндә мәктәп етәкселеге беҙгә үҙ телебеҙҙә һөйләшергә рөхсәт итмәй торғайны. Мәктәбебеҙҙә Юлай Дидар улы мәктәп директоры булып эшләй башлағас ҡына 30-40 саҡрымда урынлашҡан башҡорт ауылдарына мотоцикл менән барып, тоҡ тултырып әлифба китабы, башҡорт теленән дәреслектәр йыйып йөрөлдө, үҙ телебеҙҙә һөйләшеүҙәргә ҡуйылған сикләүҙәр бөттө. Ниһайәт, мәктәп башҡорттарының хеҙмәт тормошо тәбиғи хәленә керҙе.

Шулай уҡ БСТ каналындағы "Тарихи мөхит" тапшырыуының авторы Салауат Хәмиҙуллиндың башҡорт тарихын үҙ халҡына ғына түгел, башҡа халыҡтарға ла еткереп, милләтебеҙ абруйын күтәреүе, ул - ысын башҡорт булыуҙың өлгөһө. "Тамыр" балалар телеканалының (етәксеһе Гөлназ Ҡолһарина), "Байыҡ" тапшырыуының (проекттың етәксеһе Рита Өмөтбаева) милләт үҫешенә йөгөнтоһо әйтеп бөткөһөҙ хазина. Был тапшырыуҙарҙы нисәмә йылдар алып барыусы ҡыҙҙарыбыҙ ҙа ысын башҡортлоҡ өлгөһө күрһәтә. Шулай уҡ милләттәштәребеҙҙе әйҙәүсе лә, күтәреүсе лә республикабыҙға билдәле байтаҡ кешеләрҙе һанап үтергә булыр ине бында. Уларҙың барыһын да телгә ихтирам, милләт үҫешенә, уны үҫтереүгә өлөш индереү берләштерә. Тимәк, башҡорт булып тыуаһың, ә милләт булып берләшәһең, бер маҡсат, бер үк ниәт менән йәшәйһең булып сыға.

Ысын башҡорттоң кешелек сифаттары әллә ни ҡыҫҡырып та тормай, әммә һәр ҡылған ғәмәленән хатта бер тапҡыр аралашҡан кешеләр ҙә ҡәнәғәт ҡала, ғүмере буйы рәхмәттәр уҡый, үҙе лә уларға оҡшарға тырыша, күңелдәрендә изге теләк, изге ниәт йөрөткәндәре фәһем ала. Баҡһаң, ысын башҡорт бер кемгә лә һөрән һалмай ғына үҙ башҡортон тәрбиәләй ҙә икән! Юғарыла әйтеп үтелгән мәҡәлә геройҙарының һәр береһе үҙ мөмкинлегенән файҙаланып, милләттәшенең тормошон, яҙмышын аҙ ғына булһа ла еңеләйтеү өсөн үҙ өлөшөн индергән ябай кешеләр (һәр хәлдә, танау сөйөп,коллегаларынан бысраҡ эҙләп, үҙҙәрен әллә кемгә һанап йөрөгәндәр түгел). Ҡалғандарыбыҙға ла ысын башҡорт булып йәшәү өсөн күп тә кәрәкмәй, бары тик милләттәштәребеҙҙең көнкүштәренә, ҡылған изгелектәренә рәхмәтле була белеү, бер-беребеҙҙең көнкүрешенә ихтирамлы, иғтибарлы булыу ҙа етә, минеңсә.

Башҡорт булып тыуған һәр кеше лә башҡортса һөйләшеп йәшәй ала, әммә милләтен яҡларлыҡ, аңларлыҡ ысын башҡорт булып китеү һәр кемгә бирелгәнме? Ғөмүмән, ысын башҡорт тигән төшөнсә бармы, һеҙ нисек уйлайһығыҙ, хөрмәтле милләттәштәр? "Киске Өфө" биттәрендә фекер алышайыҡ әле ошо темаға.

**Нәзиә БИКБОВА,**
**Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, хеҙмәт ветераны.**
**Сибай ҡалаһы.**

*АФАРИН!*

# МОСТАЙ ИСЕМЕ МЕНӘН...

## илһөйәрҙәр тәрбиәләнә



**(Башы 1-се биттә).**

- Был сараны йыл да ҙур кинәнес менән үткәрәбеҙ. Мостай Кәрим ижады аша йәш быуынды юғары сәнғәткә, мәҙәниәткә, әҙәбиәткә ылыҡтырыу мөмкинлеге булдырған белем усағының эше бөтәһе өсөн дә өлгөлө. Сөнки беҙ бөгөн "Мостай уҡыуҙары"на йомғаҡ яһауҙан тыш, гимназияла Драматургия һәм театр сәнғәте музей-кабинетының асыу тантанаһында ла ҡатнаштыҡ. М. Кәрим исемендәге гимназия тәүгеләрҙән булып Өфө ҡалаһы мәғариф системаһында ошондай уҡытыу мөхите булдырған белем усағы, - тине Өфө ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов конкурс еңеүселәрен тәбрикләп. Әйткәндәй, гимназия директоры Гөлназ Әхмәҙиева ла Мостай Кәрим иҫтәлегенә арнап асылған музей-кабинеттың булаҫаҡ бөйөк әҙиптәр, журналист, тәнҡитсе, реставратор, сәхнә рәссамы, актер, драматург һәм башҡа матурлыҡҡа ғашиҡ һөнәр эйәләрен тәрбиәләргә ярҙам итәсәгенә ышаныс белдерҙе. Әле музей-кабинетта М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры һәм М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры, атаәсәләр алып килгән тәүге уникаль экспонаттар урын алған.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Мостай Кәрим тыуған илен, телен, халҡын данлап ижад иткән һәм милләт алдындағы хеҙмәте, күп яҡлы таланты өсөн иң юғары бүләккә - халҡы йөрәгендә мәңгегә бөйөк әҙип булараҡ һаҡланып ҡалыу бәхетенә эйә булған шәхес. Шуға ла уның ижады аша илһөйәрлек, милли рух, башҡорт теленә ҡарата һөйөү тәрбиәләгән педагогтарҙың эше баһалап бөткөһөҙ. Туған телен, халҡын данлар ул һәм ҡыҙҙар үҫтергән М. Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһы был йәһәттән иң күп һәм фиҙаҡәр хеҙмәт иткән белем усағы һәм киләсәктә ошо эш ыңғай һөҙөмтә биреүгә шик юҡ.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓"Зодчество" XXV халыҡ-ара фестивалендә "Бөрйән районында "Шүлгәнташ" тарихи-мәҙәни комплексы төҙөләшө" проекты "Йәш архитекторҙарҙың ижады" номинацияһында лауреат булды һәм архитектура өлкәһендә "Көмөш билдә" наградаһын алды. Фестиваль Мәскәүҙең "Каруанһарай" күргәҙмә комплексында уҙҙы.

✓Өфө - ММА тарихында донъяла беренсе тапҡыр 14-15 йәшлек үҫмерҙәр араһында Хәрби ҡатнаш алышы буйынса ММА беренселеген ҡабул иткән ҡала буласаҡ. Ярыштар 2002 - 2003 йылғы спортсылар араһында 10 ауырлыҡ категорияһында үтәсәк. Сараның төп маҡсаты - спорт оҫталығын үҫтереү, Рәсәй һәм халыҡ-ара ярыштарҙа ҡатнашыу өсөн иң көслө спортсыларҙы асыҡлау, ҡатнаш хәрби алышты үҫтереү һәм уны Рәсәйҙә, Башҡортостанда популярлаштырыу. Сара сиктәрендә төрлө мәҙәни программа, осрашыуҙар, шулай уҡ уктан атыу буйынса оҫталыҡ дәрестәре планлаштырылған.

✓"Өфө" клубы Рәсәй Премьер-Лигаһының 13-сө турында "Локомотив" менән уйында еңеү яуланы. Осрашыу Өфөлә "Нефтсе" стадионында үтте һәм беҙҙең команда файҙаһына 1:0 иҫәбе менән тамамланды. Өфө футбол командаһы 17 мәрәй йыйҙы һәм Премьер-Лига таблицаһында етенсе урынға сыҡты. "Локомотив" (26) - икенсе. "Тимер юлсылар" был чемпионатта ҡунаҡта тәүгә еңелде.

✓Башҡортостанда ауыл ерендә эшләү өсөн урта медицина белеме булған белгестәрҙе йәлеп итеү өсөн ойошторолған "Ауыл фельдшеры" программаһын тормошҡа ашырылыуын дауам итә, тип хәбәр иттеләр республика Һаулыҡ һаҡлау министрлығының матбуғат хеҙмәтендә. Хәҙер программала ҡатнашыу өсөн ведомствола документтар ҡабул итәлә. Быйыл программаны ғәмәлгә ашырыу 32 ФАП-ты кадрҙар менән тәьмин итергә мөмкинлек бирәсәк, унда эшләргә барыусы фельдшерҙар бер тапҡыр 500 мең һум күләмендә пособие аласаҡ.

✓Башҡортостанда заманса тегеү фабрикаһы барлыҡҡа киләсәк. Яңы етештереү предприятиеһы Баймаҡта ойошторола. Өҫтөнлөклө инвестиция проектын ғәмәлгә ашырыу буйынса эшсе төркөм ойоштороу тураһындағы бойороҡҡа республика Хөкүмәте Премьер-министры Рөстәм Мәрҙәнов ҡул ҡуйҙы. Хөкүмәттең тағы ла бер бойороғо менән төбәктә Рәсәй стратегик үҫешенең төп йүнәлештәре буйынса өҫтөнлөклө проекттарҙы ғәмәлгә ашырыусы берҙәм оператив план булдырыла.

***✓ Һорау алған өфөләрҙең 80 проценты ҡалалағы мәҙәни урындарҙың һаны буйынса ҡәнәғәт. Шулай уҡ ҡала халҡының 88 проценты Өфөлә яҡшы белем алырға мөмкин уҡыу йорттары етерлек тип иҫәпләй.***



БАШ ҠАЛАМ

# АЛДЫНҒЫЛАР РӘТЕНДӘБЕҘ

✓ **Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте ҡарамағындағы Финанс университеты тормош сифатын баһалау проекты сиктәрендә ҙур һәм уртаса ҡалаларҙа сираттағы мәҙәниәт һәм белем биреү мөхитенең торошон тикшерҙе.** Тикшереү һөҙөмтәләре буйынса белгестәр ошо исемлектә беренсе урынды Рәсәйҙең мәҙәни баш ҡалаһы - Санкт-Петербургка бирҙе. Мәҙәни саралар һәм белем биреү буйынса тәүге ун алдынғы иҫәбенә Башҡортостандың баш ҡалаһы инде. Атап әйткәндә, Өфө мәҙәниәт учреждениеларының иҫәбе буйынса рейтингтың һигеҙенсе баҫҡысын биләй. Һорау алған өфөләрҙең 80 проценты ҡалалағы мәҙәни урындарҙың һаны буйынса ҡәнәғәт. Шулай уҡ ҡала халҡының 88 проценты Өфөлә яҡшы белем алырға мөмкин уҡыу йорттары етерлек тип иҫәпләй. Был рейтингта Өфө Рәсәйҙә унынсы урынды биләй.

✓ **Ҡала районларын төҙөкләндереү буйынса муниципаль учреждениеларҙа техника миҙгел алышынғанда барлыҡҡа киләсәк боҙлауыктар менән көрәшкә әҙерләнә.** Ҡар ятыу менән улар ҡышҡы эш режимына күсәсәк. Өфөнөң коммуналь хеҙмәттәрендә ҡышын ҡар таҙартыу өсөн 410 берәмек техника бар һәм улар тулыһынса старт һыҙығында тора. Яуым-төшөм мул булған осраҡта башҡа ойошмаларҙан ҡар таҙартыу техникаһы йәлеп ителәсәк. Юлдарҙа боҙлауыҡ барлыҡҡа килгән осраҡта ҡала хеҙмәттәре бөгөндән үк ҡатмарлы участкаларға ҡом һибергә әҙер. Һауа торошо насарайғанда шулай уҡ коммуналь хеҙмәт хеҙмәткәрҙәре бригадалары составы көсәйтеләсәк. 1 ноябрҙән ҡаланың барлыҡ коммуналь хеҙмәттәре ҡышҡы эш режимына күсәсәк һәм 12 сәғәтлек график буйынса иртәнге һигеҙҙән киске һигеҙгә, киске һигеҙҙән иртәнге һигеҙгә тиклем эшләйәсәк. Йәғни ҡала территорияһын таҙартыу тәүлек әйләнәһенә алып барыласаҡ.

✓ **Быйыл Өфөлә йорт ихаталары территорияларын төҙөкләндереү буйынса пилот проекттары тормошҡа ашырыла.** Уға ярашлы, Дим районының 20-нән ашыу күп фатирлы йорттарында йәшәүселәр инициатива менән сыға. Төҙөкләндереү эштәре 3 августа башлана һәм бөгөнгә районда 8 балалар майҙансығы, 5 тренажер комплексы төҙөлгән, 145 өҫтәмә парковка урыны булдырылған, 475 метр ҡойма ҡуйылған, 29 подъезға инеү урыны ремонтланған. Левитан, Дағстан, Хәҡиҡәт урамдарындағы 270 квадрат метр майҙанлыҡ дүрт балалар майҙансығы төҙөкләндерелә һәм йыһазландырыла. Был эштәр ошо көндәрҙә тамамланырға тейеш. Яңы проекттар халыҡта ыңғай ҡараш тыуҙырған, быны киләһе йылға бирелгән ғаризаларҙың артыуы ла раҫлай.

✓ **Уҡыусыларҙың көҙгө каникулы мәлендә - 1-3 ноябрҙә Өфөлә "Балаларға камера бирҙеләр" I Бөтә Рәсәй медиа фестиваль-тренингы үтә.** Сараны Өфө ҡала хакимиәте, "Тамыр" телеканалы һәм "Телешко" Телевидение мәктәбе ойоштора. Фестиваль-тренингтың төп үҙенсәлеге - ундағы һәр ҡатнашыусыға медиаһөнәрҙәр донъяһына сумып, үҙен һынап ҡарау мөмкинлеге биреләү. Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән килгән балалар профессионалдарҙың нисек эшләгәнен ситтән генә күҙәтмәйәсәк, ә үҙҙәре теле- һәм радиопроекттарҙың авторҙаштары буласаҡ. Бер көнгә Башҡортостандың баш ҡалаһының барлыҡ телеканалдары һәм радиостанциялары эфирҙы балаларға бирәсәк. Фестивалдә Өфө мәктәптәре уҡыусылары ла ҡатнаша ала. Бының өсөн детямдаликамеру.рф сайтында ғариза ҡалдырырға кәрәк.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

## ТӘҮГЕ ГЕОПАРК

**Башҡортостан Хөкүмәтендә республика биләмәһендә Рәсәйҙәге тәүге ЮНЕСКО геопаркын - "Янғантау" геопаркын ойоштороу мәсьәләһен тикшерҙеләр. Ошо хаҡта тәүге тапҡыр йәйгеһен Өфөлә уҙған Халыҡ-ара экология форумында һөйләй башланылар.**

ЮНЕСКО белгестәре был биләмәне геотуризмды үҫтереү һәм артабан халыҡ-ара статус алыу йәһәтенән перспективалы тип баһаланы. Әлеге ваҡытта ЮНЕСКО комиссияһына ғариза әҙерләнә. Халыҡ-ара ойошма белгестәре республикаға ноябрь айында килә. "Янғантау" геопаркына Салауат районындағы туғыҙ айырым һаҡланған тәбиғәт биләмәһе инә. Геопарк туризмды үҫтереүгә булышлыҡ итәсәк. Атап әйткәндә, хәҙер 35 илдә төбәктәрҙең геологик, ландшафт, тарихи һәм хатта техноген үҙенсәлектәре менән таныштырған һәм берләштергән 127 геопарк эшләй. Рәсәйҙә ҡануни кимәлдә әле бер геопарк бар. Ул - 2015 йылдың декабрендә ойошторолған һәм бөтә донъя "Глобаль геопарктар селтәре"нә инергә әҙерләнеүсе "Алтай" геопаркы.

## ҠЕҮӘТТӘР ЕТМӘЙ...



**Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Өфөлә Рәсәй энергетика форумы барышында Башҡортостандың Урал арьяғында төҙөләсәк ҙур сәнәғәт объекттары һәм уларҙа хасил буласаҡ электр энергияһы ҡытлығы тураһында белдерҙе.**

Билдәләнәүенсә, Урал арьяғында ике предприятие төҙөү ҡуҙаллана. Яҡын арала ҡытайҙар төҙөләш материалдары буйынса ҙур предприятие төҙөй башларға ниәтләй. Ошонда уҡ, Урал арьяғында, яҡынса шундай йүнәлештәге Австрия предприятиеһын төҙөү ҡаралған. Ул предприятиеларға 200 МВт билдәләнгән ҡеүәт кәрәк. "Дефицитҡа юл ҡуймау өсөн электр энергияһы етештереүҙең ҡатнаш төрҙәрен файҙаланырға тура килер. Ҡояш электр энергетикаһы барлыҡҡа килде. Хәҙер беҙ газ-турбина технологияһына нигеҙләнгән урынлы энергия ҡулайламаһы төҙөү хаҡында уйлайбыҙ. Был яҡтарҙа ел энергетикаһын ҡулланыу яҡшы булыр ине. Ләкин яҡын-тирәләге төбәктәрҙән электр энергияһын алыу өсөн электр тапшырыу линияһын төҙөргә кәрәк", - тине Рөстәм Хәмитов.

## БАЛАЛАР ТЕХНОПАРКЫ

**Башҡортостанда "Кванториум" балалар технопаркы эшләй башланы. Технопарктың икәүһе - Өфөлә, берәүһе Благовещенда урынлашҡан.**

Төбәк башлығы Рөстәм Хәмитов "Кванториум"дың Өфөләге майҙансыҡтарының береһендә булды. Ул "Гагарин-үҙәк" уҡыусыларға техник белем биреү буйынса ярҙам үҙәгендә асылған. Рөстәм Хәмитов технопарктың эше менән танышты, уҡыусылар менән аралашты, уларҙың проекттары һәм технопарк етәкселеге менән уның эш принциптарын һәм үҫеш мөмкинлектәрен тикшерҙе. Директор Игорь Нуйкин һүҙҙәренсә, технопарк техник ижадтың өс йүнәлеше: робот техникаһы, пилотһыҙ осоу аппараттарын ҡороу һәм аэройылһан инженерияһы буйынса эшләйәсәк. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, Рәсәй Президенты Владимир Путиндың ҡушыуы буйынса, шулай уҡ "Балалар өсөн өҫтәмә белем биреү" өҫтөнлөклө проекты сиктәрендә илдең барлыҡ төбәктәрендә "Кванториум" балалар технопарктары асыла.

## ЭСЕП ҮЛӘЛӘР...

**Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов республикала хоҡуҡ тәртибен тәьмин итеү буйынса кәңәшмә уҙғарҙы. Ул төбәк биләмәһендә контрафакт һәм суррогат алкоголь продукцияһының законһыҙ әйләнешенә ҡаршы эш итеү мәсьәләләренә арналды.**

Башҡортостанда 2017 йылдың һигеҙ айында спиртлы эсемлек менән 865 ағыуланыу осрағы булған, уларҙан 111 кеше ағыуланып үлгән, тип хәбәр итте Рөстәм Хәмитов. Күмертауҙа, Салауатта һәм Стәрлетамаҡта 14 йәшкәсә 19 бала ағыуланған. Башҡортостан Башлығы хоҡуҡ һаҡлау органдарына һәм профилле министрлыҡтарға үҙ-ара эшмәкәрлекте көсәйтергә һәм республика биләмәһендә алкоголле продукцияның законһыҙ әйләнешен асыҡлау һәм бөтөрөү буйынса уртаҡ эште дауам итергә һәм был көрәштә рәсми булмаған алымдар ҡулланыу кәрәклеген билдәләне: "Миңә отчеттар кәрәкмәй, - тине ул.- Был өлкәлә федераль ҡануниәттең ҡатыланғанын беләбеҙ. Быйыл июль айында Дәүләт Думаһы алкоголле һәм спиртлы эсемлектәрҙе законһыҙ рәүештә етештергән һәм уның менән сауҙа иткән өсөн енәйәт һәм административ яуаплылыҡты арттырған ике федераль закон ҡабул итте. Енәйәтселәр закон талаптарына ярашлы рәүештә яза алырға тейеш. Кешеләр үлә - шуныһы ҡурҡыныс..."

## ХӘСТӘРЛӘП...

**Төбәк парламенты спикеры Константин Толкачев сабыйға айлыҡ пособиеның күпмегә артасағын аңлатты. Башҡортостанда ошо социаль түләүҙәр төрөн бер ярым тапҡырҙан ашыуға арттырырға. Республика хөкүмәте төбәк ҡануниәтенә тейешле үҙгәрештәрҙе парламентарийҙарға ҡарауға тәҡдим итә.**

Билдәләнеүенсә, Закон проекты менән Башҡортостанда пособиеның суммаһын уға хоҡуҡтары булғандарҙың һәммәһе өсөн пропорциональ арттырыу ҡаралған. Улар ғаиләнең социаль статусына ҡарап билдәләнә. Мәҫәлән, яңғыҙ әсәнең, хәрби хеҙмәткәрҙең балаһына, ата-әсәһе алимент түләүҙән ҡасып йөрөгән балаға пособие күләме ябай ғаиләләрҙәге балаларға ҡарағанда күберәк булырға тейеш, тип күҙалана. Сабыйға түләнәсәк айлыҡ пособиеның нигеҙе итеп алынған күләмде 58,4 процентҡа арттырыу күҙ уңында тотола. Проект 27 октябрҙә пленар ултырышта ҡараласаҡ.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Грипп эпидемияһы республикала, ғәҙәттәгесә, декабрҙә башланыуы көтөлә. Роспотребнадзор идаралығында быйыл ҡыш ниндәй грипп вирустарынан һаҡ булыу кәрәклеге хаҡында һөйләнеләр. Мәғлүм булыуынса, алдағы эпидемия миҙгелендә 3 вирус штаммы көтөлә: А1 - Сингапур (күберәк сусҡа киҙеүе булараҡ билдәле), А2 - ГонКонг һәм В - Брисбен. А1 грипп вирусы нығыраҡ тараласаҡ, ул тиҙ үҫешеүсән үпкә шеше (пневмония) формаһында ҡаты өҙлөгөүгә килтереүе ихтимал.

✓Хәйбулла районынан үҙҙәренең дүрт һәм ҡарауға алған 12 балаға тәрбиә биргән Потякиндар ғаиләһе Башҡортостан Республикаһы исеменән Рәсәй Федерацияһы Мәғариф һәм фән министрлығы уҙғарған "Бөтә Рәсәй алмаштырыусы ғаиләләр ассамблеяһы" Бөтә Рәсәй художество ижады конкурсы финалында сығыш яһаны. Конкурс йомғаҡтары буйынса был ғаилә конкурс финалының тәүге ун иң яҡшы алмаштырыусы ғаиләһенә инде һәм ҡатнашыусы дипломы, бүләктәр менән билдәләнде.

✓Башҡортостанда шәкәр сөгөлдөрөн йыйыу дауам итә. Республика Ауыл хужалығы министрлығының һуңғы мәғлүмәттәре буйынса, уртаса уңыш гектарынан 306 центнер тәшкил итә. Иң юғары уңыш - Өфө һәм Ғафури районадары хужалыҡтарында. Бөгөнгә шәкәр сөгөлдөрө 37,3 меңдән ашыу гектарҙан йыйып алынған, ул пландың 72 процентын тәшкил итә. Миәкә, Федоровка һәм Ишембай районадарында тамыраҙыҡ йыйыу тулыһынса тамамланған.

✓Социаль селтәрҙә һәм WhatsApp мобиль мессенджерында Башҡортостан халҡы "Вимм-Билль-Данн" компанияһының һөт ризыҡтарын һатып алыуҙы һәм ҡулланыуҙы тыйған хәбәрҙәр ала. "Әлеге хәбәр дөрөҫлөккә тап килмәй. Термик эшкәртеү үткән малсылыҡ продукцияһы кешеләрҙең ғүмеренә һәм һаулығына хәүеф менән янамай. Һүҙ пастеризацияланған һәм ҡайнатылған һөт, шулай уҡ колбаса йәки бешкән ит хаҡында бара", - тип билдәләне "Роспотребнадзор"ҙың Башҡортостан идаралығы матбуғат хеҙмәте етәксеһе Анастасия Кучимова.

✓Ошо көндәрҙә Өфөлә Йәштәр театр премияһына эйә булыусылар билдәләнде. Театр эшмәкәрҙәре союзы премияларын тапшырыу тантанаһы Өфөләге Актерҙар йортонда уҙҙы. Акция театр миҙгелен асыуға арналды һәм унда республикалағы барлыҡ театрҙарҙың вәкилдәре йыйылды. Сара барышында шулай уҡ 12 йәш артисты актерлыҡҡа бағышлау булды.

*✓ Ҡуштау шиханы ҡиммәтле тәбиғәт биләмәһе, ә Торатау тәбиғәт мираҫы булып иҫәпләнә. Йөрәктауҙың статусы әлегә билдәләнмәгән. Идаралыҡта аңлатма биреүҙәренсә, был өс шихан да "өлөшләтә тәбиғәт мираҫы объекттары".*



# ИҢ ЯҠШЫҺЫ - БЫНДА



**Ошо көндәрҙә Өфө ҡала округы хакимиәте вәкилдәре ОДК-УМПО асыҡ акционерҙар йәмғиәтендә булып, берекмәнең производство ҡеүәте менән танышты, бер нисә производство участкаһында булды.**

Инженер-производство комплексында булғандан һуң, улар алюмин, магний һәм башҡа иретмәләрҙән 3D-моделдәр һәм башҡа прототиптар ҡойоу өсөн ҡом формалары әҙерләнгән инженер үҙәге менән танышты. Сәфәр барышында муниципалитет вәкилдәре титан һәм алюмин ҡойоуҙың технологик компетенция үҙәгендә, 185-се производство-технология үҙәге - ВК-2500 вертолет двигателдәре узелдарын эшләү һәм йыйыу цехтарының береһендә булды. Был двигатель "Ми" һәм "Ка" тибындағы күпселек вертолеттар өсөн тәғәйенләнгән. Сәфәр аҙағында муниципалитет вәкилдәре 1961 йылда ойошторолған двигателдәр эшләү музейы менән танышты. Визит һуңында Өфө ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов ОДК-УМПО-ның ҡала өсөн генә түгел, республика өсөн дә мөһим предприятие булыуын, бында иң яҡшы инженерҙар һәм административ хеҙмәткәрҙәр эшләүен, предприятиеның Өфөнөң социаль инфраструктураһын үҫтереүгә, шул иҫәптән Инорс биҫтәһен яңыртыуға ҙур иғтибар бүлеүен билдәләне.

# ҠАҒЫЛМАҒЫҘ!

**Ишембай ҡала суды Ҡуштау шиханында химик сәнәғәт ихтыяжы өсөн эзбизташ эҙләү һәм уны баһалау буйынса эштәр атҡарған "Сеймал компанияһы" акционерҙар йәмғиәтенә 350 мең һумға штраф һалған.**

Дәғүә менән БР Мәҙәни мираҫ объекттарын дәүләт һаҡлауы идаралығы мөрәжәғәт иткән. Бер төркөм мөрәжәғәттәрҙән һуң тикшереү уҙғарылған, тип билдәләнеләр ведомствола. Бороноғо тауҙы рөхсәтһеҙ ҡаҙыу асыҡланған. Ҡағиҙә булараҡ, компания дәүләт органдарынан ер эштәренә рөхсәт алырға, тарихи-мәҙәни экспертиза мәғлүмәттәре тәҡдим итергә тейеш булған. Былар эшләнмәгән һәм һөҙөмтәлә предприятиеға мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлау тураһындағы законды боҙғаны өсөн - 200 мең һум, рөхсәтһеҙ ҡаҙыу эштәре башҡарғаны өсөн 150 мең һум күләмендә штраф һалынған. Билдәле булыуынса, Ҡуштау шиханы ҡиммәтле тәбиғәт биләмәһе, ә Торатау 1965 йылдан тәбиғәт мираҫы булып иҫәпләнә. Ә Йөрәктауҙың статусы әлегә билдәләнмәгән. Идаралыҡта аңлатма биреүҙәренсә, был өс шихан да "өлөшләтә тәбиғәт мираҫы объекттары". "Сеймал компанияһы" акционерҙар йәмғиәтендә генераль директорҙың отпускаһына һылтанып, хәлгә аңлатма биреүҙән баш тарттылар.

# БУШЛАЙ ХЕҘМӘТ

**Республика ғаиләгә һәм балаларға социаль ярҙам үҙәгендә һәм уның бүлексәләрендә өс йәшкәсә балаларҙы йәки 18 йәшкә тиклемге инвалид балаларҙы ваҡытлыса ҡарау буйынса бушлай хеҙмәт менән файҙаланырға теләгәндәрҙән ғаризалар ҡабул итә.**

Башҡортостандың Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығында аңлатыуҙарынса, ошо сара аҙ тәьмин ителгән граждандар (күп балалы, инвалид бала тәрбиәләгән ғаиләләр, яңғыҙ әсәләр) өсөн ҡаралған. Уларҙың йән башына уртаса килеме йәшәү минимумы дәүмәленең 1,5 тапҡыр күләменән артмай. Хәҙер ошо сумма эшкә һәләтле халыҡ өсөн - 14044,5, пенсионерҙар өсөн 10750,5 һум тәшкил итә. Әгәр ғаиләнең йән башына уртаса килеме 14 мең һумдан артығыраҡ булһа һәм ғаилә мохтаж тип танылмаһа, хеҙмәт коммерция нигеҙендә күрһәтелә - 40-тан 140 һумға тиклем.

Хеҙмәтте алыу өсөн ғаилә ғариза һәм документтар менән ғаиләгә һәм балаларға социаль ярҙам үҙәгенең теләһә ниндәй бүлексәһенә мөрәжәғәт итә ала. Белешмәләр өсөн: Республика ғаиләгә һәм балаларға социаль ярҙам үҙәге - СССР-ҙың 50 йыллығы урамы, 27/1, 8 (347) 248-65-02.

# ӘЙҘӘ, ЙӘРМИНКӘГӘ!

**Ауыл хужалығы министрлығының матбуғат хеҙмәтендә хәбәр итеүҙәренсә, уҙған ял көндәрендә ауыл хужалығы йәрминкәләре республиканың 13 ҡалаһында һәм алты районында булды.**

Ғәҙәттәгесә ауыл хужалығы продукцияларын һатыу буйынса иң ҙур майҙансыҡтар Башҡортостандың баш ҡалаһында ойошторолдо. Бында сауҙа өсөн 14 октябрҙә - туғыҙ,15 октябрҙә - 10 майҙансыҡ йәлеп ителде. Дөйөм алғанда уларҙа 1,4 мең самаһы сауҙа урыны булдырылды. Уларҙа үҙ продукцияһын 48 райондың ауыл хужалығы тауарҙарын етештереүселәре тәҡдим итте. Йәрминкәләрҙә бер килограмм балды 300-600 һумға алырға мөмкин ине. Бер килограмм картуф һәм һуған - 13-25 һум, сөгөлдөр, кишер һәм кәбеҫтә 15-25 һум торҙо. Ике көн эсендә республика йәрминкәләрендә дөйөм 80,9 миллион һумлыҡ бөтәһе 70,3 тонна бал, 1,7 мең тонна картуф һәм 757,7 тонна йәшелсә һатылған. Уларҙан Өфөгә дөйөм 28,8 миллион һумға 23 тонна бал, 346 тоннанан ашыу йәшелсә һәм 736 тонна картуф тура килә.

# ВИКИ-САРАЛА

**Мәскәүҙә XI халыҡ-ара вики-конференция үтте, унда Башҡортостан делегацияһы ла ҡатнашты. "Викимедиа РУ" коммерцияға ҡарамаған партнерлыҡ уҙғарған конференция - Рәсәй һәм күрше илдәр телдәрендәге Википедия бүлектәре вәкилдәре өсөн русса аралашҡан майҙансыҡ. Унда рус, башҡорт, бүрәт, лезгин, яҡут, тыва, татар, чечен, әрмән, украин, поляк Википедияларынан ирекмәндәр бар ине.**

"Башинформ" агентлығына Башҡорт Википедияһы администраторы Рөстәм Нурыев хәбәр итеүенсә, Башҡортостан делегацияһында Өфөнән, Белореттан, Бөрйәндән, Сибайҙан, Өфө һәм Ҡырмыҫҡалы районынан ҡатнашыусылар булды. Башҡорт делегацияһы иң ҙуры булғанлыҡтан, был бөтә секцияларҙа һәм түңәрәк өҫтәлдәрҙә ҡатнашыу мөмкинлеген бирҙе. Яңы мәҡәләләр яҙғанда википедиясыларҙың ижади хеҙмәтен күпкә еңеләйтергә мөмкинлек биреүсе "Викимәғлүмәттәр" тип аталған яңы проект беҙҙекеләрҙә айырыуса ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы. Шуға күрә башҡорт ирекмәндәре проектҡа башланғыс һалған программист Сергей Лещина менән өҫтәмә фекер алышыу үткәрҙе. "Викимәғлүмәттәр" терминологик базаһында башҡорт телен тиҙерәк ябайлаштырыу һәм Башҡорт Википедияһында бөтә мәҡәләләр өсөн универсаль шаблон-карточка индереү буйынса үҙ-ара хеҙмәттәшлек тураһында һөйләшеп килешелде.

## ҠЫҪҠАСА

# ТЫУЫМ КӘМЕЙ...

✓**2017 йылдың башынан Башҡортостанда яҡынса дүрт мең кубометр күләмдә урмандарҙы законһыҙ ҡырҡыуҙың 291 осрағы асыҡланған, тип хәбәр итә республиканың Урман хужалығы министрлығы.** Ағастарҙы, ҡыуаҡтарҙы һәм лианаларҙы законһыҙ киҫкән өсөн енәйәт, хатта ете йылға тиклем иректән мәхрүм итеү, шулай уҡ административ яуаплылыҡ ҡаралған. Рөхсәтһеҙ ҡырҡыу, ағас үҫентеләренә зыян килтереү йәки урманда ағастарҙы, ҡыуаҡтарҙы үҙ белдеге менән ҡаҙып алған өсөн граждандарға - 3-5 мең, вазифалы кешеләргә - 20-50 мең, юридик берәмектәргә 200-500 мең һум штраф янай. Ағастарҙы законһыҙ ҡырҡыу фактары асыҡланған осраҡта урман һағының телефонына ошо хаҡта хәбәр итергә кәрәк: 8 (347) 218-14-14 (Башҡортостан Республикаһы буйынса).

✓**Ағымдағы йылдың туғыҙ айы йомғаҡтары буйынса Башҡортостанда тыуым 13,3 процентҡа кәмегән.** 2017 йылдың башынан төбәктә 37 228 сабый донъяға килгән. Уҙған йылдың ошо уҡ осоро менән сағыштырғанда был һан 5719 сабыйға аҙыраҡ. Отчетты республиканың Юстиция эштәре буйынса дәүләт комитеты әҙерләгән.Статистикаға ярашлы, Башҡортостандың ҡайһы бер район һәм ҡалаларында тыуым сиреккә кәмегән, икенселәрендә артҡан. Өфөлә тыуымдың 13 процентҡа кәмеүе күҙәтелә. Ағымдағы йылда бынан алдағыһы менән сағыштырғанда үлем осраҡтары республика буйынса 4,2 процент һәм Өфөлә 5 процентҡа аҙайған. Йыл башынан республикала 40 меңгә яҡын, Өфөлә иһә 9,7 меңдән ашыу кеше вафат булған.

✓**Башҡортостандың Юстиция эштәре буйынса дәүләт комитеты 2017 йылдың ғинуар-сентябрь айҙары өсөн граждандыҡ хәлен теркәү акттары һаны тураһында мәғлүмәт баҫтырҙы.** Документта күрһәтелеүенсә, ағымдағы йылдың туғыҙ айында Башҡортостанда 22313 пар никахын теркәгән, был унан алдағы йылға ҡарағанда 2205-кә күберәк. Билдәләнгән осорҙа 11539 ғаилә тарҡалған (2016 йылда - 11663). Башҡортостандың баш ҡалаһында 7752 ғаилә барлыҡҡа килгән, ул былтырғыға ҡарағанда 699 ғаиләгә күберәк.

✓**Башҡортостан статистары төбәктәге социаль әһәмиәтле аҙыҡ-түлеккә сираттағы хаҡтарҙың мониторингы мәғлүмәттәрен иғлан итте.** Шәкәргә хаҡтар 6,9 процентҡа төшкән. Арзанайған аҙыҡ-түлек исемлегендә башлы һуған, кишер, ҡыяр, кәбеҫтә, тары, дөгө, ҡарабойҙай ярмалары, көнбағыш майы, һыйыр һәм сусҡа ите, тоҙ, ҡаймаҡ, пастеризацияланған һөт, макарондар, аҡ май һәм алма бар. Тауыҡ йомортҡаһы, ҡаймаҡлы эремсек, туңдырылған балыҡ, картуф, тауыҡ ите, айыртылмаған стерилләнгән һөт һәм ҡара сәй, сырҙар, он, арыш оно-нан һәм арыш менән бойҙай оно ҡатышмаһынан бешерелгән икмәк, вермишель ҡыйбатланған.

# Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Ҡорсаңғы

❖ 1 ус айыу ҡурайы тамырын 15 минут 5-6 ҡалаҡ сусҡаның эс майында бешерергә, һөҙөргә, майға 2 ҡалаҡ ҡайын дегете, 2 ҡалаҡ иҙелгән дауахана көкөртө өҫтәргә. Төнгөлөккә һөртөргә. Иртән айыу ҡурайы төнәтмәһе менән йыуырға. Төнәтмә шулай әҙерләнә: 50 г тамырға 1 л ҡайнар һыу ҡойорға, 15-20 минут талғын утта бешерергә.

### Юғары ҡан баҫымы

❖ 1 ҡалаҡ кукуруз онон стаканға һалырға, стакан тулғансы ҡайнар һыу ҡойорға һәм төнгөлөккә ҡалдырырға. Иртәнсәк стакан төбөнә ултырған ҡуйырыҡты болғатмай ғына һыуҙы эсергә.

### Иммунитет нығытыу

❖ Хроник арыуҙан, хәлһеҙлектән арыныу, иммунитетты нығытыу өсөн 5 ҡалаҡ ҡарағай энәләре, 2-шәр ҡалаҡ гөлйемеш менән һуған ҡабығына 1 литр һыу ҡойорға, ҡайнау хәленә еткерергә, 10 минут талғын утта ҡайнатырға, йылы итеп урап 7 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә һәм күпме теләйһең, шул күләмдә эсергә.

### Сихәтле сироп

❖ Эмаль һауытҡа 1 литр һөт, 10 бөртөк инжир һалып, талғын утта 30 минут ҡайнатырға һәм төрөп, 2 сәғәт төнәтергә. Сәғәт һайын 1-әр бешкән инжир ашарға, ә һөттө эҫе килеш ярты стаканлап көнөнә 4 мәртәбә эсергә. Был ҡоро йүтәлде бөтөрә, бигерәк тә бронхит сирлеләргә файҙалы дауа.

❖ Инжир булмаһа, башлы һуғанды ла файҙаланып була. 1 ҙур башлы һуғанды әрсергә, тurарға, 2 стакан һөт ҡушырға һәм 15 минут утта тоторға (һуған йомшара). Һуғанды иҙеп, бер аҙ һөт ҡушып 2 сәғәт һайын 2 ҡалаҡ эсергә.

### Ашҡаҙан аҫты биҙе

❖ Ашҡаҙан аҫты биҙе яҡшы эшләһен өсөн, 40-ар грамм бөтнөк, һары мәтрүшкә, арыҫлан ҡойороғо (пустырник) үләндәрен ҡушып болғатырға ла, 3 ҡалаҡ үлән ҡатнашмаһына 700 мл ҡайнар һыу ҡойорға, 2 сәғәт төнәткәс һөҙөргә һәм көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 100-әр мил эсергә. Дауаланыу курсы - 10-15 көн, 15 көн ял итеп алғандан һуң тағы ҡабатларға.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# МӨХӘММӘТ БӘЙҒӘМБӘР

## Алла янына сәйәхәт

Мәккә ҡалаһында был хәбәр бик тиҙ тарала. Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең һәр һүҙенә ышанған мосолмандар араһында ла шик тыуа. Хатта Әбү Бәкер ҙә, быны ишеткәс, был хәбәрҙе Мөхәммәт бәйғәмбәр үҙе һөйләмәгән, ә ҡөрәйш мәжүсиҙәре, унан көлөү өсөн, уҙҙәре уйлап сығарып, ҡала буйлап Мөхәммәт бәйғәмбәр исеменән һөйләп йөрөй, тигән һығымта яһай ҙа, уның йортона ашыға.

## Һижрәткә күсенеү

Әбү Бәкер Мөхәммәт бәйғәмбәр янына килә лә, төнгө сәйәхәте тураһында һораша башлай. Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең һөйләүен ишеткәс:

- Һин һөйләгәс, тимәк, дөрөҫөн һөйләйһең, - тип әйтә.

Ләкин мосолмандарҙың байтағы шик белдерә. Шуға Әбү Бәкер Мәккә мосолмандарының барыһын йыйып ала, ә Мөхәммәт бәйғәмбәр бөтәһенә алдында тағы бер тапҡыр төнгө сәйәхәте тураһында һөйләй. Шикләнеүселәр Мөхәммәт бәйғәмбәрҙән Иерусалим ғибәҙәтханаһы тураһында ентекләп һораша, унда булмаған кеше белә алмаҫлыҡ һораүҙар бирә. Ләкин Мөхәммәт бәйғәмбәр бөтөн һораүҙарға ла дөрөҫ итеп яуаплай. Иерусалимда булған мосолмандар, шул иҫәптән Әбү Бәкер ҙә, уның яуаптарын ҡеүәтләй. Шуның менән төнгө сәйәхәттең ысын булыуы раҫлана.

- Һинең хаҡлы булыуыңа шаһитмын, Алла илсеһе. Бынан ҙурыраҡ нәмәләргә лә ышанам. Күктәрҙең мәрхәмәтлелегенә, бер төн эсендә бер айлыҡ юл араһы ергә күсереп, Алланың һиңә шундай хөрмәт күрһәтеүенә лә ышанам, - ти Әбү Бәкер.

Иерусалим ғибәҙәтханаһына (Алыҫ Мәсеткә) төнгө сәйәхәттең шундай тауыш ҡуптарыуының сәбәбе шунда: Мөхәммәт бәйғәмбәр һауаларға Алыҫ Мәсет аша күтәрелгән икән, тимәк, Ҡәғбәгә ҡарағанда Иерусалимдағы ғибәҙәтхана Алла тарафынан юғарыраҡ баһалана.

Шуға ла дөйөм йыйылыштан һуң Мөхәммәт бәйғәмбәр доға ҡылғанда ҡибланы Алыҫ Мәсет яғына үҙгәртә. Уға башҡа мосолмандар ҙа ҡушыла.

622 йылдың башында Мөхәммәт бәйғәмбәргә Йәҫрибтән илселәр килә. Улар ҡалаға инмәй, яҡында туҡтай. Етмеш биш кеше була улар, араларында ике ҡатын-ҡыҙ. Мөхәммәт бәйғәмбәр улар менән килешеү төҙөй. Килешеүҙең шарттары буйынса Йәҫриб мосолмандары - ансарҙар - Мөхәммәт бәйғәмбәрҙе лә, күсеп барыусы башҡа мосолмандарҙы, йәғни - мөһәжирҙәрҙе үҙҙәренә ҡабул итеп, бер өммәт булдыралар. Өммәттең башында Мөхәммәт бәйғәмбәр тора. Ансарҙар мөһәжирҙәрҙе үҙ туғандарын һаҡлағандай, ҡулдарына ҡорал тотоп һаҡларға тейеш була. Мөхәммәт бәйғәмбәр үҙ сиратында ансарҙарҙы бер ҡасан да ташламаҫҡа, ситкә ҡаҡмаҫҡа һүҙ бирә. Килешеү, боронғо йола буйынса, ҡан менән нығытыла.

Ҡайһы бер сығанаҡтар буйынса, был һөйләшеүҙә Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең олатаһы - аҡыллы һәм бай мәжүси Ғәббәс тә ҡатнаша. Ул хашим нәҫеленең вәкиле булараҡ сығыш яһай һәм хашим ырыуының, ысынлап та, Мөхәммәт бәйғәмбәрҙән баш тартыуын, шуға ла уның ансарҙар менән үҙаллы килешеү төҙөргә хоҡуҡлы булыуын раҫлай.

Килешеү төҙөлгәс тә барыһы ла шунда уҡ таралыша. Тик ҡөрәйш мәжүсиҙәренең береһе йыйылыусыларҙы алыҫтан күҙәтә, шуға ла Мәккә мәжүсиҙәре икенсе көндә үк был турала белә. Ләкин һөйләшеүҙең нимә тураһында барғанлығы улар өсөн сер булып ҡала. Серҙе асыу өсөн улар ансарҙарҙың береһен ҡулға алып, һораша башлай. Тик ансар бер ни ҙә әйтмәй, ә туғандары уны эҙләп, ҡайҙа икәнлеген асыҡлап килеп етеү менән, ансарҙан да, туғандарынан да ғәфү үтенеп, уны ебәрергә мәжбүр булалар.

Ҡөрәйш мәжүсиҙәре Мөхәммәт бәйғәмбәрҙе яуапҡа тарттырырға уйлай, тик бының өсөн дәлилдәре етмәй. Мосолмандар өсөн, ансарҙар менән килешеү төҙөлгәс тә, һижрәт - Йәҫрибкә күсенеү - башлана. 622 йылдың 16 июль айы һижрәттең башланыу көнө була һәм аҙаҡтан мосолмандар йыл иҫәбен ошо көндән башлай.

(Дауамы бар).

ЙӘШЛЕК ЙӘШНӘҮҘӘРЕ

# СИТ ЕРҘӘРГӘ БАРЫП...

**Ҡаҙағстандың К. Жубанов исемендәге Аҡтүбә төбәк дәүләт университетында I Халыҡ-ара телдәр фестивале үткәрелде. Был сарала Башҡорт дәүләт университеты студенттары һәм уҡытыусылары ла ҡатнашты. Осрашыуҙан алған тәьҫораттар, яһалған һығымталар тураһында юғары уҡыу йортонон Башҡорт филологияһы һәм журналистика факультеты доценты Зөбәржәт ШӘЙХИСЛАМОВА менән әңгәмәләштек.**



- Ҡаҙағстанда 1998 йылдан алып Ҡаҙағстан халыҡтары көндәре билдәләнә, ошо дата айҡанлы К. Жубанов исемендәге Аҡтүбә төбәк дәүләт университеты быйыл тәүге тапҡыр I Халыҡ-ара телдәр фестивален үткәрҙе. Был сарağа улар Рәсәй, Беларусь, Әрмәнстан, Тажикстандан, Болгариянан, Чехиянан юғары уҡыу йорттары студенттарын саҡырған. Унда шулай уҡ Башҡорт дәүләт университетының Башҡорт филологияһы һәм журналистика факультеты студенттары Илдар Байбулов, Айҙар Шәйәхмәтов, Павел Бахтин, БДУ-ның Стәрлетамаҡ филиалы доценты Ләйлә Хөсәйенова һәм мин ҡатнаштыҡ. I Халыҡ-ара телдәр фестивалендә төрлө милләт вәкилдәре үҙ туған теле, үҙ халҡының мәҙәниәте тураһында сығыш яһаны, ҡайһы берәүҙәр үҙҙәре өйрәнгән сит тел, шул ил мәҙәниәте менән таныштырҙы. Беҙҙең студенттар башҡорт, ҡытай һәм төрөк телдәре буйынса сығыштар әҙерләп барғайны. Илдар Байбулов башҡорт теле тураһында мәғлүмәт еткерҙе һәм "Алдар батыр" йәки "Рекрут" бейеүен башҡарғанда бөтә тамашасылар хайран ҡалып ултырҙы. Ул I Халыҡ-ара телдәр фестивале дауамында милли кейемдә йөрөнө, йәштәр уның тирәһендә тупланып, аралашып, мәғлүмәт менән алышып мәж килде.

Павел Бахтин беҙҙә ҡытай телен өйрәнгән студент, шуға ла ул сарала "Ҡытай теленә көнсығышты өйрәнеү бүлеге студенты ҡарашы" тигән темаға сығыш яһаны. Әйтергә кәрәк, Павелдың сығышын юғары уҡыу йортонон Конфуций институты директоры бик оҡшатып, киләсәктә бәйләнештә булырға тәҡдим итте. Айҙар Шәйәхмәтов төрөк теле һәм мәҙәниәте тураһында һөйләне. Йәштәребеҙ шулай Башҡорт дәүләт университетында белемле, талантлы, мәҙәни студенттар уҡыуын күрһәтеп ҡайтты.

Студенттарыбыҙ донъя халыҡтары телдәре, мәҙәниәттәре тураһында сығыштар яһап, Рәсәй, Болгария һәм Чехия илдәренең алдынғы вуздары менән онлайн бәйләнешкә сығып, ҡыҙыҡлы мәғлүмәт туплағансы, уларҙы оҙата килгән педагогтар ҙа буш ултырманы. Беҙ лекцияла, лингвистик дәрестә, донъя халыҡтары телдәренә арналған викторинала ҡатнаштыҡ. Коллегам Ләйлә Хөсәйенова "Башҡорт яҙмаһының тарихы", мин "Төрки телдәр системаһында башҡорт теленең урыны" тигән темаға сығыш яһаныҡ. Беҙҙе лә бик ҡыҙыҡһынып тыңланылар, һуңынан һорау биреп, әңгәмәләшеп алдыҡ.

Ғөмүмән, К. Жубанов исемендәге Аҡтүбә төбәк дәүләт университеты педагогтары Башҡортостан яңылыҡтары менән дә ҡыҙыҡһынып тора, беҙҙәге юғары уҡыу йорттары менән хеҙмәттәшлек тә итә. Республикалағы башҡорт телен уҡытыуға ҡағылышлы мәсьәләләрҙә лә хәбәрҙар булып сыҡтылар һәм быға ҡарата үҙ фекерҙәрен белдереп: "Һеҙҙең республика етәкселегенә, мәғариф хеҙмәткәрҙәренә башҡорт телен уҡытыу мәсьәләһендә аҡыллы ҡарар ҡабул итергә, дөрөҫ йүнәлеш алырға Хоҙай ярҙам бирһен. Сөнки тел мәсьәләһенә күҙ йоморға ярамай, ул һәр ваҡыт актуаль булып ҡала", - тинеләр.

Ысынлап та, һәр халыҡтың иң ҡәҙерле байлығы - ул туған теле. I Халыҡ-ара телдәр фестивалена барып, беҙ был хәҡиҡәткә тағы бер тапҡыр инанып ҡайттыҡ. Борондан төрлө телдәрҙе өйрәнеү, башҡа милләттәрҙең туған телдәренә, мәҙәниәтенә, әҙәбиәтенә ихтирамлы ҡараште булыу мәҙәни, зыялы кешеләргә хас булған. Башҡорт телен, башҡорт халҡының мәҙәниәтен дә тәүге тапҡыр киң йәмғиәткә рус ғалимдары, тикшеренеүселәре сығарған һәм уларҙың хеҙмәте бөгөн баһалап бөткөһөҙ әһәмиәткә эйә. Шуға күрә, I Халыҡ-ара телдәр фестивалендә ҡатнашҡан йәштәр өсөн тәү сиратта был сара тәрбиәүи йәһәттән мөһим булды. Унан һуң, күнелдәрен үҫтереп, дипломдар һәм иҫтәлекле бүләктәр алып, К. Жубанов исемендәге Аҡтүбә төбәк дәүләт университетының заманса талаптарға ярашлы эшләнгән инфраструктураһын, уҡытыу кимәлен баһалап, сит илгә сәйәхәт итеп ҡайтыуҙары ла иҫтә ҡалырлыҡ хәтирәләр, тәьҫораттар бүләк итте.

**Ғәлиә ШӘМСЕТДИНОВА яҙып алды.**

БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ

# АРАЛАШЫУ ҠАҒИҘӘЛӘРЕ



**Кемдер һеҙҙең менән идара итергә ярата, һеҙҙә ғәйеплелек тойғоһо уятырға тырышамы? Уларҙың телгән үҙегеҙгә зыян килтереп булһа ла үтәйһегеҙме? Улайһа, ошо ҡағиҙәләргә күҙ һалығыҙ.**

- Һеҙ башҡаларҙың ихтирамына лайыҡлы булыуығыҙҙы белегеҙ.
- Һеҙ һәр урында, һәр кемгә үҙегеҙҙең тойғоларығыҙҙы, фекерҙәрегеҙҙе, теләктәрегеҙҙе белдереү хоҡуҡына эйәһегеҙ.
- Һеҙ ғәйеп тойғоһо кисермәй генә, "юҡ" тип әйтә алаһығыҙ.
- Башҡаларҙың ҡараштары менән тура килмәһә лә, һеҙҙен үҙ фекерегеҙҙе әйтергә хоҡуғығыҙ бар.
- Үҙегеҙҙе физик, мораль яңауҙарҙан һаҡлай алаһығыҙ.
- Бәхетте нимәлә күрәһегеҙ, тормошоғоҙҙо шулай ҡора алаһығыҙ.

Былар - һеҙҙең шәхси киңлегегеҙ сиктәре. Үҙебеҙҙең тормошобоҙ өсөн үҙебеҙ яуаплы, шуға ла башҡалар тарафынан был сиктәрҙе боҙоуға юл ҡуймағыҙ. Ғөмүмән, бындай кешеләрҙән йырағыраҡ торорға тырышығыҙ.

- Кемдеңдер һүҙҙәрен үҙегеҙҙең адресҡа ҡабул итергә ашыҡмағыҙ. Һеҙҙе насар кеше тип әйтәләр икән, кемдеңдер талаптарына тура килмәүегеҙ өсөн һеҙ ғәйепле түгел.
- Һеҙ үҙегеҙ менән идара итеүгә юл ҡуяһығыҙ икән, шул рәүешле үҙегеҙҙең хоҡуҡтарығыҙҙан еңел генә баш тартаһығыҙ икәнде иҫтә тотоғоҙ.
- Кемдер һеҙгә гел генә ниндәйҙер үтенестәр менән мөрәжәғәт итә икән, уға түбәндәге һорауҙарҙы бирергә тартынмағыҙ:

"Һин был талапты дөрөҫ тип уйлайһыңмы?"
"Һиненсә, миңә ҡарата был ғәҙелме?"
"Был турала минең үҙ фекерем була аламы?"
"Бынан мин нимә алам?"

Был һорауҙарҙы биреп, һеҙ ул кешене көҙгөгә ҡарарға мәжбүр итәһегеҙ. Бынан һуң ул үҙенең талаптарын кире алаҫаҡ.

- Һәм "юҡ" тип әйтергә өйрәнегеҙ. Был аралашыу сәнғәтенең иң мөһим өлөшө. Баш тартыуығыҙҙы аңлатырға ла өйрәнһәгеҙ, үҙ һүҙегеҙҙә ныҡ торһағыҙ, башҡалар менән арағыҙ ҙа боҙолмаҫ.

***✓ Уйлаша һәм фекерләшә торғас, тикшеренеүҙәрҙе районларға түгел, ә ырыуҙарға бүлеп ҡарарға кәрәклекте аңлап ҡалдыҡ. Шулай иткәйнек, буталышып йөрөгән остар осҡа ялғанды ла ҡуйҙы.***



**Башҡортостандың тарихи мираҫын өйрәнеү буйынса "Шәжәрә" үҙәге тарафынан ижад ителгән "Башҡорт ырыуҙарының тарихы" томлыҡтары халыҡтың үҙаңын уятып ебәреүгә тағы бер этәргес булды. Айырым кешеләр һәм ырыуҙар өсөн генә түгел, ә дөйөм ил, донъя кимәлендәге асыштар яһалды, хәҡиҡәттәр асылды. Әйтерһең, милләткә һалынған ниндәйҙер кодтың ваҡыты һәм мәле етеп, сиселеп китеүе булды. Һәм был хаҡта ниндәй генә юҫыҡтан тотоп һөйләшеү башлаһаң да, ҡыҙыҡлы яҡтары бихисап кеүек. Һәр уҡыусының телендә мең төрлө һорауҙыр, моғайын. Шул уҡыусылар иҫәбенә беҙ ҙә инәбеҙ һәм шунлыҡтан, Башҡортостан Республикаһы Стратегик тикшеренеүҙәр институтының Социаль-мәҙәни тикшеренеүҙәр үҙәге етәксеһе, тарих фәндәре кандидаты Юлдаш ЙОСОПОВ менән шул уҡ институттың ғилми хеҙмәткәре, философия фәндәре кандидаты Рәфил АҪЫЛҒУЖИНдан ишетергә теләгәндәр алтынға бәрәбәрҙер.**

# ЫРЫУҘАРЫБЫҘ...

## ул халҡыбыҙҙың яугирлығы билдәһе

**Башҡорт ырыуҙары тарихын өйрәнеүсе томлыҡтарҙың башланғысына нимә этәргес булғайны? Тарихты өйрәнеүҙең яңы баҫҡысы булдымы был, әллә заман талабымы?**

**Ю. Йосопов:** Томлыҡтарҙы ижад итеү - бик ҙур, масштаблы, төрлө йүнәлештәрҙе үҙ эсенә алған мөһабәт проект. Был - китаптарҙы әҙерләп баҫтырыу ғына түгел, кешеләр менән аралашыу, йәмәғәт эшмәкәрлеге, тарихты, филологияны, генетиканы, археологияны, социологияны ла өйрәнеү ул. Эштең башы 2006 йылға барып тоташа. Башланғыстың инешендә Рәфил Аҫылғужин торҙо. Уның меңләләр тураһындағы "Дим буйы башҡорттары" тип аталған китабы донъя күргәйне. Тап ошо хеҙмәте менән ул оло проектҡа нигеҙ һалды ла инде. Ғәҙәттә, ғилми эш фундаменталь-практик йәки фәнни-популяр була. Ә Рәфил башлап ебәргән хеҙмәт үҙ эсенә ошоларҙың икеһен дә алды, йәғни алтын урталыҡта булып сыҡты.

2007 йылдан башлап был эшкә мин дә ҡушылдым. Яйлап-яйлап эштең дәүмәле лә, даирәһе лә артты, киңәйҙе. Тикшереү барышында мәғлүмәттәр эҙләп, республика сиктәренән сығып, күрше өлкәләргә, республикаларға ла күҙ һала башланыҡ. 2010 йылда беренсе эш һөҙөмтәләребеҙ күренде. Ул "Көнбайыш башҡорттары" тип аталған проект булды. Шуға ярашлы, "Көнбайыш башҡорттары, сәйәси тарихтар һәм идентификация проблемалары" тигән китап баҫылып сыҡты. Был проектта тикшеренеүҙәрҙе территориаль яҡтан бүлеп алдыҡ. Бығаса был юҫыҡта меңле, гәрәй башҡорттары тураһында ғына яҙғайныҡ. Территория бүленешенә этник үҙенсәлектәрҙе өйрәнеүҙе лә ҡуштыҡ. Ә этник яҡтың инде ырыуҙар бүленешен өйрәнеүен аңлайһығыҙҙыр. Оло проект бына ошо юҫыҡтараҡ башланып киткәйне.

**Китаптарҙағы мәғлүмәттәр күберәк ниндәй сығанаҡтарға таяна: тарихҡамы, генетик тикшеренеүҙәргәме, архив документтарынамы? Иң һуңғы һүҙ-**




**ҙе, шулай ҙа, ниндәй өлкә мәғлүмәте әйтә ул бындай эштә?**

**Р. Аҫылғужин:** Алда әйткәнебеҙсә, тикшеренеүҙәрҙе оло быуын тарихсылары хеҙмәттәренә таянып башлағайныҡ. Әммә эшләй торғас, ниҙер етмәүен, нимәлер әйтелеп еткерелмәүен тойҙоҡ. Ысынлап та, йәшеренбатырыны юҡ, үткән замандарҙың тарих фәне бөтә һорауҙарға ла яуап бирмәй, унда йомоп ҡалдырыуҙар, асыҡланмаған һорауҙар етерлек. Бына ошо асылып етмәгән серҙәрҙе өйрәнеү һәм белеү маҡсатында 2012 йылда Юлдаш Мөхәмәт улы етәкселек иткән генетик тикшеренеүҙәр проектын башлап ебәрҙек тә инде. Үҙебеҙҙең генә базала түгел, Мәскәү, Ҡаҙағстан белгестәре менән берлектә тотондоҡ был эшкә. Һәм яңылышманыҡ, ысын фундаменталь фән ишектәре асылды беҙҙең өсөн. Бөтөн тарихи, археологик, филологик һәм башҡа тикшеренеүҙәребеҙгә ҡуйылған ҡәтғи нөктә, йәғни бәхәстән тыш хәҡиҡәт ине был.

Ошо проект менән "Евразия генофонды" тигән тағы ла олораҡ проектҡа барып индек. Елена Болоновская исемле билдәле Мәскәү генетигы менән бергәләп, башҡорттарҙың генофондын өйрәнә башланыҡ. Тик башҡаларҙан айырмабыҙ шунда булды: беҙ проектҡа үҙебеҙҙең яңылыҡ менән килдек. Бығаса берәү ҙә генетиканы ырыу (ҡәбилә) төркөмдәре буйынса тикшермәгәйне әле. Бығаса генетика тарихы бары территорияға бәйләп кенә өйрәнелә ине. Шул сәбәпле, күп осраҡта күрһәткестәр дөрөҫ килеп сыҡмай, аңлайышһыҙ буталсыҡтар тыуып аптырата ине. Әлбиттә, бығаса ла республикала генетиктар эшләне, хеҙмәттәре лә баҫылып сыҡты. Уларҙың эҙләнеүҙәре башлыса *R1b* билдәһе менән тамғаланды. Ғәҙәттә, өйрәнеү объекты итеп бары тик Әбйәлил, Баймаҡ райондарында йәшәүсе кешеләр генә алына ине. Беҙҙең уйлауыбыҙса, был тикшеренеүҙәр ҡәтғи дөрөҫлөккә тап килеп үк етмәй һәм бында ниндәйҙер икенсе хаҡлыҡты табыу бурыс ине. Уйлаша һәм фекерләшә торғас, тикшеренеүҙәрҙе районларға түгел, ә ырыуҙарға бүлеп ҡарарға кәрәклекте аңлап ҡалдыҡ. Шулай иткәйнек, буталышып йөрөгән остар осҡа ялғанды ла ҡуйҙы. Был үҙенә күрә фән өлкәһендәге бер ҙур асыш булды.

**"Ырыу", "ҡәбилә" тигән атамаларҙы яҙмаларҙа ла, һөйләү телмәрендә лә ҡыйыу ҡулланып өйрәндек. Әммә күптәр уларҙың мәғәнәһен аңлап та етмәйҙер. Асыҡлап китәйек әле, ҡайһыһы нимәне аңлата? Был һүҙҙәр синонимдар ғынамы, әллә айырмалары бармы? Тағы ла башҡорттарҙа "ете ырыу" төшөнсәһе йәшәй, былар төп ырыуҙарҙың һанымы, әллә йәки башҡа аңлатмалары ла бармы, тигәндәй...**

**Ю. Йосопов:** Бөгөнгө күҙлектән, ырыу менән ҡәбилә араһында ниндәйҙер айырма бар, тип әйтеп булмай. Элек уларҙың икеһе лә ойошмаларҙы, тупланмаларҙы аңлатҡан. Ырыу - ул ырыу, йәғни бер атама аҫтына ингән, күп осраҡта бер заттан, бер тамырҙан таралған кешеләр берләшмәһе. Ә ҡәбилә - конфедерация, бер нисә ырыуҙың бергә ҡушылған ойошмаһы.

Фәнни яҡтан ҡарағанда, башҡорт этносы (шартлы рәүештә) ике өлөштән тора. Йәғни, этноста ике структура бар. Шуларҙың береһе - төньяҡта. Табындар, әйләләр, мырҙалар, тырнаҡлылар һ.б. бергә ҡушылып, табын ҡәбиләһен булдырған. Шулай итеп, төньяҡҡа ойошмаларҙың ойошоу үҙенсәлеге, йәғни ҡәбилә формаһы хас.

Көньяҡ-көнбайыш районларында ундай ҙур ойошмалар юҡ. Унда бөрйәндәр, ҡыпсаҡтар, юрматылар үҙҙәре һәр береһе айырым ырыу. Был ерлектә ҙур конфедерациялар булмаған, әммә ваҡыты-ваҡыты менән ҡырҡыу мәлдәр ҙә булып киткән. Мәҫәлән, Рус дәүләтенә ҡушылғанда дүрт ырыу берләшкән. Тик улар шуның кеүек ғәҙәттән тыш осраҡтарҙа ғына ҡушылған һәм кәрәге бөткәс, кире айырылып, үҙ көнө менән йәшәүен дауам иткән.

Был ойошҡанлыҡ һәм айырымланғанлыҡ мәсьәләләренең барыһы ла сәйәсәткә бәйле. Көньяҡ-көнбайышта, тимәк, элек ниндәйҙер дәүләттәр булған, сөнки ундағы ырыуҙар үҙҙәре һәр береһе бер дәүләт вариҫы. Әгәр был ырыуҙар үҙәктәрҙән ситтә ятып, башҡалар менән бәйләнеш булмау сәбәпле шулай айырылған икән, тип уйлаһағыҙ - хаталанаһығыҙ. Сөнки был төбәк көнсығыш халҡына ҡарағанда ла әүҙемерәк булған. Был ерҙәрҙән Урал, Себер сауҙа юлдары үткән, Урта Азия менән тығыҙ бәйләнеш тотолған. Ә инде ҡәбилә йәки ырыу булып йәшәү формаһын уларға ғына тәғәйен тормош шарттарының хәрби-сәйәси төшөнсәләре билдәләгән.

**(Дауамы 8-9-сы биттәрҙә).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

## Меңләләр

Башҡорттар составындағы меңләләрҙең ырыу-ҡәбилә берләшмәһе (мең, минг, мингат) VII-VIII быуаттарҙа туғыҙ-уғыҙ конфедерацияһына ҡараған. Меңләләр, ҡырҡ өйлө меңдәр менән бергә барлыҡҡа килгән берләшмәгә меркеттәр ҙә ингән.

XIII быуат башында күп кенә монгол ҡәбиләләре Сыңғыҙханға буйһонған, татарҙар бөтөнләй юҡ ителгән. Тик меркеттәр генә уларға ҡаршы торған.

Меңләләр XII-XIV быуаттарҙа Алтын Урҙа составында була. Улар монголдарҙан сигенеп, Урал алдына һәм көнбайыш Башҡортостанға һыйына. Меңләләрҙең Башҡортостанға күсеүе бик ҡатмарлы шарттарҙа үтә. XII-XIII быуатта меңләләр Ҡонҡас һәм Иштәкә етәкселегендә Ыҡ, Сөн, Зәй, Минзәлә, Дим йылғалары буйына килә. Ҡул-меңләләр Димдең Ағиҙелгә ҡойған еренә ултыра. Меңләләрҙең риүәйәттәре буйынса, уларҙың тамыры легендар Урҙас бейгә барып ялғана. Урҙас бей 1358 йылда Аҡһаҡ Тимер менән Туҡтамыш хан бәрелешенән алып, төньяҡҡа күсә, меңләләрҙең бер өлөшө Урал алдына килеп, башҡорт халҡына, ҡалғандары башҡа халыҡтарға ҡушыла.

Мең башҡорттарының башлығы Ҡәнзәфәр бей килешеү нигеҙендә Рус дәүләтенә инер өсөн урыҫ батшаһының Ҡаҙандағы наместнигына бара. Меңләләр үзбәктәр, төрөкмәндәр, нуғайҙар, тывалар һәм монголдар араһында осрай. Меңләләр башҡаларҙан Европа, Урал һәм көнбайыш Себер, Памир-Фирғәнә типтарының ҡушылыуынан хасил булған үҙенсәлек менән айырыла.

2012-2013 йылдарҙа Башҡортостан Республикаһының Гуманитар тикшеренеүҙәр институтының профессоры Е.В. Балановская етәкселегендә башҡорт этносының генофондын өйрәнеү буйынса масштаблы тикшереү үткәреп, ошондай фекергә килделәр. Генетик материалдар Миәкә, Әлшәй, Дәүләкән, Иглин райондарында, Өфө ҡалаһында алынған. Тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһендә шундай һығымталар яһалды: төньяҡ-көнбайыш (гәрәйҙәр һ.б.), үҙәк (көнбайыш табын ырыуҙарының бер өлөшө) һәм көньяҡ (бөрйәндәр, үҫәргәндәр) башҡорттарында көнбайыш Европа гаплатөркөмө өҫтөнлөк итә. Авторҙар бының менән башҡорт халҡының тарихын ҡыпсаҡтарға тиклемге дәүер менән бәйләй.

Мең башҡорттары популяцияһында көньяҡ һәм көнбайыш Себер дала пласты өҫтөнлөк итә. Был башҡорт халҡының икенән өс өлөшөнә хас. №1c1-M178 гаплатөркөмө Евразияла төньяҡ-көнбайыш Европаға һәм Себер тайгаһына хас. Миәкә, Бишбүләк райондарында һәм Әлшәй районының көньяғында йәшәүсе меңләләрҙең 70, Дәүләкән районының 50 процент самаһы меңле ырыуына ҡараған башҡорттарҙың гаплатөркөмө - №1c1-M178. Был гаплатөркөмгә түңгәүерҙәрҙең, үҫәргәндәрҙең ҙур өлөшө ҡарай.

**(Дауамы бар).**

**✓ Архив материалдары буйынса тикшерә башлаһаҡ, шәжәрәләре буйынса - башҡорттар. Миңзәлә йылғаһы буйынан, әлеге Татарстандың Сәрмән районынан килеп сыҡҡандар. Унда әле лә 15-20-ләп меңле ауылы бар.**

# ЫРЫУҘАРЫБЫҘ...

## ул халҡыбыҙҙың яугирлығы билдәһе

**(Башы 7-се биттә).**

Миҫал өсөн алғанда, бөгөнгө Урал аръяғы ырыуҙарында берләшеүгә, ҡушылыуға ынтылыш булмай, уларҙа иерархия һаҡлана. Шул сәбәпле уларҙа генофонд та асыҡ һәм таҙа килеш ҡалған, хатта һәр бер ырыуҙың үҙенең генофонды бар. Мәҫәлән, бөрйәндәрҙә *R1b* күрһәткесе 90 процентты тәшкил итә. Был, бөтә ырыу бер тоҡомдан сыҡҡан, тигән һүҙ. Юрматылар *R1b, R1c* һәм тағы ла бер нисә гаплотөркөмдән тора. Тик уларҙың гаплотөркөмдәре шундай уҡ күрһәткесле башҡа ырыу гаплотөркөмдәренән ҡырҡа айырыла. Был, әйтерһең, элекке бер этнос үҙе ырыу кимәленә ҡалып ҡыҫылған, бәләкәйләнгән. Тимәк, ырыу ир-егеттәре ситкә китмәгән.

Ҡыпсаҡтар *R1a* гаплотөркөмөнә ҡарай. Алда әйтелгәнсә, көньяҡ халҡы генофонды буйынса бер-береһенән шаҡтай айырыла. Төньяҡта, төньяҡ-көнсығыш башҡорттарында, киреһенсә, бер нисә ырыуҙа бер генофонд булырға мөмкин. Мәҫәлән, әйлеләр, табындар, балыҡсылар, унларҙа шулай. Был күренеш ойошманың ысынлап ҡәбилә булып берләшеүен күрһәтә. Ә көньяҡтарҙың, киреһенсә, ҡушылмаҫҡа, буталмаҫҡа тырышыуы сағыла. Шулай ҙа әлегә йомғаҡлап ҡына фекер әйтеп булмай, был өлкә тағы ла өҫтәмә тикшеренеүҙәр, күҙәтеүҙәр талап итә.

Ә инде "ете ырыу" төшөнсәһенә килгәндә, фәндә ундай төртөп кенә күрһәтерлек мәғлүмәт юҡ, был, минең уйлауымса, ете һанының сакраль һан булыуына ҡоролған символ ғыналыр. Белеүегеҙсә, башҡорттарҙа ҡырҡтан ашыу ырыу булған.

**Уйлап ҡараһаң, элекке тарихсыларыбыҙға ла ырыуҙар бүленеше билдәле булған бит инде. Ниңә улар халыҡ тарихын ошо юҫыҡта өйрәнмәгән?**

**Р. Аҫылғужин:** Элек бит халыҡтар ниндәйҙер илдең ниндәйҙер территорияһында йәшәгән бер төркөм кеүек кенә итеп тикшерелде. Ул халыҡ ана шул урында шунса майҙан биләгән, шундай телдә һөйләшкән, йолалар тотҡан, шундай костюмдар кейгән һәм Рәсәйҙең ниндәйҙер эштәрендә ҡатнашҡан, тигән юҫыҡ ҡына алға ҡуйылды. Халыҡ хөкүмәт тарафынан яһалма бүлеүгә, йәғни төрлө райондарға тарҡалыуға дусар ителде. Асылда, был бүленеш бер ниндәй әһәмиәткә лә эйә түгел. Һәр хәлдә, фән өсөн. Фәнгә бит был халыҡтарҙың тарихи яҡтан бүленешен, күршеләрен нисек ҡабул иткәнен, уларҙы ниндәй сәбәптәр айырып торғанын белеү бурыс. Буштан-бушҡа ғына ырыу һәм ҡәбиләләргә бүленеп йәшәмәгәндәр бит халыҡтар.

Әлеге тикшеренеүҙәр фәндә ысынлап та ҙур яңылыҡ булды. Билдәләп китергә кәрәктер, Башҡортостан этнографияһы Рәсәйҙәге иң яҡшы институттарҙың береһе ул. Беҙ ил кимәленә, донъя кимәленә нимә менән сығырыбыҙҙы беләбеҙ, күрһәтер ҡаҙаныштарыбыҙ бар. Беҙ үҙебеҙҙең база һәм белгестәр менән ысынлап та ғорурлана алабыҙ.

**Беҙгә генетик төрлөлөк хас, тинегеҙ. Был яҡшымы, әллә насармы? Йәки ошо йәһәттән башҡа ҡәрҙәш халыҡтарҙан ниндәй айырмалыҡтарыбыҙ бар?**

**Ю. Йосопов:** Ҡаҙаҡтар әйтеүенсә, башҡорттар ҡаҙаҡтарға ҡарағанда йөҙ һыҙаттары, кәүҙә төҙөлөшө буйынса матурыраҡ. Арттырыу тип уйламағыҙ, был ҡаҙаҡ ғалимдарының фекере, беҙҙеке түгел. Сөнки, әле әйтеүебеҙсә, беҙгә генетик яҡтан төрлөлөк хас. Ана шул төрлөлөк милләтте камиллаштыра ла инде. Ни өсөн улай? Был беҙҙең тарих менән бәйле. Быуаттар һуҙымында халҡыбыҙҙың ҙур ғына өлөшөн юғалтҡанбыҙ. Был юғалтыуҙарҙың сәбәпсеһе - милләттебеҙҙең һуғышсан, ирек һөйөүсәнлек сифаты. Бер-бер артлы күтәрелгән ихтилалдар, уларҙан һуңғы килгән ҡырылыуҙар, хәрби ҡатлам булараҡ яуҙарға, походтарға, хәрби хеҙмәткә алыныуҙар халыҡ һанын кәметә лә инде. Аҙайған милләттең төрлө ырыу һәм ҡәбиләләре бер-береһе менән туғанлашырға, берләшергә мәжбүр була. Ә ҡаҙаҡтарҙа бер тоҡомдан бер миллион ярым кеше килеп сыҡҡан. Беҙҙең иһә бөтөн халыҡ бер миллион ярымдан ашыу. Ҡасандыр ҡаҙаҡтар менән башҡорттар һаны буйынса бер тиң булған да, әммә, үрҙә әйтелгәнсә, беҙҙең милләт тәбиғи булмаған юлдар менән кәмеүгә дусар булған. Ҡаҙаҡтар, киреһенсә, үҫкән. Шул арҡала уларҙың генофонды бер төрлө генә булып үҫешкән. Был хәл уйҙырма ла, фараз да түгел, ә - факт. Беҙҙең күпләп ҡырылыу һәм яй үрсеү үҙ-ара ҡатнашыуға алып килгән һәм генофондыбыҙ ҙа төрлө булып киткән. Милләттең таҙалығы һәм сәләмәтлеге өсөн был яҡшы, әлбиттә.

**Р. Аҫылғужин:** Бер төрлөлөк, күп төрлөлөк һәм буталыш, тигәндә, Төньяҡ Кавказ нуғайҙарын тикшереүҙәрҙе миҫал итеп килтерәйек әле. 2013 йылда нуғайҙар йәшәгән территорияларға экспедициялар ойошторолғайны. Һөҙөмтәләр күрһәтеүенсә, нуғайҙарҙа ла башҡорттарҙағы кеүек тенденция. Заманында улар бик ҙур этнос булып, унан аслыҡ, күсенеүҙәр, геноцид бәләләре аша үтеп, аҙ һанда ҡалалар. Бөгөн һандары 100 мең генә, ә генофондары шул ҙур этностағы кеүек үк төрлө-төрлө. Генетик яҡтан беҙгә яҡын халыҡ.

**Ә шулай ҙа, ҡан буйынса беҙгә ҡайһы халыҡ иң яҡыны? Бер гаплотөркөмлө халыҡтар араһында бәйләнеш бармы? Шулай уҡ ҡәрҙәш халыҡтар араһында уртаҡ ырыу атамалары ла етерлек бит...**

**Ю. Йосопов:** Өҙөп кенә әйтеүе ауыр. Тикшереүҙәр барышында хатта ҡайһы бер ырыуҙарға сыуаштар ҙа яҡын икәнлеге асыҡланды. Ҡыпсаҡтарға, әлбиттә, иң оҡшашы - нуғайҙар. Бөрйәндәргә, мәҫәлән, ҡан буйынса лезгиндар бик яҡын булып килеп сыҡты.

*R1a, R1b* гаплотөркөмдәре бөтә Евразияла ла бар. Әммә бер гаплотөркөмлө халыҡтар араһында ҡан бәйләнеше бар икән, тип уйларға ла ярамай. *R1a* менән *R1b*-ның, мәҫәлән, көнбайыш, көнсығыш, Алтай, Урал тармаҡтары, Уралдың да Урал алды, Урал аръяғы тармаҡтары бар. Йәғни, субтиптар. Ә *R1b* дөйөм алғанда бер ҡан. Тик был башҡорттарҙа ғына тигән һүҙ түгел. Беҙ материалдарҙы алып, гаплотөркөмөн белеп, махсус биологик анализдар эшләйбеҙ һәм сағыштырабыҙ. Мәҫәлән, бөрйәндәрҙән шундай уҡ *R1b* булған ҡанды һәм икенсе халыҡтан шундайҙы уҡ алып ҡарайбыҙ һәм уларҙың икеһе ике төрлө икәнен күрәбеҙ.

Шулай уҡ Кавказ халҡындағы *R1b* гаплотөркөмө бөрйәндәр менән яҡынлашҡан. Тимәк, заманында бөрйәндәргә Кавказ йоғонтоһо ҙур булған. Бына ғәйнәләр ҙә шулай уҡ *R1b*, тик улар бөрйәндәр менән бөтөнләй тоташмаған. Ғәйнә *R1b*-һында Европа үҙенсәлектәре бар, йәғни уларға Европанан килгән ниндәйҙер миграция ҡушылған.

**Р. Аҫылғужин:** Шундай осраҡтар ҙа күп: мәҫәлән, Уралға Себерҙән яңы ерҙәр үҙләштереү, баҫып алыу маҡсаты менән бер дружина килгән. Улар алыҫ араға, әлбиттә, ҡатын-ҡыҙын эйәртеп йөрөтмәй. Ир-егеттәрҙән генә торған бындай көскә, ғәҙәттә, урындағы халыҡ ҡаршы тора алмай. Билдәле булыуынса, баҫҡынсылар ҡәүемдәрҙе баҫып алып, ир-егетен үлтерә лә, ҡатындарына өйләнә. Яңы генофонд шулай формалаша. Мәҫәлән, бына гәрәй ырыуы ҡайҙандыр Монголиянан килгән. Улар баҫып алынған территорияһындағы халыҡҡа ырыуҙарының исемен биргән, әммә гендары урындағы халыҡтыҡы булып ҡалған. Йәғни, идара итеүсе клан ситтән килеп, бында иреп юғала, бары тик атамалары ғына ҡала. Шундай осраҡтар ҙа күп.

**Ю. Йосопов:** Шуны ла асыҡлайыҡ, ҡәрҙәш халыҡтар араһындағы, мәҫәлән, ҡаҙаҡтарҙа, нуғайҙарҙа булған уртаҡ ырыу атамалары араһында уртаҡ ҡан юҡ, булғанда ла бик һирәк. Заманында Алтын Урҙаның структур өлөшө булараҡ, улар шулай бер төрлө аталырға мәжбүр булған. Төрлө халыҡ, төрлө ҡан булыуҙа түгел бында сәбәп. Сәбәп хакимлыҡтың структураһын булдырыуҙа. Унан, был хакимлыҡ тарҡалғас, шул атамалар халыҡтар араһында сәселеп киткән. Удмурттар, мәҫәлән, Урҙаға артыҡ яҡын булмағас, уларҙа ом, юм, юма кеүек бик боронғо тамырлы ырыуҙар (варшудтар) атамаһы ғына йәшәп ҡалған. Ә инде хәрби булмаған халыҡтарға ырыуҙар бөтөнләй кәрәк булмаған. Ырыу - ул халыҡтың яугирлығын да аңлатҡан билдә.

**Ҡайһы бер ғалимдар бөрйәндәрҙе ҡурдтар менән бәйләгәйне, һеҙ уларҙы Кавказға теркәйһегеҙ. Дөрөҫлөк ҡайһы яҡта?**

**Р. Аҫылғужин:** Беҙҙең тикшереүҙәр бөрйәндәрҙең ҡурдтарға ниндәйҙер бәйләнеше булыуын кире ҡаға. Үрҙә әйткәнебеҙсә, элекке тикшеренеүҙәр гел бер яҡлы ғына булып, тулы мәғлүмәт бирә алманы. Күптәр "башҡорт - ҡурд" тигән һүҙ оҡшашлығына таянып ҡына эш итте. Был бәйләнеш тик фонетик яҡтан ғына килтереп сығарылған. Тик фәндә халыҡтарҙың оҡшашлығын йәки берлеген бер өлкә генә билдәләмәй. Бында археология, лингвистика, генетика, тарихи сығанаҡтар өйрәнелергә тейеш. Тап ошо нигеҙҙәге тикшереүҙәр бөрйәндәрҙең Кавказдан килгән халыҡ икәнен күрһәтте.

**Шулай итеп, беҙҙең ҡайһы ырыу Уралдың иң боронғо халҡы булып сыға инде?**

**Ю. Йосопов:** Уралдың иң боронғо халҡы юрматылар булған. Әлеге ырыу шул халыҡтың бәләкәсәйгән өлөшө генә. Түңгәүерҙәр ҙә боронғо халыҡ, әммә уларҙың ҡаны төрлөсә, тимәк, төрлө ерҙән килгәндәр берләшмәһе булып сыға. Бөрйәндәрҙең гаплотөркөмө лә бик боронғо, улар тарихи яҡтан да уникаль ырыу. Әммә анализдар буйынса юрматылар иң ерлекле халыҡ булып табылды. Улар геновид айырмалыҡтарын һаҡлап ҡалған. Мин, бөрйән башҡорто булараҡ, юрматыларға аҡ көнләшеү менән ҡарайым.

**Генетик тикшеренеүҙәр, ырыуҙар бүленешен өйрәнеү, ғөмүмән, һеҙҙең хеҙмәт һөҙөмтәләре ҡайһы бер кешеләрҙең яҙмышына ла йоғонто яһаны, шулай бит? Мәҫәлән, ғүмер буйы икенсе милләт булып йәшәгәндәр ошо тикшереүҙәрҙән һуң үҙенең башҡорт булыуын белде. Ошондай хәлгә дусар булғандар нисек ҡабул итә яңылыҡты?**

**Р. Аҫылғужин:** Мин Миәкә районында тыуып үҫтем. Үҙем йөрөп уҡыған күрше татар ауылы халҡының ысынында башҡорттар икәнен бәләкәйҙән белә инем. Рәсми рәүештә улар үҙҙәрен татар милләтенән тип таныһа ла, ҡартатайым иһә, улар ҙа башҡорттар, тип әйтә торғайны. Елдәр, Шатмантамаҡ, Кәркәле ауылдары ла шулай уҡ беҙҙең ырыуҙаштар, ти ине ҡартатайым. Тикшерә башлағас, улар ысынлап та башҡорттар, тик икенсе аранан булып сыҡты. Һарылы мең ырыуынан икән улар, ваҡытында беҙҙең ерҙәргә припущенник булып индерелгәндәр. Хатта ҡайҙан килеүҙәрен дә билдәләнек. Миңзәлә өйәҙенән булып, тел айырмалыҡтарына ҡарап, уларҙы "татарҙар" тигән дә ҡуйғандар. Архив материалдары буйынса тикшерә башлаһаҡ, метрикалары, ревизские сказки мәғлүмәттәре, шәжәрәләре буйынса - башҡорттар. Миңзәлә йылғаһы буйынан, әлеге Татарстандың Сәрмән районынан килеп сыҡҡандар. Унда әле лә 15-20-ләп меңле ауылы бар. Булдыҡ уларҙа ла, ҡарттары менән һөйләштек. Һарайҙы ырыуы Имән ауылынан шундай бай шәжәрә алдыҡ. Шәжәрәләрендә лә аҡҡа ҡара менән "башҡорттар", "башҡорт иленән" тигән һүҙҙәр яҙылған. Был ғына түгел, 2012 йылда генетик тикшереүҙәр башланғас, исемлеккә мотлаҡ рәүештә уларҙы ла индерҙек һәм тикшереүҙәр һөҙөмтәһе уларҙың меңле башҡорттары икәнен иҫбатланы. Шулай итеп, Башҡортостандағы ла, ситтәге лә меңләләр - улар бер ырыу халҡы.

**Ю. Йосопов:** Дөрөҫ аңларға кәрәк, беҙ ниндәйҙер икенсе милләтте кәмһетеү йәки уларҙың хоҡуҡтарына ҡул һуҙыу ниәтендә эш итмәйбеҙ. Беҙ бары тарихи дөрөҫлөктө тергеҙәбеҙ. Мәҫәлән, ҡасандыр айырым милләт булып торған мишәрҙәр ваҡыт үтеү менән буталып, ҡатнашып бөткән. Бөгөнгө Татарстан татарҙарын алһаҡ, уларҙың 60-80 проценты элекке мишәрҙәр. Генетик яҡтан Башҡортостандың мишәрҙәрен дә тикшерҙек. Әле был мәғлүмәттәр әҙерләнеү өҫтөндә. Мәскәү лабораторияларындағы эштәр тамамланһа, беҙ был хаҡта хәбәр итербеҙ.

**Р. Аҫылғужин:** Пермь өлкәһендә лә бик яҡшы ҡабул иттеләр беҙҙе. Белеүегеҙсә, унда мәҙәни баҫым бик көслө була. Мәктәптәрҙә татар телендә уҡытылыу, милләтте татар итеп яҙҙырыу һ.б. этнографик үҙгәрештәр автоматик рәүештә индерелә. 1989 йылда Советтар Союзындағы иң һуңғы халыҡ иҫәбен алыу булды. Башҡортостанда башҡорттарҙың

*✓ Башҡорт милләте - ул донъя халыҡтары араһындағы феномен. Тик беҙҙең халыҡтың менталитеты шундай, улар үҙҙәренең был феноменлығын һыҙыҡ өҫтөнә алып күрһәтә белмәй. Бәлки, улар уға мохтаж да түгелдер.*





## ЮЛДАШ ЙОСОПОВ:

*Уралдың иң боронғо халҡы юрматылар булған. Бөрйәндәрҙең гаплотөркөмө лә бик боронғо, улар тарихи яҡтан да уникаль ырыу. Әммә анализдар буйынса юрматылар иң ерлекле халыҡ булып табылды.*



## РӘФИЛ АҪЫЛҒУЖИН:

*Беҙ проектҡа үҙебеҙҙең яңылыҡ менән килдек. Бығаса берәү ҙә генетиканы ырыу (ҡәбилә) төркөмдәре буйынса тикшермәгәйне әле. Бығаса генетика тарихы бары территорияға бәйләп кенә өйрәнелә ине.*

**Шулай ҙа ҡапыл икенсе милләт икәнлегеңде аңлау еңел түгелдер ул, шулай бит? Нисек уйлайһығыҙ, ошо асыш менән үҙаңды үҙгәртеп буламы?**

**Р. Аҫылғужин:** Әлбиттә, был аңлау, хатта яңылыҡты ҡабул итеү ҙә ҡапыл ғына килә алмай. Күп осраҡта халыҡ шаңҡып ҡала. Уларға дөрөҫлөктө ҡабул итеү өсөн бер китап ҡына аҙ, был дөрөҫлөккә нигеҙләнгән тотош программа эшләргә кәрәк. Дөрөҫөрәге, көньяҡ-көнсығыш райондарында йәшәгән башҡорттарҙың көнбайыш башҡорттарына ҡарата ҡалыплашҡан мөнәсәбәтен үҙгәртергә кәрәк. Улар үҙ башҡорттарын, телдәренә генә ҡарап, татар тип мөһөрләне. Беҙ бына көнбайыш халҡы араһында эшләйбеҙ, осрашыуҙар үткәрәбеҙ, улар тарафынан бер ҡаршылыҡ та юҡ. Ризаһыҙлыҡты беҙҙең "аҫаба" исеме алып өйрәнгән һаны кәмене, ә Илеш менән Барҙы районында үҫте. Беҙҙең китаптарҙы ла шул райондарҙағы татар тип иҫәпләнгән халыҡ кире ҡаҡманы.

Аллаға шөкөр, нисек кенә булғанда ла, алдыбыҙға алғандарҙы тормошҡа ашырып киләбеҙ. Мөслим районында, мәҫәлән, күптәр сығып, башҡорт булыуыбыҙҙы таныйбыҙ, әммә Татарстанда йәшәп, татарса һөйләшеп өйрәнгәнбеҙ, ҡалайтаһың инде, тинеләр. Һәм уларға баҫым яһалырға ла тейеш түгел. Был мәҙәниәтһеҙлек буласаҡ. Беҙ, ғалимдар, халыҡҡа дөрөҫлөктө генә аса алабыҙ, ә уны ҡабул итеү-итмәү - уларҙың үҙ эше.

башҡорттарҙан ғына ишетергә мөмкин. Көнбайыш башҡорто булараҡ, күп ерҙә минең үҙемде лә "татар" тип ситләттеләр. Ошондай аңһыҙ һәм сәләмәт булмаған мөнәсәбәт, үкенескә ҡаршы, хатта интеллигенцияны ла ағыулап өлгөргән. Был бик нескә тойғо. Ғәҙәттә, бындай ғәйепләүҙәр эмоцияларға ғына ҡоролған була. Тарихты белгән, милли мәҙәниәтте өйрәнгән кеше ундай һығымталар яһарға ашыҡмай. Ғәҙәттә, башҡаларҙы кәмһетеү - ул үҙенән кәмһенгәндәр комплексы. Башҡорт халҡы үҙен кәмһетелгән итеп тоймаһын, киреһенсә, ошо ерҙәрҙең хужаһы итеп, тимәк, үҙе өсөн генә түгел, башҡа милләтәр өсөн дә яуаплы итеп тойһон. Беҙ үҙ дәүләтебеҙҙе үҙ көсөбөҙ менән барлыҡҡа килтергән титуллы халыҡ. Үҙебеҙҙең кемлегебеҙҙе беләйек.

**Ю. Йосопов:** Совет заманында беҙҙең ғалимдар көнбайыш башҡорттары менән эшләргә тартынды. Бөгөн иһә уларға йөҙ менән боролорға кәрәк. Шул уҡ ваҡытта талаптарын да хөрмәт итеү зарур. Мәҫәлән, тел яғынан. Улар "з", "с" өндәре менән һөйләргә өйрәнгәндәр икән, ниңә уларҙың тыуғандан алып һөйләшкән телдәрен йолҡоп алып, әҙәби тел юҫығына ултыртырға? Әҙәби телде генә уртаға ҡуйырға ярамай. Был хәл көнбайыш башҡорттары араһында ҡаршылыҡ тыуҙырҙы ла инде. Был юҫыҡта комплекслы эшләргә кәрәк. Беҙ, ғалимдар, шул эшкә нигеҙ генә һалабыҙ. Артабан мәғариф, мәҙәниәт, сәйәсәт һ.б. өлкәләр бергәләп эшләргә тейеш. Минеңсә, был өлкәлә лә беҙҙең Мәғариф министрлығының грамоталы ҡарашы етмәй. Шулай уҡ Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайҙың да иғтибары аҙ был тәңгәлгә. Көнбайыш диалектының проблемаһы күптән хәл итеүҙе көтә. Көнбайыш райондарындағы башҡорт балаларының өҫтәлендә инде күптән "Татар теле" дәреслеге түгел, ә көнбайыш диалектындағы "Башҡорт теле" ятырға тейеш. Мин дә Рәфилдең фекерен йөпләйем: Илеш, Йәрмәкәй, Миәкә кеүек тел айырмаһы булған башҡорттарҙы "башҡорт түгел" тиеүселәр йәки "икенсе сорт" башҡорттары тип кәмһетеүселәр үҙҙәре милләткә хыянат итеүселәр ул.

**Ни өсөн генетик тикшеренеүҙәр тик ир-егеттәр аша ғына ҡарала? Шуны гәзит уҡыусыларға ябай тел менән генә аңлатығыҙ әле?**

**Ю. Йосопов:** Генетик тикшеренеүҙәрҙең дүрт тикшереү объекты бар. Беренсеһе, игрек хромосома - ирҙәр гены, икенсеһе, митохондриаль ДНК - ҡатын-ҡыҙҙар гены, аутосома - енесле булмаған гендар, йәғни күҙ, ҡаш, сәс кеүек тышҡы ҡиәфәткә йоғонто яһаусылар. Экзома - ошо быуында эшләүсе, әле эшләп ятыусы гендар. Игрек гендарҙың өҫтөнлөгө шунда, ул бөтә мутацияларҙы ла һаҡлай ала. Унын хәтере юйылмай. Гендағы бөтә үҙгәрештәрҙе лә яҙып ҡуйыу һәм күрһәтеү һәләтенә эйә. Мәҫәлән, ирҙәр гены бөтөн бар булыу дәүерендәге генетик тарихты һаҡлап килһә, ҡатын-ҡыҙ гены бер дәүерҙән бер мәғлүмәтте, икенсе дәүерҙән- икенсе мәғлүмәтте, тағы ла ниндәйҙер бер быуындың мәғлүмәттәрен һаҡларға мөмкин. Йәғни, унда тәртип тә, эҙмә-эҙлелек тә юҡ. Бына, ябай итеп әйткәндә, фотоаппараттың, телефондарҙың ҡайһыларының мөмкинлектәре юғары, ҡайһыларыныҡы сикле. Бында ла шуның кеүегерәк. Игрек хромосоманың мөмкинлектәре юғары, ә митохондриалдыҡы түбән.

Биология фәне буйынса игрек хромосоманың мөмкинлектәре ҡатын-ҡыҙҙыҡына ҡарағанда юғарыраҡ булыуы һәм шәжәрәнең ир енесе аша төҙөлөүе осраҡлы күренеш түгел. Был Аллаһы Тәғәләнең бер ҡөҙрәте, тип кенә әйтә алам. Әммә тарихта ир-егеттең өҫтөн булыуы социаль яҡтан да билдәләнгән. Сөнки ул - яугир, ул көслө, бөтөн донъяуи һәм сәйәси хәлдәрҙе ул хәл иткән.

**Башҡорт ырыуҙары ниндәйҙер ҡатлам формаһында йәшәгән, тигән мәғлүмәт тә булғайны. Мәҫәлән, юрматылар - элита, бөрйәндәр менән ҡыпсаҡтар ғәскәр ролен башҡарыусылар, һәм башҡалар. Ошо фекерҙе дөрөҫләйһегеҙме?**

**Ю. Йосопов:** Юҡ, дөрөҫләмәйем. Ҡатламлы система башҡорттарға хас түгел. Был ҡаҙаҡтарҙың системаһы. Шәжәрәләре лә шундай иерархия нигеҙендә төҙөлгән, ә ҡан туғанлығына ҡарап түгел. Төркмәндәрҙә лә шулай. Башҡорттарҙа иһә ырыуҙар тиң хоҡуҡлы булған. Һәм һәр ырыуҙың үҙенең айырым шәжәрәһе төҙөлгән. Ҡаҙаҡтарҙа, мәҫәлән, иерархия хан тирәләй теҙелгән. Ә башҡорттарҙың хандары һәр ваҡыт ситтә, географик рәүештә алыҫта урынлашҡан булған. Беҙҙең милләт борондан ҙур империяларҙың структур өлөшө булған. Ҡаҙаҡтар Алтын Урҙа империяһы тарҡалған мәлдә барлыҡҡа килеп, ҡаҙаҡ ханлыҡтары төҙөп йәшәһә, башҡорттар элек-электән автономиялы, ҙур империялы дәүләт булдырып йәшәгән. Уларҙың хандары ла был структуранан ситтәрәк торған. Был социаль ойошма иерархия халәтенән күпкә ҡатмарлыраҡ. Бына шуның өсөн дә заманында Рәсәй дәүләтенә ҡушылыу ҙа, һуңынан автономиялы республика төҙөү ҙә беҙҙекеләр өсөн артыҡ ауырлыҡ тыуҙырмай. Улар был алымды күптән белә. Ҡан хәтере, тип әйтер инем мин был ырыу үҙаңын. Тәүбашлап автономиялы булыу идеяһын башҡорттар барлыҡҡа килтергән, унан уны башҡалар ҙа үҙләштергән...

**Баш мөхәрриребеҙ Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы "Башҡорттар - Аллаһтың һөйгән халҡы" тип ҡабатларға ярата. Ошо фекерҙе һеҙ ҙә дөрөҫләйһегеҙме?**

**Р. Аҫылғужин:** Был ябай фекер генә түгел, был - факт. Беренсенән, башҡорттарҙың генетик төрлөлөгөн алайыҡ. Бындай төрлөлөк бер ҡәрҙәш халыҡта ла юҡ. Был төрлөлөк ҡандың, гендарҙың таҙалығын күрһәтә. Икенсенән, ике йөҙ йыллыҡ ихтилалдар улар берәүҙә лә булмаған рух күрһәткесе. Күп халыҡтар, мәҫәлән, ниндәй күп һәм көслө булған ҡаҙаҡтар, бер нисә ихтилалды ла күтәрә алмай. Мәҫәлән, Бохар ханлығы, ҡайһындай дәүләт ойошмаһы булыуына ҡарамаҫтан, рус армияһының ҙур булмаған көсө менән генә лә ҡыҫҡа ваҡыт эсендә яулап алына. Ниндәй абруйлы Нуғай дәүләте тарҡатыла. Тау халҡын көслө, рухлы халыҡ, тиҙәр. Ә ниндәй тау халҡы беҙҙең милләт үткәргән ихтилалдар марафонын, ике йөҙ йыллыҡ баш күтәреү һәм ҡырылыуҙарҙы кисергән? Башҡорт милләте - ул донъя халыҡтары араһындағы феномен. Тик беҙҙең халыҡтың менталитеты шундай, улар үҙҙәренең был феноменлығын һыҙыҡ өҫтөнә алып күрһәтә белмәй. Бәлки, улар уға мохтаж да түгелдер.

Бына беҙ күптән түгел нуғайҙарҙа булдыҡ. Улар ҙа хәҙер аҙ ҡалғандар, йәмғеһе йөҙ меңләп барҙыр. Бына шул халыҡ үҙен бөйөк төрки халҡының бер өлөшө итеп күрһәтеүгә шундай ынтыла, шул ынтылыштары сәсрәп тора хатта. Ә беҙҙең автономиялы булыуыбыҙ, образлы әйткәндә, аңыбыҙға ла һеңгән. Беҙ шул сиктән сыҡмайбыҙ, артығына ынтылмайбыҙ, аръяғы менән ҡыҙыҡһынмайбыҙ. Бөгөн беҙ рухи яҡтан бер аҙ кризис кисерәбеҙ. Үҙебеҙҙең кем икәнлегебеҙҙе бер аҙ онотоп киткәнбеҙ. Хәҙер бына беҙгә күтәрелеү өсөн ошо ырыуҙарҙы, ҡанды өйрәнеү нигеҙ булырға тейеш. Тағы ла бер күтәрелеү юлы - ул дин.

**Ю. Йосопов:** Эйе, башҡорттар булмаһа, был төбәктә Ислам булмаҫ та ине. Беҙҙең ата-бабаларыбыҙ Исламды ана шул һаҡланып ҡалыу юлы итеп һайлаған һәм яңылышмаған да. Милләттең интеллектуаль андарының (аҡһаҡалдар, тархандар, хәрби етәкселек һ.б.) һынылышлы осорҙарҙа артабан тереклек итеү, үҫешеп йәшәй алыу мөмкинлектәрен дөрөҫ тоҫмаллай алыуы арҡаһында беҙ бөгөнгәсә килеп еткәнбеҙ. Исламды ҡабул итмәгән халыҡтар, тарҡатылып, туҙҙырылған йәки ситкә күсеп китергә мәжбүр булған. Быларға бортастар, сувар кеүек халыҡтарҙы индереп була. Хатта болғарҙар ҙа Исламдың ниндәйҙер этаптарын үтә алмаған.

Бөгөн урындағы дингә сит ил үҙәктәренең йоғонтоһо ҙур. Башҡорттар ҡасандыр динде халыҡ булып йәшәү, үҫешеү юлы итеп һайлаған һәм яңылышмаған. Бөгөн дә ошо уҡ һынау тора халҡыбыҙ алдында.

### ШУЛАЙ ИТЕП...

**Башҡорт ырыуҙарын өйрәнеүсе томлыҡтарҙың киләсәге ҙур, аңлауымса. Улар әле лә ижад ителеү, баҫылыу, таратылыу өҫтөндә. Әммә беҙ әңгәмәләшкән ғалимдар әйтеүенсә, башҡорт йәмғиәте эшмәкәрлегенән башҡа был китаптар көсөнә инә алмай. Был хеҙмәттәр нигеҙендә берҙәм эштәр алып барылырға тейеш. "Уҡтар яһалған да ян юҡ", тип бик образлы итеп йомғаҡланы егеттәр үҙ фекерен...**

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА**
**әңгәмәләште.**

✓ ***Бурысың - шул көсөктәрҙе имеҙеү. Улар һинең менән бер бүлмәлә йәшәйәсәк, асығып, аяҡтарың аҫтында урала башлаһалар, алаһың да имеҙәһең, бары шул ғына...***



Ир уның уйын уҡығандай әйтте:

- Ҡурҡма, мин һин уйлағанса, насар кеше түгелмен. Бары тормош ысынбарлығына айыҡ күҙлектән ҡарап, аяуһыҙ йәшәйеш шарттарына яраҡлашып йәшәйем. Эш эҙләп, темеҫкенеп йөрөйһөңмө?

"Темеҫкенергә мин эт түгелмен", тип саҡ әйтеп ысҡындырманы, шулай ҙа тыныс ҡалырға тырышып, әҙәпле яуапланы:

- Эйе.
- Уңыштар?
- Табып булмай.

- Ары ла таба алмаясаҡһың, сөнки һин - килмешәк, пропискаһыҙ ундай әтрәгәләмдәр менән ҡала тулған, бер телем икмәк өсөн бер-береһенең боғаҙын сәйнәп өҙөргә әҙерҙәр. Таныш булайыҡ, мин ошо йорттоң төп хужаһы, һөнәрем буйынса элек бизнесмен инем, хәҙер тормоштоң рәхәтлектәренә кинәнеп, үҙем теләгәнсе көн итәм. Ҡатыным бынан ике йыл элек яман шештән яфаланып үлеп ҡалды. Хәҙер улым, киленем, әсәйем янымда. Бына ошо таш ҡәлғә беҙҙең дөйөм өңөбөҙ. Улым минең юлды ҡыуа, егәрле, заман эшҡыуары, шуға ла өйгә һирәк ҡайтып күренә. Киленем шоу бизнес, тиҙәрме әле, шунда. Бар белгәне - исемен яңғыратырға тырышыу. Уның тураһында аҙға ғына булһа ла оноторға тейеш түгелдәр, нисек тә яйын табып, яманатын сығарып булһа ла, был донъяла үҙенең барлығын, сәхнә йондоҙо икәнен күрһәтеп ҡуя. Әле бала тапты ла, фигурам боҙола, тип, хәләлен имеҙергә, уны бағырға теләмәй. Круглая дура, мать ее...! - Бер яҡ ситкә төкөрөп, ҡаты итеп һүгенеп ҡуйҙы. - Йәнә, әсәйем бар, ул ҡарт инде, туҡһандың яртыһын тураҡлаған, әле тотош быуындары ҡатып, түшәктә хәрәкәтһеҙ ята. Иҫе лә инәле-сығалы, һөйләгән хәбәренең дә рәте юҡ, һаман шул үткән быуаттың утопик идеяларына, ҡиммәттәренә табына. Аҡылға еңеләйгән, тиергә лә мөмкин. Бына ғаиләм менән таныштығыҙ ҙа. Алдан уҡ иҫкәртәм, ҡурҡыу кәрәкмәй, беҙ - юғары интеллигенция вәкилдәре, тәрбиәле кешеләр. - Ир йөнтәҫ беләге буйлап үрмәләгән бөжәкте бер килке күҙәтте лә, уны усы менән шапылдатып һуғып иҙгәс, әйткәндәрен ялғаны. - Әйткәндәй, һеҙ беҙҙең өсөн зыянһыҙ кеше, как эта раздавленная божья коровка. Ҡайҙан, ни сәбәп менән килеүегеҙ, ғөмүмән, шәхси тормошоғоҙ мине бөтөнләй ҡыҙыҡһындырмай, әммә тәҡдимем бар. Дөрөҫөрәге, һеҙгә эш таба һәм тәҡдим итә алам!

Дилемма тыңлағанын белдереп турайҙы.

- Эш шунан ғибәрәт - ауырыу әсәйемде бағыу, өйҙө йыйыштырыу. Ошонда йәшәрһегеҙ. - Эт аҙбары йәнәшәһендәге тимер ишекле, ике тәҙрәле кирбес йортҡа төрттө. - Унда яҡты, йылы, таҙа. Стена аша әле һине эйәртеп йөрөгән хеҙмәтсемдең бүлмәһе. Ҡамасауламаҫ, уның ауыҙынан артыҡ бер һүҙ тартып алырмын тимә. Тәү ҡарашҡа телһеҙ ҙә, һаңғырау ҙа һымаҡ. Уның ҡарауы, бурыстарын еренә еткереп үтәй, тоғро эттән артыҡ булмаһа, кәм түгел. Эш хаҡына килгәндә, ҡыйырһытылмаҫһың. Уны бер ай алдан биреп ҡуя алам. - Ир пинжәгенең түш кеҫәһенән портмоне сығарып, унан мең һумлыҡ евро алып, өҫтәл ситенә һалды. - Белеп ҡуй, ундай аҡсаны бер ай эсендә бер генә уҡытыусы ла, медик та, инженер ҙа эшләп таба алмай. Ә мин һиңә уны ай һайын, һуңлатмай, мәлендә түләйәсәкмен.

- Мин риза! - Дилемма ир баш тартып ҡуймаһын, тигәндәй, ҡабаланды. - Бөгөндән.




Ир мәғәнәле көлөмһөрәп текәлде:

- Үтәйәсәк бурыстарҙы атап бөтөрмәнем дә бит әле, ә һин...

"Туҡта, нимәгә кинәйәләй был ҡарт алаша? Ә-ә-ә, аңлашылды..."

- Я не буду вашей любовницей! - Дилемма ҡырт боролоп, китергә йыйынды. - Нет, еще раз нет!

- Ха-ха-ха! - Ир, ҡайҡайып, айға өргән эткә оҡшатып, лауылдап көлөп ебәрҙе.

Көлөп туйғас, кеҫәһенән ҡулъяулығын сығарып, йәшләнгән күҙҙәрен һөрттө:

- Һөйәркә, тиһеңме? - Ул яңылыш ишетмәнемме, тигәндәй, ҡабатлап һораны ла йөҙөн етдиләндерҙе. - Үкенескә ҡаршы, һөйәркәләр һөйөргә йәш үтеңкерәп ҡалған. Улар, кәрәккән хәлдә лә, ишаралайым ғына, хәҙер өйөрө менән килеп тулаҫаҡтар. Ошо аҡсаны күрһәтәйем генә, минең тотош кәүҙәмде яларға әҙер улар!

- Улайһа, ниндәй эш бирмәксеһегеҙ?

- Һиҙәм, һин ғорур зат, үҙ баһаңды беләһең. Шуға был ҡалала шөғөл таба алмай, башыңды юғары тотоп ҡайтып китергә генә ҡала.

Дилемма иларға етешеп, йөҙөн боҙҙо:

- Кире ҡайтырлыҡ та аҡсам ҡалманы.

- Ҡайһылай итәйем, бер нисек тә ярҙам ҡулы һуҙа алмайым. Кеҫәмдән аҡса сығарып өләшеп ултырырға мин бит меценат та, хәйриә ойошмаһы ла түгел.

- Эшләргә ризамын. Әйтегеҙ.

- Бурыстарыңды белмәй тороптамы?

- Эйе. Һөйәркә булыуҙан тыш, барыһын да эшләй алам.

- Бына был икенсе яуап. Бөгөнгө көндә ер йөҙөндә бар тереклекте хәрәкәткә килтерер бер генә ҡөҙрәтле көс бар. Ул - аҡса! Шул аҡса өсөн бөтәһен эшләргә әҙерҙәр, хатта бер-береһен һуйыуға ҡәҙәр барып етәләр. Сөнки әҙәмдең булмышы йыртҡыс, шуны белеп ҡуй, ул - тоҡомһоҙ зат. Эттең тоҡомо бар, ә кешенеке? Тоҡомло эттәрҙе таҙа нәҫел ҡалдырһындар өсөн ентекләп тикшереп ҡауыштыралар. Ә аҙғын әҙәм балаһы был хаҡта уйларға ла теләмәй. Ҡан ҡатнашып бөттө, бер милләтте икенсеһенән айырырмын тимә. Шуға ла миңә кешегә ҡарағанда эт яҡыныраҡ, эт ҡәҙерлерәк! Үҙемсә йәшәйем, тинем. Ҡыҙыҡһыныуым, йәғни мине тотошлайы менән арбаған хобби - эттәр үрсетеү, уларҙан яңы тоҡомдар алыу. Ана, ҡарағыҙ - ғорурлыҡтарым! - Вольер яғына ымланы. - Мин эттәр донъяһында үҙ кеше, биләгән урыным, баһам бар. - Ир, нишләптер, "эттәр донъяһына" баҫым яһаны. - Беҙ даими аралашабыҙ, тәжрибәбеҙ менән уртаҡлашабыҙ. Элек-электән ҡан ҡойоу, тамаша ҡылып йән алыу йолаһы йәшәй. Боронғо Римда гладиаторҙар һуғышын сәнғәт бейеклектәренә күтәргәндәр, уны ҡарарға ер аяғы, ер башынан меңәрләп халыҡ йыйылған. Испаниялағы корриданы ғына алып ҡара, иҫ китмәле драма, юҡ, трагедия! Тореадорҙың ҡыҙыл сепрәгенә ташланған үгеҙҙе күргәнегеҙ барҙыр? О-о-о, ниндәйерәк ҡабатланмаҫ тамаша! Ярһыуҙан ҡоторған, бар донъяны мөгөҙөнә элергә әҙер үгеҙҙең елкәһенә һөңгө ҡаҙала! Берәү, икәү, өсәү... Бисара хайуан, хәлһеҙләнеп, еңеүсенең алдына теҙләнә башта, шунан гөрһөлдәп туҙанлы ергә ауа... Ал ҡан йылға булып аға... Ә бит етеҙ, йылғыр тореадорҙың да ошо хәлдә ҡалыуы бик мөмкин! Ләкин нисек кенә булһа ла ул был хәүефле тамашала ҡатнашырға әҙер, сөнки уға аҡса кәрәк, был килем ҡоло ла аҡсаға табына, аҡса хаҡына үлем менән уйнай, шаяра... Шекспирҙың трагедиялары бөгөнгө көндә бер кемгә лә кәрәк түгел, ҡанлы, үлемесле алыштар күпкә мауыҡтырғысыраҡ һәм ҡыҙыҡлыраҡ... Ҡандың һарҡыуын күреү, тереклектең һүнә барған ҡарашын күҙләү ҡабатланмаҫ тамаша! - Шул мәлде күҙ алдына килтергән ир тамшанып ҡуйҙы. - Эттәр талаштырыу традицияһы ла бар. Дөрөҫ, ул ун туғыҙынсы быуатта уҡ күп илдәрҙә закон тарафынан тыйылған. Әммә беҙҙә йәшәй, уларҙы еренә еткереп ойошторабыҙ, юғары кимәлдә үткәрәбеҙ. Кем күрә лә, кем белә! Милицияның башы икенсерәк проблемалар менән ҡатҡан: кеше үлтереү, наркомания, эскелек, үҫмерҙәр араһында енәйәтселек сәскә ата бөгөн. Ошолар менән сағыштырғанда, эт талаштырыу - балалар уйыны һымаҡ ҡына ҡабул ителә. Шуға беҙҙә эштәре лә юҡ. Ошо тамашанан мин әллә күпме аҡса эшләйем. Ундай аҡса тураһында һин хыялланырға ла ҡурҡаһың. Ә беҙ уны валюта иҫәбенән көрәп алабыҙ, бер кистә кеҫәгә һалабыҙ. Аллаға шөкөр, тәрбиәләнеүселәрем бик һирәк еңелә, сөнки, тимер мускуллы, аллигатор томшоҡло, йыртҡыс булмышлы, яугир рухлы эттәр бары миндә генә. Башҡа бер кемдә лә түгел! - Ир батырлыҡтарына маҡтанған һуғышсылай, маһайып, башын юғары сөйөп ебәрҙе. - Әле һин инешләй анау этте күрҙең бит әле. Ул бультерьер. Бультерьерҙың асылын беләһеңме? Уның тәнендә бульдог һәм терьер ҡаны йүгерә. Улар торғаны менән интеллигенттар, ғәҙелдәр, тоғролар, үҙһүҙлеләр, аҡыллылар, хәрәкәтсәндәр! Бультерьерға бағышланған шиғырҙы һөйләйемме? Йәшермәйем, бөйөк шағирҙарҙың бер шиғырын да яттан белмәйем, ә был юлдар онотолмаҫлыҡ булып хәтеремә уйылғандар. Китап уҡырға яратманым һәм яратмайым. Шулай ҙа мәктәп эскәмйәһенән үҙ иткән образым - Гоголдең "Үле йәндәр"ендәге Ноздрев. Шул Ноздрев бисәләрҙе түгел, эттәрҙе иркәләп көн итә бит... Берүк ғәфү, ситләшеңкерәп киттем. Тыңла! - Ир, тороп, аяҡтарын кирә баҫты ла, илһамланып, ҡоласын йәйеп ебәрҙе:

*Бультерьер -*
*покатый профиль,*
*Красоты - необычайный,*
*Ласки он наверно просит*
*Взглядом красным*
*и печальным*
*Вида ты его не бойся,*
*Подойди, погладь за ухом.*
*Тут же завиляет хвостик*
*И тебе он станет другом.*

*Он ранимый - он не "крыса",*
*Оскорблений не выносит.*
*Он хоть белый,*
*не пушистый,*
*Но в душе пушистей кошки.*

Нисек шәп яңғырай, ә? Тот та ошо шиғырға эт хаҡында моңло йыр, юҡ, марш йә оратория яҙ! - Ситтәге эт ояһына ымланы. - Мин был этте башҡаларҙан айырып тотам, аристократтар нәҫеле ситлек эсендә түгел, иректә йәшәргә тейеш! Тағы әтнәкә шунда, был кәнтәйҙең ише бар ине. Бик көслө, йыртҡыс фиғелле терьер. Башҡаларҙы аямай, йолҡҡослап ырғыта, ә үҙ кәнтәйенә наҙлы, мәрхәмәтле. Ысын рыцарь! Шул Пират ҡушаматлы терьер яңыраҡ турнирҙа көтмәгәндә еңелде бит! Быҙау ҙурлыҡ немец овчаркаһы абайламаҫтан алҡымынан алып өлгөрҙө лә ысҡындырмай быуып үлтерҙе. Овчарка, тинем, эттәр иерархияһындағы түбән ҡатлам йән эйәһе бит ул, уның исеме лә "овец" һүҙенән алынған, йәғни һарыҡ көтөү өсөн тәғәйенләнгән нәмә. Әрәм итте, ҡороғор, хәйерсе, минең аристократты! Пираттың еңеүенә ышанып, кассаға һалған миллиондан ашыу аҡсам теге овчарка хужаһының кеҫәһенә төшөп ятты. Аҡса нимә генә, бөгөн - бар, иртәгә юҡ, этем йәл. Шул мәлдән алып ошо кәнтәй эсенә бикләнде, ирәбелеген юғалтты, миңә һаҡ, шиксел ҡарай. Үс һаҡлаған төҫлө лә күренә. Бультерьерҙың бер насар ғәҙәте бар, хыянатты онотмай, иртәмеһуңмы, ҡон ҡайтарыусан. - Үҙ алдына һөйләнеп ҡуйҙы. - Хыянатты эттең эте онотмай. Кеше, нишләптер, кисерә, ғәфү итә. Бына минең малай, мәҫәлән, аҡса эшләйем, тип, өйгә ҡайтып ингәне юҡ, кемгәлер ышанып, ҡатынын ҡалдырған. Шул аҡсаны бындағы йөрөмтәл бисәһе туҙҙыра, туҙҙырып ҡына ҡалмай, ғаиләле була тороп, әсәлеген онотоп, асыҡтан-асыҡ эргәһендә бөтөрөлгән бисәкәй ирҙәр менән уйнаш итә. Ә минең малай бер ҡатлы, ышаныусан. Ул ҡайтып төшһөн әле, бындағы һеперткеһе уны фәрештә фиғеле менән ҡаршы аласаҡ. Күр ҙә тор. Ошонан аҙаҡ ышан инде ҡатын-ҡыҙға! - Ҡаты итеп һүгенде лә сигарет тоҡандырҙы, тәрән һурып тарта башланы, бер аҙҙан тынысланды шикелле, йөҙөнә һаран йылмайыу сығарҙы - Әммә был эттең үсле текәлеүенән тамсы ла ҡурҡмайым. Нимә эшләй ала ул! Мин уның хужаһы, ашатамэсерәм, аҫырайым.

Маҡтаулы ошо кәнтәй ике көн элек донъяға дүрт көсөк килтергәйне. Тик бәлә шунда: эт көсөктәрен имеҙә алмай. Имсәктәрендә тамсы ла һөт юҡ. Әллә теге ҡайғыһынан һуң һөтө ҡасып, имсәктәре ҡорономо - белмәҫһең. Заман ахырыһы етһә, ҡатын-ҡыҙҙың күкрәгенән һөт ҡасыр, балалар аслыҡтан интегер, тигәнде ишеткәнем бар ине. Кейектәрҙең кейектәре шул ҡазаға тарығас, ысынлап та ахрызаман еткәндер. Ысынын әйткәндә, ахырызаманда йәшәйбеҙ, ҡиәмәт көнөн көтәһе генә ҡалды. Минең дә бер аҙ хатам барҙыр, тим, һуғышсан тоҡом алам, тип, селекция эштәрендә эттең әсәлек сифаттарын һанға һуҡмағанмын. Көслө тештәр, уҡтай тырнаҡтар алыш өсөн яратылған, ә бына был кәнтәй ябай ғына шөғөлгә, көсөктәрен имеҙергә эшкинмәй. Бында бер көсөкләгән кәнтәй бар барлыҡҡа, тик, яттарҙы алыу ҡайҙа, яҡын да юлатмай. Ошонан аҙаҡ уларҙы аңһыҙ, тип әйтеп ҡара инде. Бурысың - шул көсөктәрҙе имеҙеү. Улар һинең менән бер бүлмәлә йәшәйәсәк, асығып, аяҡтарың аҫтында урала башлаһалар, алаһың да имеҙәһең, бары шул ғына...

**(Дауамы бар).**

✓ *Ысынлап та, дидактика - тәрбиәләү, өгөтләү, аңлатыу ҡеүәһе бар мөнәжәттә. Хатта дин ҡыҫырыҡланған һәм тыйылған замандарҙа ла оләсәй-олатайҙар телендә мөнәжәт тирбәлде, йәштәргә өгөт-нәсихәт биреү юлы булып ҡалды.*



*РУХИӘТЕБЕҘ*

# МӨНӘЖӘТ, НӘСИХӘТ, СҮРӘ...

**Сибайға ҡалаһының Балалар ижад йортона барып еткәндә, фестиваль башланғайны. Ниһайәт, мин мөнәжәт ишетәм, башҡарыусыны күрәм. Тыңлайым. Яҡты сәхнәне тағы ла яҡтыртып, Сафуан Лоҡман улы Сәйетғәлин мәшһүр Аҡмулланың "Нәсихәттәр"ен көйләй. Ғәжәп әҫәр ул Аҡмулла мираҫы - уның асылы йөрәктең иң нескә еренә, аҡылдың иң төпкө юлына барып тоташа. Ниндәй бөйөк әҫәре бар башҡорттоң - көн һайын ҡабатлап, эш-гәмәленә һәм холҡ-ҡәлбенә "көсөргәнеш" яһап - "сафландырып" яңыртып торорлоҡ.**

*...Етенсе ҡиммәт нәмә -*
*ихлас, тигән,*
*Ихласыҙҙың эше ҡабул*
*булмаҫ, тигән.*
*Аҡыллылар ошо һүҙҙе белһә кәрәк:*
*Иман, аҡыл, әҙәп,*
*ихлас - юлдаш, тигән.*



Халҡыңа ошонан да ҡәҙерле васыят булыуы мөмкинме һуң? Ҡабул ит, кинән, шөкер ит, халҡым! "Эй, Аллаһым, Мифтахетдин Аҡмулланың рухын шат ҡыл!" Ихлас йөрәктән ошо доға телгә килә. Тамаша залы тулы халыҡ аһәнле көйгә көйләп уҡылған сихри һүҙҙәргә мөкиббән киткән. Күңел тыныслана. Мин Сафуан Сәйетғәлиндә үҙенең тыуған яғы Салауат районында, Салауат йыйындарында гел тыңланым, Ауырғазыла республика "Шәжәрә байрамы"нда ла бик аһәнле сығыш яһаны, шәжәрә төҙөүсе яҡташын ҙурлап-хуплап ҡобайыр әйтеп, ҡурай уйнап оҙатып йөрөнә. Быйыл Сафуанды Мәсетле районында "Халыҡ-ара ҡымыҙ байрамында" ла осраттым. Әле ул ете йөҙ саҡрым Урал буйлап килеп, Сибай сәхнәһендә Аҡмулланы һөйләй...

Сәхнәлә Ишембай ҡалаһынан килгән Рәйлә Абдулла ҡыҙы Ҡалмырҙина сығыш яһай. Минә ул электән таныш. 1934 йылғы, тимәк, быйыл уға 83 тулып үткән. Собханалла, уның тыны ла иркен, тауышы тигеҙ, хәтере яҡшы... Үҙе ижад иткән дүрт мөнәжәтен бер тында тиерлек һөйләп сыҡты. Аҙаҡ "Һалдат бәйетен" әйтеп ҡуйҙы. Ихлас, күтәренке уның ижады. Мөнәжәттән тыш, Рәйлә апай "Нәсихәттәр" ҙә әҙерләгән. Исемдәренән уларҙың йөкмәткеһе лә төҫмөрләнә. Мин баһалама төркөмөнә күҙ һалам: бер кем дә оло йәштәге мөнәжәтсе булдермәй, ихтирам менән тыңлайҙар. Минең иң ҡурҡҡаным шул ине: Алла иҫеме менән сәхнәгә баҫҡан өлкән кешеләребеҙҙе, һүҙенән туҡтатып, уларҙың күңелен рәнйетеп, беҙҙең менән бүлешеп кенә торған иман нурын һүрелтеп ҡуймаһаҡ ине. Рәйлә апайҙың сығышын көслө алҡыштарға күмделәр.

Мин баһалама комиссияһы ағзалары Асия Ғәйнуллина, Мәүлит Ямалетдин, Фәниә Сарбулатова, Светлана Буранбаева, Фәрзәнә Фәтҡуллиналар рәтендә урын алдым. Иң тәүҙә фестивалдең баһалау ҡағыҙҙарына беренсе билдәләрҙе теркәйем. Ҡатнашыусыларҙың исем-шәрифе, тыуған көнө-айы-йылы, тулы адресы, телефоны ла теркәлгән был ҡағыҙға. Улар өс төрлә жанр буйынса сығыш яһай ала: мөнәжәт, нәсихәт, Ҡөрьән сүрәһе. Һәр бер мөнәжәт, нәсихәт, сүрәнең тулы исеме һәм ҡағыҙҙа баҫылған тексы ла баһаламасылар алдына һалына икән. Йә, хуш! Ойоштороу эше йәтеш һәм аныҡ атҡарылған. Артабан тамаша залын тултырып ултырған халыҡҡа күҙ һалам: беренеһән-берейе алсаҡ, ыҫпай кейемле, һылыу ҡатындар, ағинәйҙәр, милләттәштәрем! Собханаллаһ! Быныһы өсөн айырыуса мең шөкер итәм. Төркиәлә уҡып ҡайтҡан бер ҡәйнешемдең, Морат Мусиндың, һүҙе ҡылт итеп иҫкә төшә: "Сәрүәр еңгәй, - тигәйне ул бала, - донъяла беҙҙең башҡорт ҡыҙҙарынан да нурлыраҡ ҡыҙҙар юҡ. Уларҙан бөркөләп торған нур шул хәтле яҡын бит ул. Иң һағынғаным - Һаҡмар һыуы менән башҡорт ҡыҙҙарының нуры булды..."

Фестиваль дауам итә. Белорет районы Шығай ауылы ағинәйҙәренең "Аҡтамыр" төркөмө мөнәжәт әйтә башлағас, залдың түбәләре күтәрелеп киткәндәй булды. "Аҡтамыр"ҙар ғәжәп саф, көслө тауышлы, килеш-килбәттәре - һауала осҡан кейек ҡаҙҙар кеүек... Һүҙҙәре лә асыҡ ишетелә, хәтергә уйыла: тормош ҡуйған кәртәләрҙе үткәндә иң башта Аллаға һәм үҙенә ышан, ярҙам һорап башта Аллаға һәм үҙенә мөрәжәғәт ит, яңылыш аҙымдарың өсөн Алла алдында тәүбә ит - саф, таҙа күңел менән йәшә ерҙә. Шулай тип мөнәжәт әйтә "Аҡтамыр"... Көслө рухлы ағинәйҙәр һүҙе был. Етәкселәре Сәғирә Сабирйән ҡыҙы Ғәлиуллинаға был һигеҙ ауылдашын әйҙәп-ойоштороу артыҡ ҡыйын булмағандыр, сөнки Белорет яғында әүәлдән әүҙем һәм төплө эшләгән фольклор төркөмдәре бар. Мөнәжәтселәр байрамына ла шығайҙар дәррәү килгән, мөнәжәт башҡарыу вәзенен - тәртибен ентекле уйлаған. Берәүҙе әйтә, ҡалғандары күтәреп ала, йөпләп-хуплап ҡуя... Иң илһамлы һәм ышаныслы ҡораҡ икән был "Аҡтамыр", тип баһаланы тыңлаусылар. Ҡөрьән сүрәһен көйләп, баһалама ағзаларын таң ҡалдырған, еңеүсе данын күтәргән Гөлнур Жәлил ҡыҙы Ҡолбирҙина ла Шығай төркөмөнән ине. 1983 йылғы Гөлнур игезе китапҡа аяттарҙы башҡорт халыҡ көйҙәренең бөгөлөш-боролоштары менән үҙенсәлекле итеп биҙәй алды. Туған моң - күңелдәргә иң ипле асҡыс.

Белорет районы Сосновка ауылынан килгән "Ағинәйҙәр" төркөмө ялт итеп торған яңы күлдәктәре, балҡып торған селтәр-яғалары менән күңелле генә барған тамашаны тағы зауыҡландырып ебәрҙе. Етәкселәре Әнүзә Вәйес ҡыҙы Ишбирҙина ҡыҙҙарына башлыса мөнәжәт әйтергә өйрәткән. Мөнәжәттең ҡеүәте - тында, тиҙәр. Тын - йән янында, йәндән сыға. Шуға күрә мөнәжәтсе исемен алыр йәнә бер бәйгесе Сосновканан булып сыҡты: Рима Ҡунаҡбай ҡыҙы Йосопова сыңрау торналай тауышы-тыны менән йөрәктәрҙе арбарлыҡ мөнәжәт әйтте. Уға бик риза, рәхмәтле тамашасы мәрҙәс ҡысҡырып, ҡул сапты. "Ағинәй" төркөмө һаман күҙ алдында: инсафлы, ябай, һөйкөмлө генә ауыл ҡатындары. Урман башҡорттары, тибеҙ уларҙы, инйәр ҡатайҙары, тамъяндар... Шундай төрләләр һәм бик-бик оҡшаштар, сөнки уларҙы мөнәжәт моңо берләштергән: Нәфисә Заһретдинова, Земфира Кәримова, Фәнилә Мусина, Лүзә Сафуанова, Зифа Муллағәлләмова, Венера Сөләймәнова, Гилә Фәтҡуллина...

Ейәнсура яғынан төркөм-төркөм булып килгән мөнәжәтселәр ҙә ҡыуандырҙы. Мөнәжәтте күмәкләп башҡарыу, бер-беренеһә эйәреп әйтеү, яңғыҙ әйтеү, ҡара-ҡаршы әйтеү кеүек алымдарҙы ҡулланды улар. Үҙҙәрен сәхнәлә иркен, яйлы тота, гүйә, сәхрәлә кеүек хис итәләр. "Иҫәнгол ағинәйҙәре" төркөмө һигеҙ кешенән тора, кейемдәре бик күркәм, ихласлыҡтары йөҙҙәренә сыҡҡан оло апайҙар. Уларҙың тыуған осоро - 1940-1946 йылдар, тимәк, Бөйөк Ватан һуғышы ваҡытында донъяға килеп, халҡыбыҙҙың йәнен ялғап, йәшәүгә өмөтөн яңыртып алға алып киткән ҡатмарлы яҙмышлы быуын. "Иҫәнгол ағинәйҙәре"нең башҡорт ҡатындарына хас тыйнаҡлығы ла, тәүәккәллеге лә, аҡылы ла уларҙың тын алышында - мөнәжәт тауышында сағылды. Был төркөмдә ихласлап йөрөп халыҡҡа мөнәжәт өнө таратыусылар бар: Хәмдиә Теләүбирҙина, Ғәлиә Фәйзуллина, Зөлфиә Бикбулатовалар. Бик тә күркәм һәм тәбиғи самаһы тота белгән "Иҫәнгол инәйҙәре"нең күңелдәре күтәренке, кәйефтәре иң юғары нөктәлә, ә йөрәктәре берҙәм.

Ейәнсура районында Үргән тигән һыу буйлап Үргән ауылы ултыра. Бында ҡатын-ҡыҙҙарҙың халыҡсан ижади ойошмаларын етәкләп йөрөүселәрҙән булған Гүзәл Аҡсурина үҙенең ауылдашы Мәрфуға Ҡаһарманова менән бергә "Үргән ауылы мөнәжәте"н башҡарҙы. Үҙенсәлекле генә дуэт барыһына ла оҡшаны. Уларҙың төркөмөнә унлап ағинәй йөрөй. Һәр ҡайныһы инәйоләсәйҙәренән аманат булған шиғрәнә тәрбиә һүҙҙәрен хәтерләп, бер көйгә һалып, Иҫәнголда йыл һайын уҙғарыла торған мөнәжәт кисәләрендә уңышлы сығыш яһайҙар икән.

Ейәнсураларҙың йәнә бер яңылығы: район үҙәгендә эшләгән "Үҫәргән" дини ойошмаһының йәкшәмбе мәктәбенә йөрөгән мөнәжәтселәр төркөмө. Дүрт ҡатын сәхнәгә сығып "Иман шарттары", "Ысын мосолман булам тиһәң" тигән уй-теләктәрҙе алға алып, иманлы һүҙ әйтте. Сафия Хәбибуллина, Гөлнур Түләбаева, Роза Йәрмөхәмәтова, Земфира Нәбиуллиналар ине улар. Тигеҙ, тыныс, итәғәтле яңғыраған һүҙҙәрен мәктәп уҡыусылары ла ишетһә, балалар күңелдәренә ял алыр ине һәм донъяға булған күп һорауҙарына яуап табыр ине, тигән уй башҡа килде. Ысынлап та, дидактика - тәрбиәләү, өгөтләү, аңлатыу ҡеүәһе бар мөнәжәттә. Шуға күрә лә ул башҡорт халыҡ ауыҙ-тел ижадында бик әүәлдән - Урал буйына ислам дине индерелгән дәүерҙән бирле ижад ителә, яратып башҡарыла торған жанр булып йәшәй ул. Аят ашы мәжлестәрендә генә түгел, мәҙрәсә-мәктәп йыйылышында, оло байрамдарҙа ла мөнәжәт Алла һүҙен халыҡҡа еткереү-аңлатыу сараһы булып тора. Хатта дин ҡыҫырыҡланған һәм тыйылған замандарҙа ла оләсәй-олатайҙар телендә мөнәжәт тирбәлде, йәштәргә өгөт-нәсихәт биреү, иман тәрбиәләү юлы булып ҡалды.

Ейәнсура районынан Йылайырға ҡарай сыҡҡан саҡта, Етебыуын үре (Семиколенка) алдынан Хоҙайбәндә тигән бер ауылды үтәһең. Аҡҡондоҙ тип тә әйтәләр. Ана шул ауылдан килгән ике матур ханым сәхнәгә сыҡты ла моңло ғына итеп мөнәжәт әйтә башланы. Люциә Кинйәбулатова 1941 йылғы, ә Минзәлә Сафина 1964 йылғы. Ике быуын, ике моң, бер хис, бер юл... Бөтә Сибай һоҡланып ҡарап ултырҙы.

Йылайыр юлы, тигәс, шул юл өҫтөндәге Ҡашҡар ауылынан килгән "Умырзая" халыҡ ансамбленең сығышы "Әсә бәхете" тигән нәсихәттән башланды. Ҡулдарына ыҡсым тәсбихтәр тотоп сыҡҡандар, сағыу милли кейемдәрен ап-аҡ яулыҡтары тағы ла баҙыҡландырып ебәрә. "Умырзая" - һоҡланғыс төркөм, ҡарап та, тыңлап та туйырлыҡ түгел, тип баһалаусылар ҙа, халыҡ та күҙҙәренә йәштәр тығылып, шатланып тыңлап ултырҙы. Мәүлит Ямалетдин ағай үҙе тәржемә иткән һәр сүрәне яттан белеп, ҡабатлап ултыра (был бит шағир өсөн шундай бәхет, уйлап ҡараһаң!), ә "ҡашҡарҙар" бик ғибрәтле "Исрафил сурын өргәс" сүрәһен һөйләй башлағас, ағайҙың ауыҙы ҡолағына етте: тере тауыш ҡобайырҙы ла, сүрәне лә иҫ киткес итеп үҙгәртә икән - терелтә, балҡыта! Әҙәмдең моңо теләһә ниндәй таш йөрәкте иретеп, туң күңелгә асҡыс таба ала. Төркөмдөң етәксеһе Сөмбөл Көмөшбаева әйтеүенсә, улар мөнәжәт әйтеү оҫталығын күрше Һынташ, Мәҫкүт ауылдарында ғүмер иткән оло быуын инәйҙәрҙә күреп үҫкән...

Мәләүездән килгән Рәйфә Зарипова башҡарған "Рәсүлаллаһ, йәтим бала" мөнәжәте - Көньяҡ Уралда һирәк осрай торған затлы, таныулы әҫәр. Уны ауыҙ-тел ижадын өйрәнгән ғалимдар юғары баһалай. Халыҡ хәтеренән ҡалҡып, Сибай төбәк-ара мөнәжәт фестивалендә сәхнәгә сыҡҡан ҡомартҡылар, уларҙы бөгөн башҡарыусылар һәм яҙып алыусылар табылыуы был мәҙәни сараның мәғәнәһен тағы арттыра түгелме? Фестивалдең йәнә бер маҡсаты һәм бурысы: халыҡ телендә һаҡланып ҡалған боронғо мөнәжәттәрҙе табыу, йыйыу, китап итеп донъяға сығарыу. Шуға күрә, үҙ төбәгендә йәшәгән мөнәжәт ярсығын берәр строфа булһа ла ҡағыҙға теркәп, баһалама етәксеһе Асия Ғәйнуллинаға тапшыра баралар. Күптәре дини шиғырҙарҙы ғилми баҫмаларҙа, календарь биттәрендә, матбуғатта, шиғриәттә, интернетта таба. Шулай уҡ бөгөн дини-донъяуи темаларға уңышлы яҙа алған шағирҙарға мөрәжәғәт итәләр - Зөлфиә Ханнанова, Мәүлит Ямалетдинов, Айһылыу Ғарифуллина ижады мөнәжәт көйөнә һалып башҡарырға бик ҡулай. Үҙҙәре мөнәжәт сығарғандар авторлығын иғлан итә ала. "Авторлы мөнәжәт" маҡтаулы билдәһенә Фатима Һибәтова, Зәһрә Кашапова, Нурия Сәйәхова, Люциә Кинйәбулатова, Минзилә Сафина, Гүзәл Әхмәҙиева, Алмира Йәғәфәрова, Светлана Мәһәҙиева, Ғәлиәбаныу Мөрсәлимова, Мөкәрәмә Мырҙабулатовалар лайыҡ булды.

**(Дауамы 15-се биттә).**

✓ *А бисфенолы тәьҫире һөҙөмтәһендә эсәк дисбактериозы барлыҡҡа килә. Ул бауырҙың һәм йыуан эсәктең хроник шешеүе менән бәйле. Белгестәр пластик ҡаптарҙағы ризыҡ менән туҡланмаҫҡа кәңәш итә.*



*ИНТЕРНЕТТАН*



# ИРТӘН АШАРҒАМЫ, ЮҠМЫ?

■ Аҙыҡ-түлек һауыттары өсөн ҡулланылған пластик составындағы А бисфенолы тәьҫире һөҙөмтәһендә ашҡаҙан-эсәк тракты эшмәкәрлегендә проблемалар башланыуы ихтимал. Был матдәнең хатта әсә ҡарынындағы балаларға ла йоғонтоһо бар. Хәүефле берләшмә ашҡаҙан-эсәк трактындағы "яҡшы" һәм "насар" бактериялар балансын боҙа. Ғалимдар фекеренсә, А бисфенолы тәьҫире һөҙөмтәһендә эсәк дисбактериозы барлыҡҡа килә. Ул бауырҙың һәм йыуан эсәктең хроник шешеүе менән бәйле. Белгестәр пластик ҡаптарҙағы ризыҡ менән туҡланмаҫҡа кәңәш итә. Бигерәк тә ауырлы ҡатын-ҡыҙҙарға һәм балаларға һаҡланырға кәрәк.

■ Бөгөн тик файҙалы ризыҡтар менән туҡланырға тырышыусылар күбәйә. Әммә бының кире яғы ла бар. Дөрөҫ туҡланыу хәүефле булыуы ихтимал, тип иҫкәртә ғалимдар. Туҡланыу буйынса эксперт Патрик Дену, вегетариан диетаһы В12 витамины дефицитына килтереүе бар, ти. Был витамин етешмәһә, сәләмәтлек менән бәйле күңелһеҙлектәр башлана. Мәҫәлән, күреү һәләте түбәнәйә, арыу барлыҡҡа килә, депрессия башлана, хәтер насарая. В12 витаминын организм үҙе етештерә алмай. Ул йомортҡа, ит, балыҡ, һөт аҙыҡтары менән инә. Тағы ла бер бәлә - нервы орторексияһы һағалауы ихтимал. Гел дөрөҫ туҡланырға ынтылыу һөҙөмтәһендә кешелә ризыҡҡа ҡарата ытырғаныу барлыҡҡа килә. Бындай кешеләр үҙҙәре өсөн туҡланыу ҡағиҙәләрен уйлап таба һәм бынан ситкә тайпылмай.

■ Иртәнге аш күптән бәхәс сығанағы булып тора. Иртәнге ашты мотлаҡ ашарға кәрәк, тип раҫлай ине белгестәр быға тиклем. Ә бөгөн улар ябығырға тырышыусыларға иртәнге ашты ашамаҫҡа кәңәш итә. Иртәнге ашты ашамаусылар көнөнә 353 калорияға аҙыраҡ ҡабул итә икән. Лафборо һәм Бедфордшир университеттары ғалимдары үткәргән һынауҙарҙа 11-15 йәшлек 40 ҡыҙ ҡатнашҡан. Улар 3 көн дауамында иртән йә 6,3 грамм ҡоро аҙыҡ ашаған, 188 мл майлы һөт, 375 мл әфлисун һуты эскән, йәки иртән бер нәмә лә ашамаған. Белгестәр уларҙың көн дауамындағы физик әүҙемлеген дә күҙәткән. Һынауҙар күрһәтеүенсә, иртән ашамаған осраҡта ҡыҙҙар төшкө һәм киске ашта калорияларҙы күберәк ҡулланған. Әммә был артыҡ калориялар иҫәбе 115-тән үтмәгән, ә иртәнге ризыҡ 468 калория торған. Тимәк, һөҙөмтәлә ҡыҙҙар иртәнге ашты ашамағанда рационларын 353 калорияға кәметкән.

■ Гетеборг университеты эргәһендәге ғилми үҙәк ғалимдары иҫәпләүенсә, арты йыл дауамында кеше тын ҡыҫылыу менән яфалана икән, йөрәк-ҡан тамырҙары, шулай уҡ тын алыу системаларын тикшерергә кәрәк. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, хроник тын ҡыҫылыуы күҙәтелгән кешеләрҙең 60 процентында йөрәк сирҙәре табыла. Үпкәнең тейешенсә эшләмәүе лә ошо уҡ һөҙөмтәгә килтерә. Был сир стабиль булмаған ҡан баҫымынан да ҡурҡынысыраҡ, ти табиптар. Тын ҡыҫылыуға артыҡ ауырлыҡ та килтереүе ихтимал. Шуға ла сәләмәтлегегеҙҙе лә, тән массаһын да даими тикшереп тороғоҙ. Был һәр йәштә лә мөһим.

*ХАЛЫҠ ДАУАХАНАҺЫ*

# ЭРЕМСЕК ҺЫУЫ



**Эремсек һыуы - эремсек һәм сыр эшләгәндә айырылып сыҡҡан продукт. Оҙайлы ваҡыт хужабикәләр уның ҡиммәтле сифаттары тураһында белмәйенсә, сығарып түгәләр ине. Ә һуңғы йылдарҙа киң ҡулланыла башланы, сөнки ул 93,7 процент һыуҙан тора, ә ҡалған 6,3 процентына бик күп файҙалы матдәләр инә. Тәү сиратта, аҡһым - ул үҙенең алмаштырғыһыҙ аминокислоталары арҡаһында ҡан эшләү һәм бауыр аҡһымы синтезы процесында ҡатнаша. Һөт майҙары яҡшы үҙләштерелә һәм ферменттарҙың эшмәкәрлеген көсәйтә. Ә һөт шәкәре - лактоза - май барлыҡҡа килеүенә ҡаршы тора һәм ашҡаҙан-эсәк тракты эшмәкәрлеген нормалләштерә. Бынан тыш, эремсек һыуы А, С, Е, В төркөмө витаминдарына, холинға, биотинға һәм никотин кислотаһына, кальцийға, магнийға һәм пробиотик бактерияларға бай. Эремсек һыуы организмға нисек йоғонто яһай?**

### Аш эшкәртеү

Эремсек һыуындағы лактоза эсәктәге микрофлораны көйләргә ярҙам итә, газ барлыҡҡа килеүен һәм аҙыҡтың сереү процесын әкренәйтә. Эремсек һыуын оло йәштәге кешеләргә ашар алдынан ҡулланыу тәкдим ителә, сөнки ул тоҙло кислота секрецияһын кәметә.

### Витамин етешмәүе һәм иммунитетты нығытыу

Эремсек һыуы һыуҙа иреүсе витаминдарға бай булғанлыҡтан, ул витаминдарға ихтыяжды тулыландыра һәм хатта еләк-емеш ашауҙы алыштыра. Иммунитетты нығытыу маҡсатында диетологтар һәр көн иртән бер стакан эремсек һыуы эсергә кәңәш итә.

### Артыҡ ауырлыҡҡа ҡаршы

Эремсек һыуындағы В витамины май һәм углевод алышыныуын әүҙемләштерергә ярҙам итә, шуға күрә ул һимереү менән интеккән һәм аҙ хәрәкәтләнгән кешеләр өсөн яҡшы.

### Стресс һәм депрессияға ҡаршы

В төркөмө витаминдары шулай уҡ кешенең хис-тойғоһона ла йоғонто яһай. Ә калий арығанлыҡҡа ҡаршы тора, хәтерҙе яҡшырта, иғтибарҙы туплорға ярҙам итә. Эремсек һыуы стресс гормондары эшләнеүҙе тотҡарлай һәм, киреһенсә, "бәхет гормоны" - серотонин эшләп сығарылыуҙы көсәйтә.

### Косметик сифаттары

Эремсек һыуында булған аҙ молекулалы аҡһым (низкомолекулярный белок) күҙәнәктәрҙең яңырыуына булышлыҡ итә, тире һәм сәс торошона ыңғай йоғонто яһай. Бынан тыш, унда ҡартайыуҙы әкренәйтеүсе антиоксиданттар бар. Хәҙер эремсек һыуы нигеҙендә эшләнгән бик күп косметик саралар осратырға мөмкин.

### Тирене сләмәтләндереү

Көн һайын эремсек һыуын ҡулланып, тирене сәләмәтләндерергә һәм таҙартырға була. Быныӊ өсөн эремсек һыуын һәм ауыл эремсеген тигеҙ күләмдә алып, бер төрлө масса килеп сыҡҡансы болғайбыҙ һәм биткә һөртәбеҙ, 20 минут тотабыҙ. Һуңынан йылы һыу менән йыуабыҙ. Эремсек һыуын боҙ тундырыу формаларына һалып тундырабыҙ һәм һәр көн иртән биткә һөртәбеҙ, таҫтамал менән ҡоротабыҙ. Процедуранан һуң биткә крем һөртәбеҙ.

Йәиһә бер йомортҡаны, бер ҡалаҡ бойҙай онон 2 ҡалаҡ эремсек һыуы менән бергә болғап, килеп сыҡҡан ҡатышманы биткә һөртөп, 15 минут самаһы тотабыҙ һәм һалҡын һыу менән йыуабыҙ. Был битлек таҙартыу сараһы булып тора һәм бит тиреһеҙ унан һуң тын алып ҡаласаҡ.

Бынан тыш, эремсек һыуы организмдан шлактар һәм токсиндар менән бергә артыҡ шыйыҡлыҡты, шулай уҡ "насар" холестеринды сығара. Эремсек һыуы нигеҙендә балалар өсөн ризыҡтар ҙа әҙерләйҙәр, сөнки аҡһым составы буйынса ул әсә һөтөнә яҡын.

Эремсек һыуын ҡала ерендә лә эшләргә мөмкин. Быныӊ өсөн 1 литр пастеризацияланған һөттө ҡайнатырға ҡуйырға һәм ҡайнап сыға башлаһа, уға лимон һуты йәки кефир өҫтәп, тиҙ генә болғарға ла, уттан алырға кәрәк. Һөт эремсекккә һәм эремсек һыуына айырыла. Йәки һөттө йылы урынға ҡуйып әсетергә, ул сей ҡатыҡҡа әйләнгәс, утҡа ҡуйып ҡайнатырға кәрәк. Ҡатыҡ эрей башлаһа, утты һүндереп, массаны һыуытырға һәм һарҡытып алырға.

Барлыҡҡа килгән продукттан сәләмәтлек һәм матурлыҡ коктейле әҙерләргә мөмкин. 250 гр эремсек һыуын алып, уға 100 г теләһә ниндәй иҙелгән еләк, 1 ҡалаҡ лимон һуты, 1 ҡалаҡ шәкәр, тәм буйынса дәрсен (корица) ҡушып барыһын бергә блендерҙа болғарға. Балалар өсөн эремсек һыуынан желе файҙалы. 2 стакан эремсек һыуын 70-80 градусҡа тиклем йылытырға, ярты ҡалаҡ желатинды ебетеп ҡушырға, еләк, сироп йәки ҡайнатма, шәкәрҙе кәрәгенсә тәм буйынса өҫтәргә. Ҡатышманы формаларға ҡойоп, һыуытҡысҡа ҡуйып ҡатырып алырға кәрәк.

*СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ*

# АҒЗАЛАР ӨСӨН...

## тештәр ҙә яуаплы



Һәр теш, ысынлап та, тәндәге теге йәки был ағза менән бәйле. Тештәр боҙола икән, тимәк, ағзаларҙа ниндәйҙер проблема бар. Хатта әһәмиәтһеҙ тойолған проблема ла беренсе сигнал булып тора. Эксперттар фекеренсә, аҫҡы һәм өҫкө тештәрегеҙ (беренсе һәм икенсе) бөйөрҙөң һәм бәүел ҡыуығының нормаль торошон тәьмин итә. Ҡаҙыҡ тештәр бауыр һәм үт ҡыуығы өсөн яуаплы. Кесе аҙау тештәр үпкәләрегеҙ, йыуан эсәгегеҙҙең торошон күрһәтә, ҙур аҙау тештәр - үт ҡыуығы, талаҡ һәм ашҡаҙан аҫты бизе, ә аҡыл тештәре - йөрәк һәм эсәктәрҙең торошон күрһәтә.

Әммә һәр үлемгә тештәрҙең зарарланыуы сәбәп булып тормай. Шулай ҙа, ике аралағы бәйләнеш тураһында белеү мөһим, сөнки был белем ниндәй ағзағыҙ ауыртҡаның асыҡларға ярҙам итер. Теш менән эске ағзалар араһындағы бәйлелек бик көслө һәм ҡайһы бер ваҡытта баш ауыртыуы булып сағылыш таба. Беренсе һәм икенсе ҡырҡҡыс тештәр ауыртыуы һеҙҙә хроник пиелонефрит (бәүел юлдарының өҫкө өлөшөндә инфекция), цистит (бәүел ҡыуығының бактериаль инфекцияһы) йәки урта отит (ҡолаҡ инфекцияһы) булыуына ишара. Беренсе ҡырҡҡыс теш тонзиллит, остеохондроз билдәһе була, сөнки холецистит йәки гепатит булғанда һеҙ был өлкәлә даими тупаҫ ауыртыу тоясаҡһығыҙ. Дүртенсе һәм бишенсе аҙау тештәрҙәге ауыртыу колит, хроник пневмония йәки ниндәйҙер аллергик реакция формаһы (астма) булыуы мөмкин. Әгәр аҫҡы һәм өҫкө өсөнсө аҙау тештәрҙә ауыртыу тойһағыҙ, моғайын, тубыҡ быуындарығыҙ, ҡулбаш менән проблемаларығыҙ барҙыр йәки һеҙ артритҡа бәйле ялҡынһыныу йәки эсәктәрегеҙгә бәйле сирҙәр менән яфаланыуығыҙ мөмкин. Өҫкө алтынсы һәм етенсе тештәр, гәҙәттә, гастрит, сей яра, панкреатит, анемия йәки бөйөн эсәгенең сей яраһы билдәһе. Әгәр аҫҡы аҙау тешегеҙ ауыртһа, тимәк, артерияларығыҙ менән проблемалар бар йәки артериосклероздан яфаланаһығыҙ. Күпселек эксперттар шулай уҡ аҫҡы етенсе тештең ауыртыуын үпкәләрҙә (курылдай, астма, ялҡынһыныу) йәки эсәктәрҙә полип булыуы менән бәйләй.

Шуны ла иҫегеҙҙә тотоғоҙ: аҙау тештәр, гәҙәттә, йөрәк ауырыуҙары һәм тыумыштан килгән сирҙәр менән бәйле, ә шул уҡ ваҡытта ашҡаҙан сей яраһы һәм эндокрин системаһы проблемалары менән бәйле. Әммә яҙылғандарҙан сығып ҡына һығымта яһарға һәм үҙаллы дауаланырға ашыҡмағыҙ. Иң яҡшыһы - дантистҡа мөрәжәғәт итегеҙ, ә инде артабан дауаланыу кәрәкһә, табипҡа күренегеҙ.

*✓ 500 метр ара үтергә кәрәк, артабан метро киңлегендәге 65 - 70 метр оҙонлоғондағы тоннель башлана. Иң ҡыҙығы шул: уның ер аҫтындағы тоннеленең оҙонлоғо яҡынса 20 саҡрымға етә тип фаразлана.*

ТӘБИҒӘТ МӨҒЖИЗӘЛӘРЕ

**Башҡортостан - мәмерйәләргә бай төбәк. Әммә республикалағы һыу аҫты мәмерйәләренең 70-80 проценты әле тикшерелмәгән. Был мәғлүмәтте ошо көндәрҙә баш ҡаланың "Башинформ" мәғлүмәт агентлығында үткән матбуғат конференцияһында Екатеринбург ҡалаһынан килгән һыусумар (тәрән һыуға һәм мәмерйә күлдәренә махсус ҡорамалдар менән сумыу һөнәренә өйрәтеүсе инструкторҙы башҡортсалап ошо атама менән атап торорға булдыҡ), Рус география йәмғиәтенең Свердловск өлкәһе бүлексәһе ағзаһы Евгений Рунков ауыҙынан ишеттек. Ошо осрашыуҙан һуң 10 һыусумарҙан (дайверҙан) торған команда Йомағужа һыуһаҡлағысының урта тирәһендә урынлашҡан Һаҡаҫҡы һыу аҫты мәмерйәһен фәнни нигеҙҙә өйрәнеүгә арналған ҡатмарлы экспедицияға юлланды.**

# ЙОМАҒУЖА - ҺЫУ ҺАҠЛАЙ,

## уның һыуы ни һаҡлай?





Билдәле булыуынса, мәмерйәләр ике төрлө була: ер өҫтөндәге һәм һыу аҫтындағы мәмерйәләр. Һаҡаҫҡы борондан һыу аҫты мәмерйәһе булған. Тик Йомағужа һауһаҡлағысы төҙөлгәс, уның ауыҙы һыу аҫтында ҡала. Шуға дайверҙарға 21 метр тәрәнлектән һуң уның ауыҙына тиклем 500 метр ара үтергә кәрәк, артабан метро киңлегендәге 65 - 70 метр оҙонлоғондағы тоннель башлана. Иң ҡыҙығы шул: уның ер аҫтындағы тоннеленең оҙонлоғо яҡынса 20 саҡрымға етә тип фаразлана. Белгестәр мәмерйә ауыҙына махсус составлы химик шыйыҡса ағыҙып, ул шыйыҡсаны икенсе мәмерйәнән - Ҡотоҡ-Сумғандан ағып сыҡҡан һыу составында тапҡан. Ике мәмерйәнең бергә тоташҡан булыуы үрҙә әйтелгән 20 саҡрым тураһында һүҙ алып барырға нигеҙ булып тора ла инде. Был фаразды дәлилләп ҡуйыу - экспедицияның төп маҡсаттарының береһе.

Тағы бер маҡсат - ошо матур ҙа, серле лә, уңайлы ла урынға дайвер-туристарҙың иғтибарын йәлеп итеү. Әйткәндәй, был мәмерйә дайверҙарға шуныһы менән уңайлы: ул, бер дайвер әйтмешләй, "метро тоннеле һымаҡ иркен". Әгәр фараз дәлилләнһә, Һаҡаҫҡы Рәсәйҙәге иң оҙон һыу аҫты мәмерйәһе исемен аласаҡ. Белгестәр әйтеүенсә, әле Һаҡаҫҡының 400 -500 метр самаһы өлөшө генә өйрәнелгән, ошо арауыҡҡа, стеналарға бер нисә йыл элек үткәрелгән сумыуҙар ваҡытында арҡан беркетелгән булған. Тик быйылғы ташҡында ул арҡан өҙөлөнеп бөткән. Шуға, экспедицияның тәүге көнөндә һыусумарҙар арҡандарҙы яңыртыу менән шөғөлләнгән. Был юлы экспедицияла ҡатнашыусылар элекке араны уҙған, тик 20 саҡрым араны үтеп өлгөрмәгән әле. "Был - йәйләп, тағы ла әҙерләнеп атҡарыла торған эш", - ти Евгений Рунков.

Беҙгә тағы ла шул мәғлүм булды: белгестәр был экспедицияға үҙҙәренең ҡорамалдары менән килгән. Һәр дайвер был экспедицияға "бер сит ил автомобиленә торошло" аҡса түккән, тиелде. Йәғни, Евгений Рунков та, Максим Четырин да, Александр Хижняк та, Илья Козлов та, Станислав Поляков та - энтузиастар. Ә ул энтузиазмдың нигеҙен ниндәй уй-теләк тәшкил итеүен әйтеүе ҡыйын, был, бәлки, мөһим дә түгелдер. Һыу аҫты донъяһын үҙ күҙебеҙ менән күргән кешеләр булмағас, дайверҙарҙы нимә ылыҡтырыуын күҙ алдына килтерә алмайбыҙҙыр, моғайын. Уларға һоҡланырға ғына ҡала.

Тағы бер фактты күҙ уңынан ысҡындырмайыҡ: билдәләнеүенсә, был экспедицияны ойоштороусылар уның республикала экстремаль туризмды үҫтерергә булышлыҡ итәсәгенә оло өмөттәр бағлай. Төп ойоштороусы, Евгений Рунковты был экспедицияға саҡырыусы Салауат Таһир улы Нафиҡов әйтеүенсә, әгәр белгестәр мәмерйәнең Рәсәйҙәге иң оҙон һыу аҫты мәмерйәһе икәнен раҫлаһа, был урынға донъяның төрлө тарафтарынан һөнәрмән һәм һәүәҫкәр һыусумарҙар ағылыуы мөмкин. "Республика бюджеты элек-электән башлыса нефть табыу һәм эшкәртеү сәнәғәтенән генә тупланды, бөгөн етәкселек туризмды үҫтереүгә йөҙ бора икән, тимәк, был өлкә лә республикаға килем килтерә ала икәнен аңлау бар", - тине Салауат Нафиҡов.

Ҡотҡарыусы, һыу аҫты мәмерйәләренә төшөүсе Александр Хижняк әйтеүенсә, Башҡортостан СССР заманынан уҡ үҙенең Ағиҙелдә һалда йөҙөү маршруты менән бөтә илгә билдәле булған. Санкт-Петербургтан килгән ҡунаҡ Илья Козлов үҙ сығышында Карелиялағы мәрмәр ятҡылығы, сервистың яҡшы ойошторолоуы арҡаһында, "туристар автобустары тығыны"на, Карелияның йөҙәк ҡашына әйләнгәйне, тип билдәләне. Ә Йомағужа һыуһаҡлағысында күптән инде бынамын тигән сервис ойошторолған, йәғни, уңдағы юлдар, туристар өсөн йорттар, төрлө социаль учреждениелар туристарҙы үҙенә йәлеп итә ала. Шуға ла республика Хөкүмәте лә был тармаҡты үҫтереүгә ныҡлап тотонорға уйлай. Журналистар менән матбуғат конференцияһы алдынан белгестәрҙе республика Башлығы Рөстәм Хәмитов ҡабул итеүе лә ошоға ишара.

Әйткәндәй, был экспедицияны ойоштороуға тыумышы менән Әбйәлил районының Ташбулат ауылынан булған Салауат Таһир улы Нафиҡов күп көс һалған, тигәйнек инде. Тағы бер һүҙ өҫтәйек әле. Ул ошо идеяһы байрағы аҫтына республиканың Эшҡыуарлыҡ һәм туризм буйынса дәүләт комитетын, Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығын, Рус географик йәмғиәтенең төбәк бүлексәһен һәм һыу аҫты мәмерйәләрен өйрәнеүселәрҙе, шулай уҡ эшҡыуар-бағымсы Марс Хәбибулла улы Юлбарисовты берләштерә алған һәм, һис шикһеҙ, уның был эшмәкәрлеге, энтузиазмы айырым баһалауға лайыҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**БР Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, һыусумарҙар экспедицияның төп маҡсаттарының береһенә өлгәшкән: мәмерйәнең оҙонлоғо 20 километр икәнен раҫлағандар. Белгестәр махсус химик шыйыҡсаны Һаҡаҫҡынан ағыҙып ебәргән һәм ул шыйыҡса Ҡотоҡ-Сумғандан ағып сыҡҡан. Тимәк, уларҙың үҙ-ара тоташҡан булыуы раҫлана. Киләсәктә иһә был юл аша кешенең үтеп инә алыу-алмауын белергә кәрәк. Әлеге мәлдә дайверҙар мәмерйәнең 800 метрын тикшергән, башҡа туристар өсөн үтеү уңайлы булһын өсөн маршрут һалынған, өйрәнелгән майҙандың ентекле картаһы төҙөлгән. Ете ҡатлы йорт ҙурлығындағы төбө ҡырсынташтан торған залда үтә күренмәле, бәләкәй генә ҡысалалар йәшәүен күргәндәр. Уларҙың бер нисәүһен тотоп алып, лабораторияға тикшереүгә ебәргәндәр. "Беҙҙең быға тиклем ҡысалаларҙың бындай төрөн күргәнебеҙ юҡ ине", - тиҙәр дайверҙар. Улар был экспедиция мәлендә Һаҡаҫҡының асылмаған серҙәре бихисап булыуына инанған.**

Илгиз ИШБУЛАТОВ.

УҢЫШ ҠАҘАН



# ЕҢЕЛ ЙӘШӘ!

"Кешеләргә хеҙмәт итеү" тигәндә, күҙ алдына ҡоллоҡ йәки үҙеңде ҡорбан итеү килеп баҫа. Әммә улай түгел. Был бары тик үҙеңдә булғанды башҡаларға биреүҙән ҡыуаныс һәм бәхет табыу ул. Уҡытыусы булып та, дауаханала эшләп тә "кешеләргә хеҙмәт итергә" мөмкин. Матур гөлләмәләр һатырға ла, йылмайып торбалар ремонтларға ла була. Эш вазифала түгел, ә эске философиябыҙҙа. Йәмғиәттә бик йыш карьера үҫеше докторлыҡ, кандидатлыҡ дәрәжәһе менән билдәләнә һәм беҙ даими рәүештә асылды күҙ уңынан ысҡындырабыҙ. Эш титулдарҙа түгел, ә кешеләр менән бәйләнештә. Әйтәйек, һеҙ мәктәптең баскетбол командаһының тренеры икән, ти. Баскетболды яратаһығыҙ һәм был бик яҡшы, әммә эшегеҙҙә баскетболдың төп урында түгеллеген аңлап ҡына балалар өсөн нимәлер эшләй алаһығыҙ. Һеҙ: "Баскетбол тренерына 12 йәшлек балаларҙың тормошон үҙгәртеү мөмкин түгел", - тиерһегеҙ. Дөрөҫ түгел! Бәғзеләр үҙгәртә, сөнки улар балаларҙы тормошҡа өйрәтеүен аңлай, ә баскетбол - ул аралашыу өсөн мөмкинлек кенә. Шуға ҡарамаҫтан, бик йыш уҡытыусылар: "Мин нимә эшләй алам инде? Алгебраны улар бар тип тә белмәй", - ти. Әгәр һин мәктәптә уҡытыусы икәнһең, төп маҡсатың алгебра түгел, ә балалар. Әгәр банк хеҙмәткәре икәнһең, тормош миссияң баланс отчеты түгел, ә кешеләр.

### Бәхет эштәме?

Огайо штатының Дейтон ҡалаһындағы китап магазины яҡшы китаптар һатып ҡына ҡалмай, аҙна һайын джаз коллективтарының концертын ойоштора. Магазинда даими рәүештә шиғриәт кисәләре үткәрелә, балыҡ тотоусылар түңәрәге һәм лекторий эшләй. Ял көндәрендә һатып алыусылар үҙҙәренең йорт хайуандары өсөн кисәләр уҙғара. Эш беҙ нимә менән шөғөлләнеүҙә түгел, ә эшебеҙгә ниндәй мөнәсәбәттә булыуыбыҙҙа. Башҡалар нимә эшләй, шуны ғына ла эшләргә була, фантазияңды эшкә егеп, үҙенсәлекле булырға ла мөмкин. Һәм бында китап һатаһығыҙмы, караптар төҙөйһөгөҙмө, балалар баҡсаһында тәрбиәсе булып эшләйһегеҙме - мөһим түгел. Ҡыҫҡаһы, бәхет эштә түгел, ә уны башҡарырға кәрәк булған өсөн көс һалмайһығыҙ, күңелегеҙ шулай теләгән өсөн тырышаһығыҙ.

Әгәр ул байыу һәм данланыу мөмкинлеге икән, нимә эшләһәм дә барыбер!

Санскритта "тормош маҡсаты" "дхарма" һүҙе менән билдәләнә. Дхарма ҡануны буйынса, һәр беребеҙ ниндәйҙер үҙенсәлекле һәләткә эйә, ә был ергә уны асыу өсөн ебәрелгәнбеҙ. Ошо талантарҙы тормошҡа ашырып, бәхет табабыҙ. Шул уҡ ҡанун әйтеүенсә, үҙеңә: "Мин донъянан нимә алам?"- тип түгел, ә "Мин донъяға нимә бирә алам?" тигән һорау биреп, талантыңды тиҙерәк асырға мөмкин. Билл Гейтс - планеталағы иң бай кешеләрҙең береһе ине. Уның сығыштарын тыңлап, шуны аңлайһың - уны аҡсаға ҡарағанда компьютерҙар ныҡыраҡ ҡыҙыҡһындыра. Элвис Пресли карьераһы башында байыуҙы түгел, ә яҡшы пластинкалар яҙҙырыу маҡсатын ҡуя. Байлыҡ - маҡсат түгел, ә эшмәкәрлегебеҙҙең өҫтәмә продукты ғына. Данға килгәндә, ул күпселек данлыҡлы кешеләргә төрлө уңайһыҙлыҡтар һәм күңелһеҙлектәрҙән башҡа бер нәмә лә килтермәй. Урамда бер өйөр кеше көтөп торһа йәки фотографтар һәр аҙымығыҙҙы ҡарауыллаһа, рәхәт булырмы?

**Эндрю МЭТЬЮЗ.**
**(Дауамы бар).**

*РУХИӘТЕБЕҘ*

# МӨНӘЖӘТ, НӘСИХӘТ, СҮРӘ...




**(Башы 11-се биттә).**

Шул уҡ Мәләүез яғынан Ләйсән Вәлиева (1981) "Әсә һүҙе" тигән мөнәжәт әйтте. Уның тексына ҡарап, баһалаусылар нәсихәт тип билдәләне. Ләйсән үҙенең йәшлек дәрте, тырышлығы менән иҫтә ҡалырлыҡ оҫта сығыш яһаны, бәйге еңеүселәренең береһе булды.

Нәсихәт жанрында сығыш яһаған Гөлсәсәк Йәғәфәрова Күгәрсен районы Түләбай ауылыныҡы, ул "Намаҙ" тигән әҫәрҙе һөйләне, Ҡөрьән сүрәһен уҡыны. Уның яҡташы, Ҡадир ауылынан Зәкиә Ҡолонбаеваның "Сабыр ит" мөнәжәтенән һуң сүрәләр уҡыуы бөтә кешене хайран ҡалдырҙы - бына кемдә ул моң, үҙенсәлекле тембр. Ирекле талғынлығы тап мөнәжәт һәм сүрәләр уҡыу өсөн бирелгән тиерһең... Фестивалдә иң бай тауыштарҙың береһе булып хәтерҙә ҡалды. Башҡорт теленең яғымлы боролоштары, һүҙбәйләнештәре һәм һөйләү вәзене ошондай кисәләрҙә тыныс, тулы ҡанлы йылға һымаҡ, мәғрур тауҙар һәм киң далалар кеүек иркен һәм бәхетле яңғырай. Зәкиә Ҡолонбаеваны бөтә Ер шары халҡы һөйөнөп тыңлар ине.

Күгәрсен районы Үрге Һаҙ ауылында оҙаҡ йылдар килен булып йәшәгән Зәйтүнә Түләбаева хәҙер тыуған яғы Ейәнсурала тора, шулай ҙа ул элек йәшәгән яғы исеменән сәхнәгә сыҡты. "Гөлниса исемле инәйҙән отоп алған боронғо мөнәжәтте әйтәм", тип олпат һәм ипле генә башлап китте ул сығышын, һәм бөтә зал тын да алмай уны тыңланы. Мөнәжәт халыҡ аҡылын, Аллаға һығыныуын, ул биргән аҫыл бүләккә - йәшәүгә бөтмәҫ хөрмәтен, ижтиһатын сағылдырҙы. Зәйтүнә апай мөнәжәтселәр араһында еңеүсе данын алды.

Ниһайәт, Әбйәлил районы халыҡ ижады оҫталары сәхнәгә менде. Сибай мөнәжәт фестиваленә әбйәлилдәр бернисә төркөм менән "эркелешеп" килгәндәр. Шулай итмәй ни! Ауыл һайын сәсәнһүҙ оҫтаһы бар, республикала билдәле ярыштарҙа әйтешкә сығыусылар, ҡобайыр әйтеүселәр Оло Ҡыҙыл, Әбйәлил Ирәндек, Ҡырҡты тау буйҙарында, Яҡтыгүл яҡтарында йәшәй. Был юлы ла һынатыш юҡ, тине әбйәлилдәр. Фестиваль башында уҡ Ташбулат ауылының "Гөлнәзирә" фольклор ансамбле мөнәжәттәре менән байрамса итеп асып ебәргәйне, артабанғы сығыштарға ла уларҙан сая дәрт-сәм сарпыуы һирпелде. "Гөлнәзирә" (етәксеһе Рәйлә Ирназарова) нәсихәттәр буйынса еңеүсе булып сыҡты, баһалаусылар бер тауыштан уларҙың эске ярһыу-хис менән нәсихәт әйтеүен яҡшы үрнәк тип билдәләне. Шулай уҡ Рысҡужанан Зөһрә Мәһәҙиева менән Ҡырҙастан Фәнүзә Биктимероваларҙың сығышында мөнәжәт әйтеүсенең рухи донъяһы асыҡ күренде, тарих сыңы ишетелде, ҡырыҫ һәм гүзәл Урал тәбиғәте күҙ алдына килде, тип билдәләне баһалама комиссияһы ағзалары.

Рысҡужа ауылының "Ҡыҙылым" мөнәжәт төркөмө профессиональ кимәлдә яҡшы ҡуйылған тауыштар менән үҙҙәренең сығышын "эйәреп йырлау" рәүешендә тәҡдим итте. Төркөм етәксеһе Зөһрә Мәһәҙиева, үҙе йырсы булараҡ, саф юғары тауышы менән көйҙө, күктең әллә нисәнсе ҡатынан тартып төшөргәндәй, илһамланып йырланы. "Рәхмәт" мөнәжәте - Мөжәүир хәҙрәттең һабаҡташы Ханнан хәҙрәттән отоп алынған һәм Әбйәлил яғында таралған рухи ҡомартҡы. Артабан Ҡөрьәндән "Әль-Баҡара" сүрәһен дә ифрат үҙенсәлекле аһәң менән башҡарҙы субандар (йәғни рысҡужалар). Ауылдың тынғыһыҙ һүҙ оҫталарының береһе Фатима Һибәтова үҙе ижад иткән мөнәжәттәрен әйтеп, еңеүсе исемен алды. "Беҙҙең ҡораҡ - "Ҡыҙылым" төркөмө - серләшеп, аралашып йәшәгән бер быуын, бер төбәк ҡатындары әле бөтә Рәсәй халҡын иманға саҡырып мөнәжәт әйтергә әҙерләнәбеҙ", тине улар. Булыр ул субандарҙан, "япондар", тип юҡҡа әйтмәйҙәр ул рысҡужа тоҡомон.

Иҫке Сибай ҡасабаһынан "Яҙгөл" төркөмө хаҡында айырым һүҙ әйтеү кәрәк. Етәксеһе Гүзәл Янбаева "Ураҙа" мөнәжәтен, "Ҡәҙер кисе" сүрәһен бик ентекләп, еренә еткереп өйрәткән, тине баһалаусылар һәм уларҙы һәр мәктәпкә, һәр кисәгә саҡырып халыҡҡа ишеттереү кәрәк ине, тип хыял тартып ҡуйҙылар. Башҡорт халҡында әүәлдән мөнәжәт дини дәрес, мәжлес, яу-сәфәр һуңында башҡарылған, был жанрҙа тупланған йәшәү фәлсәфәһе, аҡыл һәм рух көсө халыҡҡа көйлө һүҙ - туған тел өнө ярҙамында һеңдерелгән. Әлбиттә, заманы етһә, мөнәжәтте мәктәптәрҙә өйрәнеү ҙә һис яҙыҡ булмаҫ ине.

Мөнәжәт - тын ҡеүәте, тинек. Ысынлап та, кешенең бөтә шәхсәнлеген, илаһи дәрт-дарманын аса ул. Йылайыр районы төркөмөн етәкләгән Хафиза Амантаева фестивалгә иң яуаплы әҙерләнгән кешеләрҙең береһе булып сыҡты. Күрһәтмә буйынса йылайырҙар һәр жанрҙы тулыһынса башҡарҙы. "Алланан ҡурҡығыҙ" мөнәжәте, Дилә Булгакова ижадынан "Беренсе бир сәләмеңде" нәсихәте, Мәүлит Ямалетдин тәржемәһенән "Ғәйбәтсе" сүрәһе - барыһын да Юлдыбай ауылынан Фатима Айыҡолова бик асыҡ һәм тыныс тонда башҡарып сыҡты. Яманһаҙҙан Гөлнур Йәнсуринаның сығышы баштан уҡ иғтибарҙы яуланы һәм ул иң оҫта сүрә уҡыусылар исемлегенә теркәлде: уның башҡарыуында "Фатиха" мөнәжәте, "Ололанма" нәсихәте, "Бүлмәләр" сүрәһенең 10-сы, 11-се аяттары тыңланды... Дөрөҫөн әйтергә кәрәк, был темаларҙан ситтә йөрөгән кешегә башта мөнәжәт һайлаусыларҙың етдилеге сәйер тойола, ләкин ошо етдилек һәм олпатлылыҡ - тормошҡа, яҙмышҡа ҡарата ла яуаплылыҡ тәрбиәләй, күрәһең. Матрайҙан Гөлсирә Сәйетованы иғлан иткәндә бындай сығыштарҙың тәрбиә көсө, кешенең холҡонфиғелен иман кәртәһенә индереү ҡөҙрәте ныҡ һиҙелде: "Теләйек изге теләк" мөнәжәте, "Ямандарҙан йыраҡ бул" нәсихәте, "Бүлмәләр" сүрәһенең 13-сө аяты..."

Сибай ҡалаһы мәҙәни донъяһының йөҙөк ҡашы, данлыҡлы "Миләш" халыҡ вокаль ансамбле сығышын телгә алмай булмай. "Бисмилла" мөнәжәте, "Йә, рәсүлем!" нәсихәте был шишмә тауышлы уникаль төркөмдө нәсихәт уҡыу номинацияһы буйынса еңеүселәр рәтенә сығарҙы.

Бөрйән районы Мәһәҙи ауылы ағинәйе Нурия Сәйәхова һикһән йәше менән бара. Уның һәр саҡ алсаҡ һәм теремек булыуы, моғайын, гел генә мөнәжәт әйтеп, йыр көйләп йөрөүенәндер. Сибай сәхнәһенә лә ул балҡып көлөп килеп сыҡты. "Рәхмәтлемен был тормошҡа", тип үҙ мөнәжәтен ишеттерҙе, "Йәштәргә теләк" тип йәнә үҙ ижадын теҙҙе. Телдән төшмәгән мәшһүр "Фәләк" һәм "Нәәс" сүрәләрен халыҡсан итеп көйләп уҡып, бар кешене кинәндерҙе. Ни әйтәһең инде, ошондай йәншишмәнән уртлаған ағинәйҙәр булғанда беҙҙең ауылдарҙа тел дә, йыр ҙа, иман да йәшәр әле. Бөрйән яғында, ғөмүмән, ғәжәйеп кешеләр йыш осрай. Ғәжәйеплеге - уларҙың серле һәм тәүәккәл булыуы. Байназар ауылынан Фәнүзә Аҙанғолованың "Эй, башҡортом, ҡайт иманға, юғиһә, бик һуң булыр!.." тип киҫәтеүе, "Туған телде ҙурламаҕас, заман беҙҙе хурлаймы?" тип төрттөрөүе, Хоҙайҙан халҡыбыҙға ярҙам-аҡыл һорап "Фатиха" сүрәһе менән һүҙ ослауы - үҙе бер тамаша, тормош һабағы дәресе булды. Әбделмәмбәт ауылынан Һәҙиә Фәтҡуллина үҙ ижадына таянып, "Халыҡҡа өндәшеү" мөнәжәтен, "Мөрәжәғәтнамә" нәсихәтен әйтте, "Фәләк" сүрәһен уҡып тамамлап ҡуйҙы. Бөрйәндәрҙең сығышында ҡәтғилек тә, әрнеү ҙә, борсолоу ҙа ярылып ята ине. Төбәк-төбәк башҡорт ерҙәре шулай үҙенсә тауыш бирҙе, ахыры.

Төбәктәр араһында әбйәлилдәр Гран-приға лайыҡ булды, ә бүләген фестивалдең бағыусыһы - Өфөләге "Башбланкиздат" нәшриәте директоры Гөлсәсәк Әлибаева ебәргән, тинеләр. Беренсе урынды Белорет мөнәжәтселәре, икенсе урынды Ейәнсура менән Йылайыр районы вәкилдәре, өсөнсө урынды Күгәрсен, Сибай, Бөрйән районы нәсихәт һөйләү оҫталары яуланы. Салауат районынан килгән "Етегән" төркөмө шулай уҡ оҫта нәсихәтселәр исемен алды.

Сибай халҡы көҙгө сөмбәлә мәлендә тын ҡалып йәнә бер ҡат мөнәжәт, нәсихәт, сүрәләр моңон тыңланы. Фестивалде ойоштороуҙа ҡаланың "Ете ҡыҙ" студияһы, "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы, ҡала хакимиәтенең мәҙәниәт идаралығы (етәксеһе Эльза Дәүләтшина), Балалар ижад йорто коллективы ҙур тырышлыҡ күрһәткән. Тағы ла нығыраҡ танышып, дуҫлашып, фекерҙәр төйнәп ҡайтты изге иман эстәүселәр - башҡорт халыҡ ауыҙ-тел ижадында меңәр йылдар яңғыраған, моңло-йырлы башҡорт халҡына ғына хас булған мөнәжәт, нәсихәт, көйләп сүрә уҡыу йолаларын тергеҙеүселәр. Мөнәжәтселәрҙе киләсәктә матур эстәлеге, оло маҡсаты, үҙ форматы-тәртибе булған ирекле һәм рухлы йыйындар көтһөн.

**Сәрүәр СУРИНА.**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1439 һижри йыл.*

| Октябрь (Сәфәр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 23 (3) дүшәмбе | 6:33 | 8:03 | 13:30 | 16:27 | 17:57 | 19:27 |
| 24 (4) шишәмбе | 6:35 | 8:05 | 13:30 | 16:25 | 17:55 | 19:25 |
| 25 (5) шаршамбы | 6:37 | 8:07 | 13:30 | 16:22 | 17:52 | 19:22 |
| 26 (6) кесе йома | 6:39 | 8:09 | 13:30 | 16:20 | 17:50 | 19:20 |
| 27 (7) йома | 6:41 | 8:11 | 13:30 | 16:18 | 17:48 | 19:18 |
| 28 (8) шәмбе | 6:43 | 8:13 | 13:30 | 16:16 | 17:46 | 19:16 |
| 28 (9) йәкшәмбе | 6:45 | 8:15 | 13:30 | 16:14 | 17:44 | 19:14 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

## СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# "ҠУРАЙСЫ" ҺОҠЛАНДЫРА

**Санкт-Петербург һәм Ленинград өлкәһе башҡорттары конгресы (ҡоролтайы) булышлығында Төньяҡ баш ҡалала Роберт Юлдашевтың һәм "Ҡурайсы" төркөмөнөң тәүгә концерты үтте.**



Ҡурайсылар конкурсы еңеүсеһе һәм "Russian World Music Awards-2016" премияһын яулаусы "Ҡурайсы" төркөмө тулы зал йыйҙы. Музыканттар ҡунаҡтарҙы башҡорт халыҡ һәм рус көйҙәрен, сит ил эстрадаһы музыкаһын башҡарып ҡыуандырҙы. "Донъяла танылыу яулаған башҡорт музыка коллективтарының береһен тыңларға һәм күрергә бик күп тамашасы килде, - тип хәбәр итте Эльвира Моталова. - Роберт Юлдашев һәм "Ҡурайсы" төркөмө иҫ киткес энергетика һәм драйв, күңелгә үтеп инерҙәй музыка, үҙҙәренең ихласлығы менән тыңлаусыларҙын йөрәген яулап алды. Кисә аҙағында бөтә ҡунаҡтар ҙа бейергә төшөп китте".

Концерт һуңында Санкт-Петербург һәм Ленинград өлкәһе башҡорттары конгресы (ҡоролтайы) рәйесе Шамил Моталов Санкт-Петербургта һәм Ленинград өлкәһендә башҡорт мәҙәниәтен популярлаштырғандары өсөн артистарға иҫтәлекле бүләктәр һәм рәхмәт хаттары тапшырҙы.

# ЛАЙЫҠЛЫ БҮЛӘК

**Сибай сәнғәт колледжы ҡарамағындағы "Урал батыр" сәсәндәр мәктәбе етәксеһе Асия Ғәйнуллина "Традицион халыҡ мәҙәниәте" номинацияһында Рәсәй Федерацияһының "Рәсәй күңеле" премияһына лайыҡ булды.**

100 мең һум күләмендәге премия үҙешмәкәр коллективтарҙың етәкселәренә һәм солистарына, эпос башҡарыусыларға һәм халыҡ биҙәү-ҡулланма сәнғәте оҫталарына халыҡтың художество традицияларын һаҡлау һәм үҫтереү өлкәһендәге ҙур ижади уныштары, шулай уҡ халыҡ мәҙәниәтен үҙләштереүгә йүнәлтелгән әүҙем педагогик һәм ағартыу эшмәкәрлеге өсөн бирелә, тиелә ил Хөкүмәте рәйесе Дмитрий Медведев ҡул ҡуйған тейешле бойороҡҡа аңлатмала. 2017 йылда "Халыҡ музыкаһы", "Халыҡ йыры", "Халыҡ оҫтаһы", "Традицион халыҡ мәҙәниәте" һәм "Халыҡ бейеүе" номинацияларында 15 премия тапшырыласаҡ. Премияға лайыҡ булған Асия Ғәйнуллина - халыҡ-ара һәм республика сәсәндәр конкурстары лауреаты, Башҡортостан башлығы грантына эйә. Асия Солтан ҡыҙы Башҡортостанда берҙән-бер сәсәндәр мәктәбен ойоштороусы ла.

# ФЕСТИВАЛГӘ САҠЫРАЛАР

**Екатеринбургтың Халыҡ ижады һарайында 22 октябрҙә XV "Башҡорт йыры" төбәк башҡорт мәҙәниәте фестивале үткәрелә. Сара Башҡортостан Республикаһы ойошторолоуҙың 100 йыллығына арнала.**

Быйыл Екатеринбургҡа Өфө, Сибай, Силәбе, Яр Саллы, Златоуст, Мейәс, Пермь, Ҡурған, Первоуральск, Полевской, Каменск-Уральский, Үрге Пышма, Березовский, Михайловск, Красноуфимск, Үрге Өфөлей ҡалаларынан ҡунаҡтарҙың һәм артистарҙың килеүе көтөлә. "Байрамда ҡатнашыусыларҙың һәммәһенең дә төп маҡсаты - башҡорт мәҙәниәтен, халыҡ ижады йолаларын үҫтереү һәм һаҡлау", - тип билдәләне байрамды ойоштороусы Свердловск өлкәһе башҡорттары үҙәге рәйесе Фәймә Йосопова. Был көндә йәмәғәт ойошмаһы булдырылыуға 20 йыл тулыуҙы ла билдәйҙәр. Үҙәк 2009 йылдан алып башҡорт тарихына, мәҙәниәтенә арналған төбәк-ара ғилми-ғәмәли конференциялар һәм башҡорт мәҙәниәте фестивалдәре уҙғара килә. 2000 йылда үҙәк эргәһендә "Йәдкәр" башҡорт үҙешмәкәр театр коллективы ойошторолдо. Коллектив "Ҡарға туйы", "Һабантуй", "Наурuз", "Нардуған" кеүек башҡорт байрамдары, шулай уҡ төрлө осрашыуҙар, концерттар, экскурсиялар, викториналар, әҙәби кисәләр һәм башҡорт халҡының тарихы буйынса әңгәмәләр ойоштороу менән мәшғүл.

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**21 октябрь "Йософ һәм Зөләйха"** (Ҡол Ғәли, Ю. Сафиуллин инсц.), музыкаль риүәйәт 12+

**22 октябрь "Бер мәл санаторийҙа..."** (Н. Ғәйетбаев), комедия 16+

**24 октябрь "Нәркәс"** (И. Йомағолов), мелоромантик трагедия 12+

**27 октябрь "Хыялға ҡаршы"** (А. Ишбулдина, А. Баймөхәмәтовтың "Калдырма, әсәй!" повесы буйынса) 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**21 октябрь "Чиполлино"** (Д. Родари), мажара. Башлана 12.00 0+

**22 октябрь "Тылсымлы тирмән"** (М. Кәрим), әкиәт. Башлана 12.00 0+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**22 октябрь "Три поросенка"** (С. Михалков). Башлана 12.00, 14.00 0+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**21 октябрь "Китмәҫкә килгән ҡошом"** (Э. Йәһүҙин), комедия 12+

## ҠОТЛАЙБЫҘ!



Баймаҡ районы Иҫке Сибай ауылында йәшәүсе беҙҙең өсөн ғәзиздәрҙән-ғәзиз әсәйебеҙ, ҡәйнәбеҙ, өләсәйебеҙ һәм ҡартәсәйебеҙ

**Миңлегөл Рауил ҡыҙы Усманованы**

оло юбилейы менән ихлас күңелдән ҡайнар ҡотлайбыҙ. Беҙҙең терәгебеҙ, кәңәшсебеҙ, әйбебеҙҙең йәме һәм ҡото һин булғанға беҙ бәхетле. Ғүмерең оҙон, һаулығың ныҡлы, бәхеттәрең тулы, күңелең тыныс булыуын теләйбеҙ.

*Ҡотло булһын тыуған көнөң,*
*Матур булып әтһин таңдарың.*
*Рәхәт йәшә, изгелеге ҡайтһын*
*Һин үҫтергән һәр бер балаңдың!*

*Ғүмерҙә бит йылдар билдәләмәй,*
*Йәшәү дәрте булһын күңелдә.*
*Сәләмәтлек, бәхет, ҡыуаныстар*
*Юлдаш булһын һиңә ғүмергә!*

**Иң изге теләктәр менән балаларың, килен-кейәүҙәрең, ейән-ейәнсәрҙәрең.**

## АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЙӘШЛЕКТӘ ХАТА ЯҺАҒАНДАР...

## йәшәргә иртәрәк өйрәнә

Бөтә сәйәсмәндәр ҙә бер төрлө: бөтәһе лә йылға булмаған ерҙә күпер төҙөргә ант итә.

**(Никита Хрущев).**

Кешене яратырҙан алда хөкөм итергә кәрәк, яратҡас, хөкөм итә алмаҫһың.

**(Марк Туллий Цицерон).**

Үҙҙәренең ҡоллоҡ менән көмһетелгәнен аңламаған халыҡ ҡалай йәл миңә. Тимәк, улар ҡол булыр өсөн тыуған.

**(Петр Чаадаев).**

Илһам - ул ялҡауҙарҙы урап үтеүсе ҡунаҡ.

**(Петр Чайковский).**

Ҡатын-ҡыҙ бирешмәһә - еңә, бирешһә - еңеүсегә үҙ шарттарын таға.

**(Карел Чапек).**

Бер үлтереү кешене енәйәтсе итә, йөҙәрләгән ғүмерҙе өҙөү уны батыр итә. Бөтә эш - масштабтарҙа.

**(Чарльз Чаплин).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер ваҡыт сәйәхәт итеүсе дәрүиш каруанһарайҙа ял итеп китергә туҡтала, йәнәшәһендә урынлашыусы һаран сауҙагәр менән таныша. Хәбәремде тыңлай белгән кешене осраттым бит әле, тип, сауҙагәр бик шатлана һәм аҡыллы ҡартҡа хәбәрен һөйләй башлай:**

**- Мин һәр бер тәңкә аҡсаны ҡәҙерләп һаҡлайым, һәр эштә уның килемле булыу яғын уйлайым, бер нәмәне лә бушҡа әрәм итмәҫкә тырышам. Бар ғүмерем буйы мин үҙемдә йәлләмәй байлыҡ йыйҙым, ә минең алама туғандарым мине яратмай, һаран, ахмаҡ тип рәнйетеп кенә тора...**

**- О, улар хаҡлы түгелдәр... - тип йомшаҡ тауыш менән яуаплай дәрүиш.**

**- Һин ысынлап та шулай уйлайһыңмы? - ти шатланып сауҙагәр.**

**- Әлбиттә! Үҙенең туғандарын хәстәрләп, улар өсөн йәшәп, улар өсөн үҙ ауыҙынан өҙөп байлыҡ туплаған тағы ниндәй йомарт кеше бар донъяла!**

**- Нисек инде ул?..- тип аптырап китә сауҙагәр, ҡарт һөйләгән кешенең үҙенә тап килмәгәнен аңлап.**

**- Бына шулай... - ти дәрүиш. - Килер бер көн, һинең йәнең тәнеңдән айырылыр, уға инде бер ниндәй ер байлыҡтары ла кәрәкмәҫ. Теләйһеңме-юҡмы, бар байлығың ярлы туғандарыңа күсәсәк. Нисек уйлайһың, шул ваҡыт туғандарың кемгә рәхмәт сүрәләре уҡыр: һиңәме, йә берәй ярлы ҡоҙаңамы?"**

1582218911006

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты -
20 октябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4677
Заказ - 2140/10